# ДАЛАЛАҒЫ УТТАР

## ПРОЛОГ

Беренсе биш йыллыҡтың һуңғы йылдарының береһендә, яҙғы сәсеү ваҡытында, миңә Уралдағы орлоҡ совхоздарының береһенә командировкаға барырға тура килде.

Совхоздың үҙәк усадьбаһынан 20—25 километрҙар самаһы алыҫлыҡта бер тимер юл станцияһына кискә ҡарай ғына килеп төштөм.

Совхозға барырға ат әҙерләп йөрөгәндә, совхоздарҙың йөк йөрөтөүсе автомобиле, рустар әйтмешләй, случайно ғына осраны.

Автомобилдең ҡабырғаһына «Урал» совхозы транспорты № 15» тип яҙылғайны. Шофер шунда уҡ мине совхозға алып барырға риза булды. Уның менән ҡушлап кабинкаға ултырҙыҡ.

Беҙ ҡуҙғалып киткәндә, ҡояш байығайны инде. Оҙаҡламай ҡараңғы ла төштө.

Тик беҙҙең сәйәхәт оҙаҡҡа барманы.

Станциянан ун километр самаһы киткәс тә, автомобилдең шины шартланы. Запас шин юҡ ине.

Бәхеткә ҡаршы, совхоздың тракторҙар базаһы алыҫ та түгел икән. Бер нисә аҙымда ғына аҡһыл палатка һәм уның эргәһендә костер яныуы, алыҫ та түгел эшләп йөрөгән тракторҙарҙың уттары күренде.

— Бында 5-се үҙәк участканың 2-се бригадаһы эшләй,— тине шофер.

Брезенттан эшләнгән палатка ҙур ине. Уның эсендә ике яҡлап ағас карауат — “тапчанка”лар теҙелгән. Уртала оҙон өҫтәл. Өҫтәл өҫтөндә унлы кәрәсин лампаһы яна. Лампа алдында бер, былай ҡарауға, йәшерәк кенә кеше (ул көн тужурка кейгән) нәмәлер яҙынып ултыра. 8 койканың икеһендә йоҡлайҙар.

Теге кеше менән танышып киттек. Ул бригадир булып сыҡты.

Шофер шин һорап алды һәм миңә ҡарап:

— Мин хәҙер рәтләп бөтөрәм, иптәш, китергә мөмкин,— тине.

Ләкин мин иртәнгә тиклем бында ҡалырға булдым. Бына был аҡ палатка, уның эсендәге тәртипле йыйыштырылған койкалар, палатканың эсен яҡтыртып торған лампа, өҫтәлдәрҙең берећендә тәртип менән теҙеп ҡуйылған газета-журналдар һәм яйлы, яғымлы һөйләшә торған бригадир — бына ошо күренеш, нисектер, мине үҙенә тартты.

Шофер китте, беҙ бригадир менән ҡалдыҡ.

Палатка эсендә бер бағанаға таҡта ҡаҙаҡланған, таҡтаға стена газетаһы эленгән.

Уның бер яғына русса, ә икенсе яғына латин алфавитында «Штурм» тип яҙылған. Унан һуң асыҡ һәм матур итеп яҙылған «шапкалар»:

«Ударсылыҡ — яҙғы сәсеү планын уңышлы үтәүҙең залогы», ҙур хәрефтәр менән ике телдә лә «30 000 га өсөн көрәш сводкаһы» тип әйткән баш менән газета сыҡҡан көнгә пландың үтәлеше, ҡайһы тракторҙың ул көндә күпме эшләүе һәм башҡалар яҙылған. «Тракторсы Нәғимов бөгөн көнлөк заданиеһын 125 процентҡа үтәне. Майлау һәм яғыу материалдарын 20 процентҡа экономить итте» тип яҙған хәбәр бар ине.

— Был газетаны юлға һалыусы совхоздың уҡытыусыһы Тулумбиков иптәш,— тине бригадир,— бөгөн ул икенсе участкаға китте. Газетаны көн дә сығарып барасаҡбыҙ. Бик һәйбәт егет. Тырыша ла һуң. Эшселәр бик яраталар үҙен...

Һөйләшә торғас, беҙ совхоз хәлдәренә, совхоздың үткән көндәренә, беренсе көндәренә киттек. Бригадир һөйләшергә ярата торған кеше булып сыҡты.

— Был ерҙә лә, әле бынан ике генә йыл элек, бер нәмә лә юҡ ине. Әллә ҡайҙарға тиклем тигеҙ йәйелеп ятҡан киң яландар ғына ине. Беҙҙең ауыл бынан 30 километр булыр — Уралға ҡарай. Беҙҙең ауыл күптән түгел Башҡортостанға күсеп ултырған.

Күргәнһегеҙҙер, тимер юл менән станцияға етә килгәндә, ҙур ғына бер йылға юлға яҡынлашып китә. Ул «Яйыҡ» йылғаһы. Рустар уны «Урал», ә татарҙар, башҡорттар, ҡаҙаҡтар «Яйыҡ» тип йөрөтәләр.

Элекке ваҡытта бында, был яландарҙа, ебәләй генә үҫеп ултыра ине. Ауылдар һирәк. Ауылдар тирәһендә генә бер аҙ ер һөрөлөп сәселһә лә, алыҫлаша барған һайын һөргән ер күрмәйһең. Гел үлән үҫеп ултырған туғайҙар, ҡашлаҡтар, һырттар китә. Икенсе замандарҙа «Яйыҡ» йылғаһының теге яғында башҡорттар, был яғында ҡаҙаҡтар йәй буйынса күсенеп, ҙур көтөүҙәр менән мал ҡыуып йөрөгәндәр. Улар әле минең дә хәтерҙә. Бер урынға барып ултыралар ҙа кейеҙ тирмәләр ҡуялар...

Ҡыҫҡаһы, бына шул иге-сиге күренмәгән яланға килдек тә, бынан ике йыл элек, мин әйтәм — совхоз төҙөй башланыҡ. Мин иң башта землемерҙар менән йөрөнөм. Унан һуң плотниктар янында эшләнем. Фундамент урындары ҡаҙыныҡ; станциянан ағас, тимер-томор материалдар ташыныҡ.

Тракторҙар, һабандар, диск тырмалары, культиваторҙар килтерҙеләр.

Бер ауылда тракторсылар курсы асылды. Мин дә шунда уҡып сыҡтым.

Әле быларҙы һөйләү генә рәхәт. Башта бик ауыр саҡтар булды. Бына быйыл ҡыш ҡына әле ниндәй ҡыйынлыҡтар күрмәнек... Совхозда бер аҙ торһаң, ишетерһең әле.

Шулай ҙа, ер яратылғандан бирле һабан күрмәгән сиҙәмдәрҙе һөрөп сәстек тә беренсе йылда ғына ла әллә нисә мең бот бойҙай алдыҡ. Беренсе йылда урожай шәптән булманы... Шулай ҙа бит беренсе йыл ғына әле... Беҙ шул яҙҙы эшләп йөрөгәндә, бөтөнләй уңмаҫ, тип шикләнә торғайныҡ. Уйлап ҡара: бындағы үлән тамыры ул тәрәнгә генә киткән. Үҙе ҡаты. Сиҙәмде трактор менән аҡтарабыҙ. Дискылар менән киҫтерәбеҙ. Шулай ҙа бит ер ваҡланып бөтмәй. Көслө бит ул «Катер», «Интер» тракторҙары. Яртышар метр киңлектә кәҫтәрҙе умырып әйләндереп ташлайһың. Шулай ҙа эре ер йомшарып етмәй...

Башланған саҡта, ауылдарҙа ышанмай торғандар ине.

— Беҙ әле, аҙ ғына ерҙе алып, шул ергә ни тиклем тир түгәбеҙ. Меңәр гектар уйын түгел бит. Кем күргәне бар шул тиклем ергә сметь итеп тотонғанды. Машина тигәс тә — ай-ай шул тиклем ерҙе эшләүе бик мөшкөл бит...— ти торғандар ине ауылда. Хәҙер инде улай түгел.

Уҙған йыл 21 000 гектар сәскәйнек. Быйыл бына 30 000 га өсөн көрәшәбеҙ. Күрше колхоздарға ла ярҙам итәбеҙ...

Шулай һөйләне бригадир.

Бер аҙҙан палатка эргәһенә гөрөлдәп трактор килеп туҡтаны. Ул, палатканың эргәһендә үк, бер аҙ туҡылдап торҙо ла туҡтаны. Палатkаға тракторсы килеп инде.

— Һаумыһығыҙ,— тине ул һәм ике койкала йоҡлап ятыусыларҙың береһен уята башланы.

— Хәсән, тор, тор давай...

Бригадир әле генә ингән тракторсыға күрһәтеп:

— Бына ошо инде ана газетаға яҙылған ударник Нәғимов,— тине. Минең турала ла Нәғимовҡа әйтте. Нәғимов йылмайып күреште лә өҫтөндәге комбинезонын һала башланы. Уның бит-ҡулдары, ҡарайып, төрлө май, саңға буялып бөткән.

Ул уятҡан егет тә тороп ултырҙы һәм, күҙҙәрен, йоҙроғо менән һыйпап, йоҡоло тауыш менән:

— Оҙаҡ йоҡлағанмын ахыры,— тине. Бер иркенләп кирелде лә, өҫтөндәге таҙа кейемдәрен һалып, койка аҫтындағы ҙур ғына тартманан комбинезон сығарып кейенә башланы. Нәғимов уға ҡарап:

— Заправкаға булышырғамы?—тине.

— Ничево, бар әйҙә һин йыуын...

Нәғимов, тик эске ыштанынан ғына ҡалып, йыуынып инде. Ул киң һәм ҡалын күкрәкле, ҡояшҡа бешкәнлектән ҡарайған таҙа тәнле ине. Минең башҡа, «дуҫтары бар ахыры быларҙың», тигән уй килде.

Нәғимов йоҡлап ятҡан икенсе бер кешенең баш осонан таҫтамал алып һөртөнә башланы, йоҡлаусы хәрәкәткә килде. Яҡтыға ҡарай боролдо. Шунан һуң ғына мин уның ҡатын кеше икәнен күрҙем.

Уянған ҡатын йылмайып Нәғимовҡа ҡараны.

— Һин әле генә ҡайттыңмы ни? Хәсән киттеме?— тип һораны.

— Был — Нәғимовтың ҡатыны Ғәлиә. Башта плотник булып эшләне. Быйыл яҙға ҡарай тракторҙа эшләргә өйрәнде. Ударсы ҡатын...— тине миңә бригадир аҡрын ғына.

Беҙ палатканан сыҡтыҡ. Көнсығышта офоҡ аҙ ғына, саҡ ҡына һиҙелерлек булып ағара башлаған.

— Ана совхоздың үҙәк усадьбаһында уттар күренә,— тине бригадир һәм ул яҡтағы алыҫтан теҙелеп күренгән уттарға күрһәтте. Унда бер нисә рәт булып теҙелгән фонарҙарҙан булырға кәрәк — электрҙың аҡһыл уттары күренә. Тирә-яҡҡа ҡараһаң да, тегендә лә, бында ла уттар йымылдайҙар.

— Ә ул уттар — трактор фонарҙары,— ти бригадир.

Йәйҙең төнгө тын һауаһында төнгө сменала эшләүсе тракторҙарҙың һалмаҡ гөрөлдәүҙәре яңғырай.

Палатка эргәһендә теге Хәсән тигән тракторсы коптер яҡтыһында тракторҙы заправить итә.

Далалағы уттар һәм төнгө даланы яңғыратҡан трактор тауыштары күңелде күтәрә. Төн шундай йәмле тойола. Далалағы уттарҙы күргәс, тракторҙар гөрөлтөһөн ишеткәс — тракторҙарҙың эше күҙ алдына килә: көндәр-төндәр буйы тракторҙар дүртәр төрәнле ҙур һабандар менән сиҙәмдәрҙе аҡтаралар, кәҫтәрҙе киң таҫмалар яһап ҡырҡып алалар ҙа, үләнде аҫҡа ҡалдырып, тупраҡты юғарыға күтәрәләр. Дискылы тырмалар менән ана шул үләне менән аҫҡа әйләнгән кәҫтәрҙе ваҡлайҙар. Унан һуң ерҙе зигзагтар менән тағы ла йомшарталар. Сеялкалар таҙартылған эре бойҙай орлоҡтарын тупраҡ эсенә ташлайҙар...

Оҙаҡламай, бына ошо яландарҙа йәшәреп ужым сығыр. Бөтә дала йәшел ужым булыр, бойҙай үҫер, бойҙай күп булыр...

Далалағы уттар ана шул бойҙайҙар өсөн яналар, тракторҙар ана шул гөрләп үҫәсәк бойҙайҙар өсөн гөрләйҙәр.

Палатка эсендә бер-береһенең ҡосағына ағылырға әҙер торған ирле-ҡатынлы Нәғимов менән Ғәлиә генә ҡалдылар. Улар ҙа ана шул шаулап

үҫәсәк бойҙайҙар, шаулап үҫә торған, гөрләп алға бара торған совхоз өсөн йылмаялар кеүек...

Яҡындан да, алыҫтан да далала уттар йылтырайҙар...

Бына шул киң яландарҙы бойҙай яландарына әйләндереүсе кешеләр менән миңә күп кенә ваҡыт бергә эшләргә, улар менән яҡындан танышырға тура килде. Тулумбиковтар, Нәғимовтар, Ғәлиәләр минең дуҫтар булдылар. Их тракторсы дуҫтар, һеҙҙең турала, һеҙҙең эш, көрәш тураһында башҡаларға һөйләге килә. Башҡаларға ла белдерәһе килә далалағы көрәште.

Ҡыш башланды.

Яланда күбәләк-күбәләк ҡарҙар яуа. Ҡар киҫәктәре күкте ҡаплап алған ҡараһыу-һоро болоттар араһынан борғоланып-борғоланып төшәләр ҙә, ергә төшкәс, урын һайлаған кеүек, бер урындан икенсе урынға күсеп ҡуялар. Әйтерһең, ҡар киҫәктәре бына шул төшкән урында ҡыш буйы ятасаҡтарын беләләр ҙә, бер-береһенә һырығып,  ер өҫтөнә яйлабыраҡ урынлашырға тырышалар.

Дала өҫтөндә елһеҙ, тын ғына беренсе ҡарҙар яуа, әле ҡарға күмелергә өлгөрә алмаған йәйге юлдан юлсы килә. Юлсының өҫтөндә иҫкергәнерәк ҡалын пинжәк, аяҡтарында обмотка урап кейелгән ҙур ботинкалар һәм башында шоферҙар бүрке. Ул арҡаһына ҙур ғына тоҡ аҫҡан һәм ун ҡулына таяҡ тотҡан.

Далала мамыҡ кеүек беренсе ҡар яуа. Ләкин йәйге юлдарҙы әле ҡар күмеп китергә өлгөрә алмаған, йәйге юлдарҙа һаман да әле тәгәрмәс, ат эҙҙәре беленеп ята.

Юлсы ана шул йәйге юл менән «Яйыҡ» йылғаһы буйындағы «Урал» совхозына бара.

Ул совхозға яҡынлашҡанда, көн ҡараңғылана башлағайны инде. Шулай ҙа, киске ҡараңғылыҡ, ҡуйы яуған ҡарҙар аша юлсы алда совхоз йорттарының шәүләләрен күрҙе. Тоноҡ ҡына булып трактор моторының гөрөлдәүе һәм электр станцияһында двигатель туҡылдағаны ишетелде. Оҙаҡ та үтмәй юлсының алдында, ер аҫтынан сыҡҡан кеүек, землянка һәм

тәпәшәк кенә таҡта өйҙәр күренделәр. Баштары ерҙән аҙ ғына күренеп торған землянкалар һәм таҡтанан яһалған кескәй генә өйҙәр тәртипһеҙ рәүештә бер тегендә, бер бында таралғандар. «Урал» совхозына беренсе генә тапҡыр аяҡ баҫҡан беҙҙең юлсы, был землянкалар һәм таҡта йорттар араһына килеп ингәс, башта ике ҡулы менән дә таяғына таянып, аптырашҡа ҡалған кеше кеүек, тирә-яҡҡа ҡаранып торҙо һәм ауыҙ эсенән: «был йорттарҙың ҡайһыһына инергә икән» тип мығырҙаны. Өйҙәр араһында ҙурыраҡ һәм оҙонораҡ күренгән береһенең түбәһендәге мөрйәһенән төтөн сыҡҡанын күргәс, ул туп-тура шул өйгә барып ишеген асты. Ишекте асыу менән, юлсының йөҙөнә өй эсенән төрлө еҫтәр менән аралашҡан ҡуйы эҫе һауа килеп бәрелде. Күп кеше тора торған урындарға ғына хас — аш бешергәндә, аяҡ кейеме киптергәндә сыға торған төрлө еҫтәр юлсының моронон ярып инделәр.

— Һаумыһығыҙ, — тине юлсы һәм, ишек төбөнә инеп баҫҡан килеш, өйҙөң эсен күҙләп алды.

Таҡтанан эшләнгән кескәй генә казарманың эсендә ике яҡлап ағас койкалар теҙелгән. Уртала ике урында өҫтәл. Бер өҫтәлде тирәләп ултырған дүрт кеше кәрт уйнайҙар.

Кәрт уйнап ултырғандарҙың береһе лә ишектән инеүсегә боролоп ҡараманы. Тик ишек төбөндәрәк бер койкала нәмәлер тегенеп ултырған, туҙған сәсле, ябыҡ ҡына ҡатын, асылып торған күкрәгеп күлдәк яғаһы менән япҡылап:

— Һаубыҙ әле, — тине һәм, шунда эргәһендә илап ятҡан имсәк балаһына ҡарап, асыулы тауыш менән:

— Бысаҡ кергере бала, илама,— тип мығырҙаны һәм унан һуң иркәләргә тотондо:

— Илама балаҡайым... Мәм-мәм-мәм... — Ләкин йәш бала һаман өҙлөгөп-өҙлөгөп илауында дауам итте.

Казарманың икенсе башындараҡ янып торған тимер мейес өҫтөндә котелок һәм сәйнүктәр сыжылдап ҡайнап ултыра. Шунда уҡ тимер мейестең ике яғына баҫҡан ике ҡатын сарылдап әрләшәләр.

— Тыҡма бында үҙеңдең лаҡан кеүек сәйнүгеңде..,

— Ниңә, әллә тимер мейескә хужа түгелһеңдер бит...

— Ярай, әллә һин хужаһыңмы? Совхозда хужа юҡ... Күп сәрелдәмә!..

— Ниңә этәрәһең минең сәйнүкте, сиған мәрйәһе...

Тимер мейес өҫтөндә сәй ҡайнатырға урын өсөн талашҡан был ике ҡатын бәлки талаштарын һаман да дауам итерҙәр ине — ләкин өҫтәл артында кәрт уйнап ултырған дүрт ир кешенең береһе урынынан торҙо ла, ҡатындарға ҡарап:

— Как-так хужа юҡ ти совхозда. Бына мин хужа. Ҡайҙа, нәмә бар унда, нәмәгә хужа таба алмайһығыҙ?..

Шул һүҙҙәр артынан уҡ, ул, өҫтәл эргәһенән ҡуҙғалып, тимер мейескә ҡарай атланы. Ҡыҫҡа ғына буйлы, йыуантыҡ һәм түңәрәк кенә битен ҡара йөн баҫҡан был кеше, аҡһаҡлап, әлеге ике ҡатын эргәһенә барҙы ла, береһенең яурынына ҡулын һалып:

— Их, Шәмсекәй, һине рәнйетәләрме ни?— тине.— Әгәр ҙә мин тимер мейес булһам, үҙемдең арҡала икегеҙгә лә урын бирер инем...

Өҫтәл эргәһендә ҡалған өс ир кеше йылмаялар. Уларҙың береһе аҡһаҡҡа ҡысҡырҙы:

— Әй, Ғалимьян, ход һинеке, ҡатының менән төндә лә һөйөшөрһөң әле...

— Ну туймай ҙа инде ҡатындар тирәһендә йөрөүҙән...

Ғалимьян аҡһаҡлап тағы ла өҫтәл эргәһенә килде һәм тегеләргә яуап итеп:

— Ҡатындарҙы һәр ваҡыт яратырға кәрәк уларҙы. Төндә генә ярат та, көндөҙ әйләнеп тә ҡарама, эшме ни ул... — тине.

Юлсы, бер аҙ баҫып торғандан һуң, арҡаһындағы тоҡтарын алып, таяғы менән бергә шунда ишек төбөнә ҡуйҙы ла шул яҡтағы ҙур ғына

койканың башына ултырҙы һәм шул уҡ койка эргәһендә быймаға төп һалып маташҡан ҡарт кешегә ҡарап:

— Нисек, ағай, һеҙ бында ниндәй эштә эшләйһегеҙ? — тине.

— Урыҫ тип торам, үҙебеҙҙең мосолманһың икән,— тине - Беҙ бында плотник эше эшләйбеҙ. Үҙең ҡайҙан киләһең һуң?

— Эш эҙләп киләм...

Юлсы кеҫәһенән тәмәке янсығы сығарып тәмәке төрә башланы. Ҡарт та, быймаһын бер яҡҡа ҡуйып, тәмәкегә тотондо.

— Эш бар инде ул... Бигерәк тә бына хәҙер плотниктар кәрәк, тиҙәр. Яңы мастерской, казармалар эшләтәләр... Үҙең ниндәй эш менән йөрөйһөң, шофермы, нәмә тип әйткән кеүек. Әллә тракторисмы?

— Өҫтөнә һуҡтың — тракторисмын. Шоферлыҡҡа ла булдырып була. Ашау-эсеү яғы бик насар түгелме?

— Бер юлы яманларлыҡ түгел — түгелен дә... Ашау тураһында һөйләгәнде ишеткәс, кәрт уйнап ултырыусыларҙың Ғалимьян тигәне, ишеккә боролоп:

— Ашау һәйбәт... Тик аштарынан үтә ҡараһаң, Мәскәү күренерлек, — тине һәм, эргәһендәгеләргә ҡарап:

— Әй, егеттәр. Кәрттә бәхет юҡ минең. Суҡынып китһен мәрйәһе,— тип урынынан ҡуҙғалды ла ишек төбөндә һөйләшеүселәр эргәһенә килде. Ул ҡарттың койкаһына килеп ултырҙы.

— Ҡайһы яҡтыҡы булаһың үҙең, дуҫ кеше? — Был һорау юлсыға ҡаратылғайны. Юлсы, тәмәкеһен оҙаҡ итеп кенә һурғандан һуң, тыныс ҡына:

— Алыҫтыҡы...— тине. Ләкин аҡһаҡтың яуапһыҙ ҡалғыһы килмәне:

— Шулай ҙа...

— Ағиҙел буйындағы «Н» ҡалаһынан...

— Ну, тимәк, яҡташ булабыҙ инде. Мин дә шул яҡтыҡы бит. Нәҡ унан алыҫ түгел быяла заводы бар, беләһендер шәй?

— Беләм, әлбиттә...

— Бына! Алыҫ тигән булаһың. Ҡайҙа, тәмәкегә бай түгелһеңме, яҠташ. Өсөнсө көн бер пачка папирус биргәйнеләр, бөттө ләбаһа, ҡәһәрең...

Өҫтәл эргәһендәгеләр ҙә уйындан һүрелә башланылармы, әллә үҙҙәренең дә тәмәке тарткылары килдеме, улар ҙа ултырған урындарынан быларҙың һүҙҙәренә ҡыҫыла башланылар. Ерән сәсле бер рус егете аҠһаҠҡа ҡаратып:

— Атам тиһең, Ғалимьян, ә? Тура тейҙерҙең, брат,— тине. Икенсеһе өҫтәп ҡуйҙы:

— Галош ҡойорға оҫта инде ул...

АҠһаҠ, бик иркенләп «кәҙә сыйрағы» яһап тоҠандырғандан һуң, тегеләрҙең һүҙенә яуап ҡайтармай, ашау тураһында дауам итте:

— Мәскәү күренер, мин әйтәм, шундай шыйыҠ ашаталар. Ысын итте күргән юҠ инде уны. Үпкәләр, бауырҙар шунда, серегән кәбеҫтә менән буташтырып һалалар ҙа, әйҙә... Ярай икмәкте етерлек бирәләр. Унһыҙ бөлөр инек...

Ҡарт тәмәке төпсөгөн, иҙәнгә һалып, ойоҠсан аяғы менән таптап һүндерҙе лә тағы ла быймаһына тотондо һәм иренсәк кенә тауыш менән:

— Хәҙергә арыу әле... Нәфсе тигән нәмә туймай инде ул... тип мығырланы.— Ә бына мунса-маҙар юҠлығы бик ыҙалай...

— Уныһын һөйләмә инде. Мунсаһы ла, һыуы ла юҠ. Белмәҫһең начальство булып ниндәй халыҠ ултыра... Бында һыуҙы өс саҠрымдан килтерәләр. Ә мунса сабынғың килһә, теләһәң нишлә: мунса эҙләп тирә-яҠ ауылдарға ун бишәр саҠрымға китәһең. Чистай хәйерселәре кеүек...

— Эшселәр күпме һуң совхозда?

— Биш йөҙләп бар...

Ике өҫтәлдә кескәй генә ике лампа яндырылды. Ирҙәрҙең ҡай берҙәре, ҙур ҡомғандар алып, столовойға ҡайнаған һыу алырға киттеләр.

Юлсы менән һөйләшеп ултырған ҡарт та үҙенең карауаты башындағы тәҙрә төбөнән кескәй генә лампа алып яндырҙы һәм быйма төбө һалыуын дауам итте.

Плотник Ғалимьян үҙенең карауаты аҫтынан ике рәтле ҙур гармун тартып сығарҙы ла, ҡыҫҡараҡ булған аяғын таҙа аяғы өҫтөнә ҡуйып, аҡрын ғына уйнарға тотондо. Ләкин аҡһаҡ уйнарға белмәй ине. Тирә- яҡтағылар унан көлөргә тотондолар:

— Ана беҙҙең гармунсы тағы ла башланы...

— Өҙә инде үҙәкте...

— Театрҙа ғына йөрөрлөк тә бит — ята бында әрәм булып, плотник эшендә эшләп...

Аҡһаҡ бер кемдең дә һүҙенә иғтибар бирмәй — башын бер яҡҡа ҡыйшайтып, эйәген гармун аҫтына ҡуйған да — аҡрын ғына, теләһә ниндәй баҫмаҡҡа баҫып, төрлө тауыштар сығара. Ләкин бер көй ҙә сыҡмай.

— Их, уйнай белһәм,— ти аҡһаҡ, үҙ-үҙенә  һөйләнә. Быйма төпләп ултырған ҡарт аҡһаҡ Ғалимьянға:

— Уйнай белмәгәс, нәмәгә алдың инде уны аҡса әрәм итеп... — ти, ләкин үҙе күтәрелеп ҡарамай. Ғалимьян, уға яуап бирмәгән кеүек, танау осонан ғына мығырҙаны:

— Йорт-ер ҙә юҡ, атай-әсәй ҙә юҡ... Етемһерәгән ваҡыттарҙа күңелгә ял булырмы әллә, мин әйтәм, их, гармунҡай, ну шәп тә инде гармуны...

Юлсы ла гармунға ҡарап ултыра.

— Ысынлап та шәп күренә гармуның... Немецкий строй үҙе...

Һүҙҙән һүҙ китте. Гармун юлсы ҡулына күсте. Юлсы, гармундың бер нисә телен бергә баҫҡылап, мехты бер-ике тапҡыр һуҙғас та — казарма эсендәге кешеләр уға ҡаранылар.

Ә юлсы шунда уҡ ҡыҙыу ғына темп менән бармаҡтарын тиҙ-тиҙ йөрөтөп татарса бер көй уйнап ебәрҙе. Татар һәм башҡорт эшселәре юлсы тирәһенә йыйылдылар. Татарсанан ул рустың «Коробочка» көйөнә күсте.

Казарманың эсе гармундың матур тауышы менән тулды. Ҡай берәүҙәр аяҡтарын тупылдата башланылар.

Юлсы ҡыҙып-ҡыҙып гармунда уйнағанда, казармаға бер ҡыҙ килеп инде. Кескәй генә ике лампа яҡтыһында уның йөҙөн, өҫ-башын ныҡлап күрергә мөмкин булмаһа ла, юлсы ул ҡыҙҙың ҡара күҙҙәре менән, ҡара ҡаштарын күреп ҡалды. Был ҡыҙ ҡыҫҡа тун һәм быйма кейгән, башына шәл бәйләгәйне. Ишектән ингәс тә, ул туп-тура юлсы ултырған койка эргәһенә килеп сисенә башланы һәм быйма төбө һалып ултырған ҡартҡа ҡарап:

— Атай, столовойға барырға ваҡыттыр инде? — тине. Ул ҡулындағы кескәй генә балта менән йышҡыны койка аҫтына ташланы ла башындағы шәлен һәм өҫтөндәге тунын һалды. Ирекһеҙҙән гармун уйнап ултырған юлсыға күҙ ташланы. Казармалағылар:

— Ә, Галина, бөгөн оҙаҡланың һин...

— Атайың ҡарт, һине көтөп, зарығып бөттө инде...

— Һеҙ ул казарманың түбәһен эшләп бөтөрмәнегеҙме әле? — тип әйткән төрлө һүҙҙәрҙе, һорауҙарҙы яуҙырҙылар.

Һәр көндә эштән ҡайтҡас та, казармалағыларҙың һәр береһе менән йылмайып һөйләшеп сыға торған Галина бөгөн был һорауҙарҙың күбеһен яуапһыҙ ҡалдырҙы. Үҙҙәренең карауат башында шоферҙар бүрке кейгән бер ят кешенең матур итеп гармунда уйнап ултырыуы һәм гармундың матур уйналыуы Галинаның йөрәгендә әллә ниндәй бер, тиҙ генә аңлатып булмай торған йоғонто яһаны. «Был ниндәй кеше икән» тип уйлай Галина... Ә егет матур күренә. Гармунда ла матур уйнай. Ниндәй матур уйнай ул гармунда!..

Ике ҡатарлы немецкий стройлы гармун тауышы, матур яңғырап, казарма эсен шаулата. Плотниктарҙың да йөҙҙәрендә йәнләнеү күренә. Уларҙың ҡай берҙәре, бигерәк тә, ҡатын-ҡыҙҙар өндәшмәй генә ярым йылмайыулы йөҙ менән гармунсының гармун баҫмаҡтары өҫтөнән йылдам йөрөгән бармаҡтарына ҡарап торалар.

Ә аҡһаҡ Ғалимьян ни эшләргә белмәй. Тирә-яҡтағыларға ҡарап:

— Бына күрҙегеҙме. Ниндәй шәп, ә! Бына минең яҡташ нисек өҙҙөрә!.. —тип һөйләнә.

Галина ҡайтып ингәндә, Ғалимьян уға ташланды.

— Ғәлиә (рустар уны «Галина» тип йөрөтәләр) туғанҡайым, һеңелкәйем, теләһәң нишлә — тик бер бейейһең. Бер ниндәй ҙә ыҡ-мыҡ булмаһын...

Гармун уйнаусы, аҡһаҡтың бейеү тураһында һүҙ ҡхҙғатҡанын ишеткәс тә, йыш ҡына темп менән «Сербиянка» көйөн уйнарға тотондо. Баҡыр кеүек ерән сәсле һәм сөлкәрәк йөҙлө баяғы рус егете түҙә алманы — бер аҙ ваҡыт ауыҙ эсенән генә:

«Сербиянка, кудри вьются...» — тип мығырҙаны ла уртаға сығып бейергә тотондо. Ләкин Ғалимьян Галинаны тыныс ҡалдырманы. Башҡалар ҙа уға ҡушылдылар. Ерән сәсле егет һуңғы тапҡыр бер нисә әйләнеп сыҡты ла Галина алдына барып баш эйҙе.

Плотниктар араһында ғына түгел, бөтә совхозда оҫта бейеүсе Галина һәр бер халыҡ йыйылған урында гармунға бейеүҙән баш тартмай ине. Тик бөгөн ул — әллә эштән арып ҡайтҡанғамы, әллә гармун уйнаусы егет бөтөнләй ят булғанғамы — бик оҙаҡ тартынып торҙо. Бөтөнләй ҡатнашмаҫҡа булып, ул ныҡлап карауатҡа ла ултырғайны. Ләкин шунда уҡ гармунсы «Гопак» көйөн уйнап ебәрҙе. Галина түҙә алманы, һикереп тороп, уртаға сыҡты һәм, башҡаларҙың ҡул сабып тороуҙары аҫтында, тиҙ генә шыма хәрәкәттәр яһай башланы.

Гармун уйнаусы юлсы егет, Галина бейеп бөтөргәнсе, унан күҙен алманы һәм үҙенең дә шул ҡыҙ менән ҡаршылап бейегеһе килде. Шунда ул гармундың телдәрен дә йышыраҡ баҫты, мехты йышыраҡ тартты — уның йөрәге, бейегән матур ҡыҙ хәрәкәте кеүек, йыш һәм елкенеп тибә ине.

Галина, бейеүҙән туҡтап, тынын йыш-йыш алып, карауатҡа килеп ултырыуы менән, ишектән ҡулына папка тотҡан бер кеше килеп инде. Казармалағылар барыһы ла уға ҡаранылар.

— Һеҙҙең бында бары ла иҫкеләрме? — тине ул һәм папкаһын асып ҡағыҙҙар аҡтарырға тотондо.

— Барыбыҙ ҙа иҫкеләр...— тине аҡһаҡ Ғалимьян.— Бына Васьканың ғына ҡатыны больницанан ҡайтып етһә — яңы кеше алып ҡайтыр, бәлки...

Плотниктар йылмайыштылар... Гармунда уйнаусы егет уйнауҙан туҡтаны һәм папка тотҡан кешегә ентекләп ҡарарға тотондо.

— Ә был кем? Быны мин күргәнем юҡ ине...

— Беҙ танышбыҙ, гражданин Потапов. Минең фамилиям Нәғимов. Шайәт онотмағанһығыҙҙыр...— тине юлсы.

Потапов оҙаҡ ҡына Нәғимовҡа ҡарап торҙо ла:

— Ғүмеремдә беренсе тапҡыр күрәм... — тип мығырҙаны.

Плотниктар әле генә килеп ингән юлсының совхоз коменданты һәм завхозы Потаповты таныуына һәм Нәғимовтың мыҫҡыллабыраҡ әйтелгән һүҙенә аптырап ҡалдылар.

— Был иптәш минең яҡташ, товарищ завхоз... Ул әле генә килгән. Иртәгә эшләй башлай. Бөгөнгә минең янда ғына ҡуна, — тине Ғалимьян һәм мыҫҡыллап «ваша благородия» тине лә честь биреп ҡуйҙы.

— Бында эшләмәгән кешеләргә совхоз йортонда ҡунырға ярамай. Частный землянкаларға барығыҙ,— тине Потапов.

Нәғимовтың күҙҙәре асыу менән йылтыранылар. Ул тыныс ҡына тауыш менән:

— Ярай. Бөгөнгә мин ошонда ҡалам. Төнө менән ниндәйҙер землянка эҙләп йөрөй алмайым, — тине.

— Совхозда квартир кризисы. Теләһә кемде ятҡырып булмай. Иртәгә эшкә инә торған булһағыҙ, ҡалығыҙ инде әйҙә...

Шул һүҙҙәр менән Потапов сығып китте.

— Нисек һинең таныш ул, яҡташ? — Ғалимьян тарафынан бирелгән был һорауға Нәғимов яуап бирмәне.

— Бөгөнгә, яҡташ дуҫ, бергә ятайыҡ инде. Иртәгә ныҡлап урынлашырмын әле...

Нәғимов менән Ғалимьян артынан уҡ Усман ҡарт менән уның ҡыҙы Ғәлиә лә столовойға барырға сыҡтылар. Усман ҡарт ҡыҙы менән эш тураһында һөйләшергә теләй... Ләкин Ғәлиә уның һүҙен тыңламай. Алда аҡһаҡлап барған Ғалимьян менән рәттән бөгөн генә килгән тракторсы яңы егет Нәғимовтың шлемы күренә. Ғәлиә ана шул егеттең матур итеп гармун уйнауы тураһында уйлай... Ҡыҙ кеше бит ул Ғәлиә. Уйлар шул, йәш ҡыҙҙарҙың егеттәр тураһында уйлауы ғәйепме ни!

Ә дала өҫтөндә хәҙер төн. Кисәгенәк кенә әле был ваҡытта ҡарайып ятҡан даланы инде йоҡа ғына ҡар ҡатламы ҡаплаған. Ләкин хәҙер ҡар яуыуҙан туҡтаған. Күктә бер генә болот әҫәре лә юҡ. Һауа һалҡын, һалҡын, аяҙ төндәрҙә, ошолай күк асыҡ зәңгәр була. Йондоҙҙар, шаярған кеүек бик йыш итеп йымылдашалар.

Төнгө һалҡын тын һауаны совхоздың электр станцияһындағы двигатель туҡылдауы яңғырата. Совхоздың казармалары, йорттары буйлап ике рәт булып электр фонарҙары теҙелгән. Әйтерһең, улар, электр фонарҙары, йондоҙҙарға ҡарағанда яҡтыраҡ янырға тырышалар. Әйтерһең, фонарҙар йондоҙҙар менән ярышалар...

Нәғимовтың «Урал» совхозындағы тормошо ана шул кис менән башланып китте.

Совхозға килеү менән ул, шулай итеп, иң элек плотник эшселәр менән танышты. Бер нисә сәғәт эсендә генә ул улар менән үҙләшеп китте. Ун бишләп плотник эшселәрҙе эсенә алған бәләкәй генә ағас барак, ундағы тығыҙ, бысраҡ тормош, төрлө еҫтәр менән ҡуйырған, тын алыуҙы ла ауырайтҡан һауа, күбеһе һәләмә кейемдә булған, ҡарайып бөткән бит-ҡуллы кешеләр, ғөмүмән бына шул ауыр тормош картинаһы «Урал» совхозына беренсе килгән Нәғимовты кире ҡаҡманылар. Плотниктарҙың һөйләүенә ҡарағанда, бында тракторсылар ҙа шулай уҡ насар шарттарҙа йәшәйҙәр. Улар ҙа, улар ғына түгел, бөтә совхоз шундай ауыр тормош шарттарында йәшәй.

Ләкин Нәғимов өсөн тормош ауырлыҡтары инде күптән таныш. Нәғимов тормош ауырлыҡтарын күтәрмәгәнме ни?

Шау-шыулы плотниктар тормошо менән столовойға барғанда ул ана шул беренсе таныштары плотниктар: аҙ һөйләй торған Усман бабай, көләс йөҙлө, етеҙ хәрәкәтле, янып торған ҡара күҙле Ғәлиә, уйынсаҡ һүҙле аҡһаҡ Ғалимьян — улар тураһында, «Урал» совхозында уны ҡаршы алған бына был беренсе аяҙ кис тураһында уйланы.

Нәғимовҡа 5-се казарманың 3-сө бүлмәһендә урын бирҙеләр. Шул бүлмәләге буш торған ағас карауат — «тапчанка»ға ул үҙенең иҫкереп бөткән одеялын йәйҙе һәм ҡарайып бөткән тышлы күпсеген ҡуйҙы.

Нәғимов беренсе көндө трактор мастерскойына, автогаражға инеп сыҡты, кооперативҡа учётҡа инде һәм шундай эштәр артынан йөрөп сменаға сыҡмаҫҡа, ә иртәгә беренсе сменанан эшкә башларға булды.

Был казарма, совхоздағы башҡа эшсе казармалар кеүек үк, оҙонсараҡ итеп балсыҡтан һалынған да эсе лә, тышы ла аҡҡа буялған. Казарманың ике башында ике ишек. Тышҡы ишекте ингәс тә, казарманың буйынан-буйына оҙон коридор һәм коридорҙы ике яҡлап бүлмәләрҙең ишектәре теҙелгән. Бер башта (ғәҙәттә ул баштағы ишектән йөрөлмәй)  ҙур умывальник тора.

Нәғимов урынлашҡан өсөнсө бүлмәлә лә, ишекте ингәс тә, ике яҡлап тығыҙланып ағас карауаттар теҙелгән. Барыһы 10 карауат. Ишек төбөндә генә һул яҡта мейес эргәләп ҙур ғына өҫтәл.

Нәғимов казармаға килеп инде. Ул ингәндә бүлмәлә бер ҡатын кешенән башҡа бер кем дә юҡ ине. Был ҡатын ҡыҫҡа ғына буйлы, ҡыҫҡартылған сәсле, ябыҡ ҡына йөҙөндә нур әҫәре юҡ. Ул, ишектән ингәс тә уң яҡтағы карауатта ултырып, алдына бер ҡағыҙ киҫәге ҡуйған да шуға башын тарай. Ул ултырған карауаттың тирә-яғына еп менән простынялар эленгән. Ләкин хәҙер простынялар юғары күтәрелеп ҡуйылған. Карауат бейек итеп түшәлгән һәм күпсектәр ҙә башҡа карауаттағы кеүек бер генә түгел, ә бер нисә. Шунда уҡ бәләкәс кенә өҫтәл. Өҫтәл өҫтөндә примус,

тәрилкә һәм ҡалаҡтар, бер көҙгө һәм һабын. Был нәмәләргә ҡарап, Нәғимов «бында семьялы кеше торалыр ахыры» тип уйланы.

— Был карауатта ятыусы юҡмы?— тип һораны ул әлеге ҡатындан.

Ҡатын, аҙ ғына башын күтәреп яңы инеүсегә бер генә ҡарап алды ла, иренеп кенә:

— Юҡ. Унда бер тракторист ята ине лә, отпускыға киткәс, килмәне... — тине.

Бүлмәнең алғы бер мөйөшөндә шаршау менән ябылып ҡуйылған карауат тора. Уныһы Нәғимовҡа бер генә карауат аша. Шулай итеп был бүлмәлә ун карауаттың икеһендә семьялы кешеләр торалар ине.

Кискә ҡарай казарма аҡрынлап шаулай башланы. Иң элек тышҡы ишек шығырҙап асылды ла, коридор шау-шыу менән тулды. Ишектән инеүселәр, аяҡтарын бер-береһенә бәргеләп, шаҡылдайҙар, ҡысҡырып һөйләшәләр, көлөшәләр.

Нәғимов ятҡан бүлмәгә лә ике егет килеп инде. Уларҙың өҫтөндә саңға, төрлө машина майына ҡатып бөткән фуфайкалар һәм аяҡтарында ботинкалар. Үҙҙәренең дә бит-ҡулдары ҡарайып бөткән. Улар ингәндә, теге ҡатын бәләкәс кенә өҫтәл эргәһендә картуф әрсеп маташа ине. Егеттәр, ишектән ингәс тә, оҙаҡ ҡына итеп Нәғимовҡа ҡарап торҙолар ҙа, унан һуң уларҙың береһе ҡатынға:

— Нәғимә, әле һинең Сафин ҡайтманымы ни?— тине.

Нәғимә, улар ингәс тә,  йылмайып уҡ ебәрҙе:

— Ҡайтмай бит әле. Көтә-көтә көтөк булып бөттөм инде...

Егеттәрҙең икенсеһе, карауаттарҙың береһе эргәһенә барып, сисенә башланы һәм һүҙгә ҡушылды:

— Көтә-көтә көтөк булып бөткәнсе янына үҙемде ятҡырһаң, бер ҙә көтөк булмаҫ ине...

Нәғимә ҡыҫҡа ғына итеп көлдө лә яуап бирмәне. Башта һүҙ асҡан егет иптәшенә ҡарата:

— Һин, туған, Сафин менән шаярма. Ул, һиҙеп ҡалһа, бер ҡабырғаңды ла ҡалдырмаҫ...— тине һәм Нәғимовтыҡы менән бер рәттән торған карауатҡа килеп ултырҙы.

«Был ахыры минең күрше буласаҡ»— тип уйланы Нәғимов һәм үҙе һүҙ башланы:

— Һинең менән беҙ күрше булырбыҙ инде. Һин ҡайҙа, мастерскойҙа эшләйһеңме? Эштәр нисек һуң? Егет, ботинкаларын һала-һала, яуап бирҙе:

— Мастерскойҙа эшләйбеҙ...— тине ул. Ләкин Нәғимовтың бөтә һорауҙарына яуаптарҙы теҙеп һалмайынса, Нәғимовтан үҙе һораны:

— Һин һуң ҡайҙан? Әллә бөгөн генә килдең?

Күрше Тугушов менән Нәғимов шулай танышып китте. Үҙенең ҡайҙан килгәнлеген, ниңә килгәнлеген һөйләне. Тугушов һөйләшергә яратыусан булып сыҡты. Аҙ ғына ваҡыт эсендә ул бөтә совхозды әләктерҙе. Уның һөйләүенә ҡарағанда, совхоздың дирекцияһында бюрократтар ултыралар. Рабочкомда ла эшселәрҙең файҙаһын күҙәтеү юҡ. Эшләтәләр ҙә эшләтәләр, ә аҡсаны һаман да биреп бөтөрмәйҙәр. Ашау-эсеүҙең рәте юҡ. Тугушов аҙаҡтан:

— Тройцкиға ҡарай бер совхоз бар. Унда бик шәп тип һөйләйҙәр. Беҙҙең бер иптәш киткәйне, хәҙер шофер булып ҡалған. Тауар-маҙар бик күп ти. Әллә шунда һыҙаһы инде. Тик бынан ысҡыныуы бик ҡыйын эш. Һин һуң ни эшләп бында килеп сыҡтың? Әллә маҡтаусы булдымы?

Тугушов менән бергә ҡайтып ингән икенсе егег һүҙгә ҡушылып ҡуйҙы:

— Чепуха, Ағиҙелдең аръяғында бер энәгә бер һыйыр — тиҙәр ауылда. Ул шул әллә ҡайҙа түгел бит. Барыбер Уральский областа. Бер ҙә әллә ни түгелдер әле...

Тугушов һүҙен бирергә теләмәне.

— Һин һәр ваҡыт шулай инде, Ғәлимов, эшселәргә ҡаршы һөйләйһең. Дирекцияға, рабочкомға ярарға тырышаһың инде әллә. Ҡара, директор үҙ

янына алмаһын тағы. Әллә, эште ташлап, служащий булырға теләйһеңме? Рабочкомға ултыртып ҡуйырҙар тип беләһеңме әллә үҙеңде? Бергә булғас, бергә булырға кәрәк уны. Эшсе интересын ҡарарға кәрәк. Ударникка яҙылдым тип әйткәс тә...

Күп кенә һөйләне Тугушов.

«Күрше бик зарлана торған булып сыҡты»… тип уйланы Нәғимов. Ул арала транспортта йөрөгән тракторсылар ҙа ҡайтып инделәр. Уларҙың береһе теге Нәғимә тигәндең ире Сафин ине. Нәғимә шунда уҡ Сафиндың ҡаршыһына ташланды.

Башҡалар ҙа уны шаулашып ҡаршы алдылар.

— Ни эшләп бик оҙаҡ?

— Әллә ватылып яттығыҙмы?

Сафин өҫтөндәге ҡарайып бөткән еүеш кажанын һалып ташланы һәм шунда уҡ әллә нисә ҡатлы итеп һүгенеп алды.

— Ике көн буйы юлда аҙапланып яттыҡ. Саҡ-саҡ ҡына, өс цилиндрға эшләтеп, ҡайтып еттек. Моторҙың, бер шәме бөтөнләй эштән сыҡты. Запас шин да бирмәйҙәр, бюрократтар. Ҡайҙа, бисәкәй, ашарға әҙерләй торҙоңмо? Өсөнсө участкала кисә кис ашарға бирмәнеләр, «һеҙ беҙҙә эшләмәйһегеҙ» тип әйтәләр. Саҡ ҡына яңаҡтарына менеп төшмәнем...

Тугушов уның менән бергә зарланырға тотондо. Уларға тағы ике кеше ҡушылды. Казарма эсе шау-шыу менән тулды. Бер нисә урында примустар яндырылды. Примустың сыжылдаған тауышы казарма эсендәге шау-шыуҙы тағы ла көсәйтте. Бүлмәнең эсе ҡуйырғандан ҡуйырҙы. Примустарҙан һәм тәмәке тартыуҙан сыҡҡан төтөн зәңгәрләнеп бүлмә эсен тултырҙы. Бер нисә урында торбаһыҙ бәләкәй генә лампалар яндырылды. Был «коптилка»лар ҙа, бүлмә эсендәге төтөнгә ҡушылып, үҙҙәренән ҡором сығара башланылар.

Әллә ҡайһы бүлмәнең бер мөйөшөндә балалайка уйнарға тотондолар. Нәғимовҡа ул уйнаусы үҙе күренмәй, тик балалайканы бер частушка көйөнә тырылдатҡаны ғына ишетелә. Шул частушка көйөнә ҡушылып икенсе

мөйөштәге бер рус егете карауатҡа ятҡан еренән тиҙ генә һикереп торҙо ла, итек кейгән аяҡтары менән тупылдарға, аяҡтарының тупылдауына ҡушып, таҡмаҡ әйтергә тотондо:

Пропадай  моя телега

Все четыре  колеса!

Тугушов һәм тағы бер нисә тракторсы, Сафиндар менән бергә ҡушылып, ике примус өҫтөндә аш ҡайнатырға тотондолар. Башҡалар столовойға киттеләр. Нәғимов та сыҡты.

Тышҡа сығыу менән, һалҡын саф һауа уның күкрәген киңәйтеп ебәргәндәй булды.

— Нәғимов, ни хәл? Ҡайһы казармала урынлаштың?

Нәғимов был тауышҡа боролдо һәм, алдында Ғәлиә торғанын күргәс, йылмайҙы. Ғәлиәнең өҫтөндә шул уҡ ҡыҫҡа тун. Башына һоро йылы шәл бәйләгән. Уның тулы ғына түңәрәк йөҙө һалҡынға ҡыҙарған. Ғәлиә киң итеп йылмайып ҡарай. Был йылмайыу, бигерәк тә, уның ҡара күҙҙәрендә күренә.

Нәғимов менән улар һөйләшеп киттеләр, һүҙ эйәрә һүҙ сыҡты.

Столовой әле асылмағайны. Столовой алдына эшселәр йыйылған. Туҡтауһыҙ ишекте дөбөрҙәтәләр. Ҡай берәүҙәре тәҙрәне ҡағалар.

Ярым туңған тәҙрәләр аша эстә официанткаларҙың икмәк, һауыт-һаба әҙерләп йөрөүҙәре күренә. Столовой алдына йыйылғандарҙың ҡай берәүҙәре тәҙрә аша официанткаларҙы һүгәләр.

—  Әй,   обезиянкалар,  тиҙерәк  булығыҙ...

— Ҡара, ниндәй, һыйыр кеүек кенә атлап йөрөйҙәр...

— Үҙҙәре  йылыла булғас та...

— Эшселәрҙең  положениеһына  инәләрме  ни  улар?

— Эй,  асығыҙ!..

Ләкин столовой һаман асылмай. Йыйылғандар, столовой алдында былай оҙаҡ тороуҙың сәбәбен ныҡлап тикшереп тормайынса, кем тура килде — шуны һүгәләр. Совхоздың рабкоры, дирекция — береһе лә ҡалмай. Әллә

кемдәрҙең ата-әсәләрен тикшерәләр. Эшселәрҙең аяҡтарында ботинка һәм итектәр, мастерскойҙа көндөҙгө эш ваҡытында еүешләнеп сыҡҡанға, хәҙер шығырҙап туңғандар. Столовой алдында шау- шыу, һүгенеү, көлөү тауыштары яңғырай.

Нәғимов менән Ғәлиә бер аҙ көттөләр ҙә аҡрын 1ына һөйләшә-һөйләшә столовойҙан ситкә киттеләр.

— Бына был уң яҡ ҡатарҙа, ана теге 5-се казарма...— тине Нәғимов һәм үҙе торған казармаға ҡарай күрһәтте.

Столовойҙан төньяҡҡа ҡарай ике ҡатар булып аҡ казармалар теҙелгән. Казармалар араһында, урам кеүек булып ҡалған оҙон аралыҡта, оҙон бағаналарҙа электр лампалары яналар. Столовойҙан алыҫ түгел совхоздың дирекция контораһы, унан автогараж һәм иҫке бәләкәй генә трактор мастерскойы. Мастерской янында уҡ бейек каланча. Каланча башында һәр ваҡыт бер пожарный дежурҙа тора.

Мастерской һәм автогараж буйлап тракторҙар теҙелгән. Тракторҙар, йәйге эштәрҙән һуң, бында ремонтҡа йыйылғандар...

Ғәлиә совхоз хәлдәре тураһында һөйләй:

— Бик насар бында эштәр. Мастерскоймы ни ул? Ауыл мунсаһы кеүек кенә бит. Ана иҫке мастерской янына яңыны, ҙурҙы, һалалар. Үткән йәйҙе йәй буйына эшләнеләр, һаман да әле түбәһен ябып бөтөрә алғандары юҡ. Өс ай эсендә, беренсе мартҡа тиклем, 105 трактор төҙәтәһеләре бар. Ул казармаларҙы эшләргә кәрәк. Ана тегендә стеналары эшләнгән казармалар тора. Уларҙың түбәләрен ябырға, иҙән-түшәмдәрен эшләргә кәрәк. Беҙ, плотниктар, ҡайһы ваҡытта көндөҙ генә түгел, төндә ут яҡтыһында ла эшләйбеҙ...

Нәғимов иғтибар менән тыңлай. Ләкин ул, Ғәлиәнең һүҙенән бигерәк, уның тауышын тыңлай: Ғәлиәнең тауышы матур тойола. Уның тауышын тыңлағанда ул кисә кис кенә әле шул уҡ Ғәлиәнең, эштән ҡайтҡас та, сисенеп ташлап «Гопак» көйөнә ашҡынып бейеүен, уның шул ваҡытта тирбәлеп торған бейек кенә күкрәген, көслө тәнен хәтерләй.

— Һин бик матур бейейһең, Ғәлиә,— ти Нәғимов. Был һүҙҙең ни өсөн әйтелгәнен ул үҙе лә һиҙмәй ҡалды, һүҙ әйтелеп бөткәс кенә, уның урынһыҙ әйтелгәнен һиҙҙе. Шулай ҙа Ғәлиә аптыраманы.

— Ә һин гармунда матур уйнайһың. Ниңә ул хәтереңә килде әле?

Нәғимов яуап бирмәне. Улар бер-береһенә ҡараштылар. Тракторсы Нәғимов менән плотник эшсе Ғәлиә Усманованың был ҡараштарына тик шундағы электр лампочкаһы һәм күктә йөҙөп йөрөгән тулған ай ғына шаһит булдылар.

Шаулаулы шығырҙау тауышы менән столовойҙың туңған ишеге асылды. Унда йыйылған әллә ни тиклем эшселәр, бер-береһен эткеләп, шау-шыу менән, эскә ағылдылар. Нәғимов менән Ғәлиә лә улар араһына инеп аралаштылар...

Партияның Өлкә Комитетында Моратовҡа шулай тинеләр:

— Үҙегеҙгә билдәле, «Урал» совхозы — йәш совет хужалығы. Ундағы ҡаршылыҡтар, эштәге ауырлыҡтарға ҡаршы алдан уҡ әҙерләнеп барығыҙ. Был совхозда елекке етәкселек, ҙур-ҙур хаталар эшләү генә түгел, большевиктарса уяу эшләй белеү ҙә күрһәтмәне. Өҫтәүенә ундағы партия, профсоюз эштәре лә быға тиклем ҡәнәғәтләнерлек булманы. Бөтә эште яңынан төҙөү талап ителә...

Моратов, совхозға килеп, беренсе көндәрҙе эшкә тотонғас уҡ, әлеге партия тарафынан әйтелгән ҡаршылыҡтар берәм-берәм уның алдына килеп баҫа башланылар.

Моратов килгәс тә партия ойошмаһы секретары Саматов менән оҙаҡ һөйләште. Саматов активтың тупланмауына, елекке етәкселектән тәртипһеҙлек, яуапһыҙлыҡ мираҫ булып ҡалып, хәҙер шуларҙы бөтөрөүҙең ауырлығы тураһында һөйләне.

— Хәҙер бына өс ай ваҡыт ҡалған. 1-се мартҡа 105 трактор, 15 автомобиль, башҡа машиналар ремонттан сығып бөтөргә тейеш. Яңы мастерской тиҙерәк эшләнеп бөтмәгәндә, был ауыл мунсаһы кеүек мастерской менән беҙ планды үтәй алмаясаҡбыҙ.

— Дөрөҫ, минеңсә лә, ремонттың үҙ ваҡытында үтәлеүен тәьмин итеү өсөн, иң элек, бик тиҙлек менән, яңы мастерскойҙы эшләтеп бөтөрөргә кәрәк,— тине Моратов.— Унан һуң эшселәрҙең тормоштарын яҡшыртырға кәрәк. Ниндәй эш ул унар саҡрым күрше ауылдарға мунсаға йөрөү.

Директорҙың производство урынбаҫары агроном Сергеев директор менән һөйләшкәндә зарланыуҙан башҡаны белмәне.

— Орлоҡто сортлаштырыу, ағыулау эшенә тотонмағанбыҙ әле. Триерҙар бар. Ләкин эшсе көсө етмәй. Триерҙар механизациялаштырылмағандар. Рабочком был турала ярҙам иткәне юҡ. Беҙҙең сәсеү орлоғо өс участкала. Икенсе участкалағыһы ҡыҙа башлаған, тип тә һөйләйҙәр...

Моратов ҡоро ғына:

— Ни тигән һүҙ ти ул «тип һөйләйҙәр». Ни өсөн үҙегеҙ барып ҡарамайһығыҙ. Нисә тонна булыр унда бойҙай? — тине.

Сергеев ҡаушабыраҡ китте. Ләкин быны Моратовҡа белдермәҫкә тырышты.

— Ундағы орлоҡтар өсөн участка мөдирҙәре яуап бирергә тейеш...

— Һеҙ ҙә яуап бирерһегеҙ, иптәш Сергеев...

— Әлбиттә. Ләкин минең бушай алғаным юҡ. Икенсе участкала 50 тонна самаһы бойҙай ята.

Партия ойошмаһы секретары тураһында Моратов шулай тине:

— Совхоздағы эштәр өсөн тынысһыҙлана, шул эштәр өсөн ҡайғыра. Партия ойошмаһының етәксеһе, әлбиттә, шулай булырға тейеш. Тик конкрет етәкселек, ҡушылған эштең үтәлеүен тикшереү яғы йомшағыраҡ булһа кәрәк... Ничево, уның менән эшләп булыр.

Ләкин директор урынбаҫары Сергеев менән һөйләшкәндән һуң, Моратовтың күңелендә насар йоғонто ҡалды. Сергеевтың үҙен сиктән тыш тыныс тотоуы, «бушап булмай» тип объектив сәбәп күрһәтергә тырышыуы — былар барыһы ла Моратовта Сергеевҡа нисбәтен ышанысһыҙыраҡ ҡараш тенденцияһы ҡалдырҙы.

«50 тонна бойҙайҙың ҡыҙып, янып эштән сығыуы бар. Ә ул «тип әйтәләр» тип ултыра. Оппортунистарса тыныслыҡ...»

Шулай уйлай Моратов. Ләкин был уйҙарына әле ул үҙе лә ныҡлап ышанмай. Шундай яуаплы эшсе, партия ағзаһы тураһында тиҙ генә насар һөҙөмтә сығарыу бик ашығыс һәм төпһөҙ булырға мөмкин кеүек тойола. Һәр хәлдә, совхоздың эше тураһында беренсе танышыуҙарҙан һуң, совхоздың хәҙер бик ауыр хәлдә булыуы, етәкселәрҙең әле һаман да булһа шул ауыр хәлдән сығыу юлын таба алмауҙары, ошо хәл тиҙ арала бөтөрөлмәгәндә, ремонт һәм яҙғы сәсеү эштәренә әҙерлек һәм яҙғы сәсеү үҙе лә өҙөләү ҡурҡынысы булыу — Моратов өсөн асыҡ ине.

Кис менән партия ойошмаһының бюроһында совхозда яҙғы сәсеүгә әҙерлек тураһында Сергеевтың доклады ҡуйылды.

Сергеев, үҙенең ҙур кәүҙәһенә яуап бирерлек ҡалын ғына тауыш менән, бер сәғәтләп һөйләгән докладында бөтә бюро ағзаларына билдәле булған хәбәрҙе һалмаҡ ҡына ҡабатланы.

— Иптәштәр, — тине Сергеев,— бөгөнгө ауыр хәлдәрҙең төп сәбәбе, минеңсә, көҙҙән үк, хатта, йәйҙән үк, ҡышҡы ремонт кампанияһына әҙерлек алып бармауҙа. Бында, әлбиттә, мин үҙемде лә ғәйепле һанайым. Яңы мастерскойҙы эшләтеп бөтөрөү өсөн беҙ көҙҙән үк тейешле ашығыс саралар҆ы күрмәнек... Төҙөлөш эштәренә кәрәкле эшсе көстө туплау тураһында ныҡлап уйланылманы. Эшселәр араһында профсоюз эштәре йомшаҡ. Минеңсә, һис кисекмәйенсә был етешһеҙлектәргә сик ҡуйырға һәм тиҙ арала яңы мастерскойҙы эшләп бөтөрөргә кәрәк... Беҙҙең ремонт планының үтәлеүен иҫке мастерской ғына тәьмин итә алмай.

Һөйләүҙәрҙә беренсе һүҙҙе слесарь Ирназаров алды.

— Мин үҙебеҙҙең телдә һөйләйем инде, иптәштәр, ату русса яҡ минең бик ҡойто,— тине ул. Бюро ағзалары «әйҙә, крой», «Сергеев та аңлай», «һөйлә әйҙә» тиныләр. Ирназаров дауам итте.

— Иптәштәр, баштан уҡ төшөргә кәрәк. Башта ла беҙгә ошо совхоз тигән нәмәне готовой көйгә генә ҡулға килтереп тотторманылар. Был

яландарҙа бит өсөнсө йыл ғына әле бер нәмә лә юҡ ине. Ошо аҙ ғына ваҡыт эсендә ошо тиклем ҙур йорттар торғоҙоу еңел эш булманы. Плотниктар етешмәгәнлектән, мин дә ул ваҡытта плотник булып эшләнем. Совхозды ойоштороу эшен, башҡалар менән бергә, мин дә үҙ елкәмдә күтәреп сыҡтым. Беҙ ул мәлде һалҡын көҙгө ямғыр аҫтында ла, ҡышҡы бурандарҙа ла туҡтауһыҙ эшләнек. Кейергә йүнле-рәтле кейем юҡ, ашаған аштың ҡото-ҡоно юҡ. Көҙгө ямғырҙан һуң, бүрәнәләр боҙланып ҡата. Ҡул өшөгән. Бүрәнәләрҙе юғарыраҡ мендерергә кәрәк. Бүрәнә шыуып ҡулдан ысҡына. Тағы ла түбәнгә тәгәрәп төшөп китә. Ошондай ауыр ваҡыттарҙа беҙ тырышып совхоз йорттарын, кирбестән электр станцияһы, кескәй генә итеп мастерской һалдыҡ. Казармалар эшләнек. Иллеләп тракторсы егеттәрҙе әҙерләнек. Шул яҙҙа ғына бит 21 000 гектар ер эшләнде. Хәҙер совхоздың 65 мең гектар ере, 105 тракторы, 10 комбайны бар. Мин бына ошоларҙы нәмәгә һөйләйем. Шундай бер совхоз ойоштороп ебәрергә ҡулдан килгәс, беҙгә бөгөн ошо хәлдә ҡалырға яраймы? Иҫке директор Афанасьев алйотораҡ кеше ине ул. Автомобилдә кататься итеп йөрөүҙе күберәк ярата. «Эшселәр араһында тәртип юҡ», тиҙәр. Тәртипте ҡуя белһәң, була ул. Эшселәрҙең хәлен яҡшыртырға кәрәк ине. Минеңсә, иптәштәр, әле казармалар эшләп йөрөй торған плотниктарҙың яртыһын алып мастерской эшләргә ҡушырға кәрәк. Тағы ла нәмә һөйләргә инде... Ә... Икенсе участкала 3 000 ботлап бойҙай ҡыҙа башлаған. Трактористар һөйләнеләр. Шуны триер аша үткәреп таратыбыраҡ ҡуйырға ине. Хәҙер трактористарҙың да күбеһе эшһеҙ ята. Бер нисә көн субботник эшләп алырға кәрәк... Шуның менән бөттө булһа кәрәк...

Бюро йыйылышында ултырғандарҙан рабочком председателе Шубин Ирназаровтың плотниктарҙың яртыһын алып мастерскойға ҡушыу тураһындағы фекеренә ҡаршы сыҡты.

— Үҙең эшселәрҙең хәлен яҡшыртырға тиһең, үҙең казармалар эшләүҙе һүлпәнәйтмәксе булаһың. Ни тигән һүҙ ул? Минеңсә, ауылдарға сығып, яңынан плотниктар тупларға кәрәк...

Ләкин, иң элек Саматов үҙе Ирназаровтың фекерен яҡланы. Башҡалар ҙа уға ҡушылдылар.

Уҡытыусы һәм шул уҡ ваҡытта рабочкомдың культура эшсеһе булып эшләгән Тулумбиков клуб тураһында һүҙ ҡуҙғатты:

— Беҙҙә тәрбиә эштәре бик насар бара, иптәштәр,— тине ул,— политик түңәрәктәр һәм башҡа төрлө эштәр алып барыу өсөн урын юҡ. Эшселәр араһындағы төрлө насар күренештәр, эскелек, рвачлыҡ барыһы ла бит бер яҡтан, ана шул политик тәрбиә юҡлыҡтан, килеп сығалар... Рабочком торған йорттоң бер башын клуб яһарға уйлап йөрөнөк. Ләкин унда мейес юҡ, тәҙрәләре насар. Үҙе кескәй генә. Рабочкомды башҡа урынға күсереп, ул йортто бөтөнләйе менән клуб яһау өсөн, аралағы стенаны алып ташлап мейес сығарырға, ремонт үткәрергә кәрәк...

Саматов уның һүҙен  бүлеп:

— Ярай, Тулумбиков, һин тағы шул культура тураһында,— тине.— Хәҙер беҙгә иң беренсе эштәрҙе үтәргә кәрәк. Унышы әле ул ҡасмаҫ...

Тулумбиков  реплика  яһаны:

— Сиратсылыҡмы, иптәш Саматов. Һин масса күләм эште баһаламайһың.

— Ярай, ҡыҙма әле, Тулумбиков. Эшләрбеҙ. Ул ҙур эш түгел. Ярай, иптәштәр. Хәҙер мастерскойҙы эшләп бөтөрөү, орлоҡ таҙартыу — бөтә эштә һынылыш яһауға ҡарата конкрет тәҡдимдәргә күсәйек.

Бына ошонда инде Моратов беренсе тапҡыр секретарға ҡаршы сыҡты. Саматовҡа ҡарамаҫҡа тырышты:

— Иптәш Тулумбиков дөрөҫ һөйләй. Бер нәмәне эшләгәндә, икенсеһен онотторға ярамай. Мин Саматов фекеренә ҡушыла алмайым.

Йыйылыштан һуң Саматов түҙмәне, Моратовтың квартираһына китте. Моратов яңғыҙы примуста сәй ҡайната ине. Саматовты ул йылмайып ҡаршы алды:

— Ә, Саматов. Әйҙә. Бына хәҙер кофе эсербеҙ. Семьяны килтереп булмай бит әле. Ҡыҙыҡ икән егет кеше кеүек йәшәүе. Онотолған хәҙер.

Саматов һүҙҙе бик серьез башланы. Тәүҙә Моратовтың бик асыҡ һәм дуҫтарса ҡаршы алыуы уны бер аҙ аптыратты. Сөнки йыйылышта Моратовтың «Мин Саматов фекеренә ҡушыла алмайым» тигән һүҙенә Саматов үҙе айырыуса ҙур иғтибар итте. Ә хәҙер Моратовтың асыҡ йөҙ күрһәтеүе былай ғына, рыя ғына кеүек тойолдо. «Ике йөҙлө кеше икән был. Тегендә миңә ҡаршы сыҡты, ә өйөндә дуҫтарса һөйләшкән була» тип уйланы.

— Шулай, Моратов иптәш, һин директор кеше, ә мин партия ойошмаһы секретары. Беҙгә бөтә урында, һәр ваҡыт контакт менән эшләргә кәрәк, һин миңә, мин һиңә булышырға тейешмен. Эйе. Бөгөнгө сығышыңды мин, асығын әйткәндә, аңламаным,— тине Саматов. Был һүҙгә Моратов борсолор, берәй төрлө үҙгәрер тип уйлағайны секретарь. Ләкин Моратов китаптар, портфель, икмәк һәм шәкәр киҫәктәре, консервалар туҙылып ятҡан өҫтәлдә кофе эсергә әҙерләнеп йөрөгән хәлдә йөҙөндәге йылмайыуҙы, уңған хәрәкәттәрҙе юғалтманы.

— Һинең һүҙең дөрөҫ, иптәш Саматов,— тине Моратов,— бер фекерҙә булыу яҡшы эш. Ләкин практикала, көндәлек тормошта кешеләрҙең ҡараштары төрлөсә булырға мөмкин. Кемдең фекере беҙҙең төп идеяға яҡыныраҡ килә, беҙ шуны ҡабул итәбеҙ...

— Ә секретарҙың авторитетын ҡайҙа ҡуяһың?

— Бәй, секретарь үҙе кемдең фекере, ниндәй ҡараш дөрөҫлөгөн иҫәпкә алырға, шуны яҡларға тейеш. Мин, иптәш Саматов, һин дөрөҫ фекер әйтәһең икән, тәбиғи, һәр ваҡыт, һәр урында яҡлаясаҡмын .

— Уныһы шулай шулайын,— тине Саматов Моратовтың үҙенә ҡарағанда көслөрәк икәнен һиҙҙе Моратовтың һүҙҙәренә һис бер яҡ менән дә ҡаршы килерлек түгел ине.

Кофе эсергә ултырҙылар. Моратов, бер нәмәнән икенсе нәмәгә күсеп, туҡтауһыҙ һөйләүендә дауам итте. Уның бөгөн айырыуса яҡшы кәйефле икәне күренеп тора ине. Бер аҙҙан һуң ул радио аппаратын көйләргә

тотондо һәм оҙаҡламай Мәскәүҙән «Коминтерн» станцияһынан тапшырылған концерт ишетелә башланы.

— Был — Чайковскийҙың «Патетический симфонияһы»,— тине Моратов,— матур бит, ә! Саматов тыныс ҡына яуап бирҙе:

— Яратмайым мин уларҙы, аңламайым да... Моратовтың күҙҙәре ҙур асылды:

— Ну! Музыканы яратмайҙармы һуң! Мин үҙем үләм дә китәм инде, әй! Да, һиндә шахмат юҡмы?

— Ундай ваҡ-төйәк уйынға ваҡыт ҡалмай бит, ҡайҙа ул. Газета ла уҡып булмай әле. Хәҙер исмат өҫтөндә ултырам.

Моратов был һүҙҙәргә яуап та бирмәне. Тик эсенән генә «егет дөйөм ағыштан арттараҡ бара икән шул. Ярҙам итергә кәрәк» тип уйланы. Саматовҡа ҡарап:

— Шахмат уйнарға өйрәтәм үҙеңде. Бик ҡыҙыҡ нәмә ул,— тине. Ә Саматов яңы директор тураһында: был ҡасан эш тураһында уйлай икән һуң? Мин көнө- төнө шул эш тураһында уйлайым. Шулай ҙа осон-ҡырыйын таба алған юҡ. Ғәжәп!»— тип уйланы...

Ҡыштың һалҡын, аяҙ төндәренән береһе ине. Дала өҫтөн зәңгәр һәм һалҡын төн ҡаплаған. Ҡыштың аяҙ төндәрендә күк йөҙө асыҡ зәңгәр һәм йондоҙҙар асығыраҡ йымылдаусан булалар.

Совхоз кешеләре, көндөҙгө эштәрҙән һуң, ял итәләр. Совхоз йоҡлай. Совхоз тынған. Тик электр станцияһы ғына өҙлөкһөҙ туҡылдауында дауам итә. Уның туҡылдауы һалмаҡ һәм мөһабәт сыға:

— Туҡ... туҡ... туҡ...

Совхоз өйҙәре араһындағы электрик фонарҙары станциялағы ана шул туҡылдау көйөнә бәүелгеләп яналар.

Совхоз халҡы йоҡлай. Тик, кешенең йөрәк тибеүе кеүек, совхоздың да йөрәге тибә. Совхоз тынған, ләкин ул йәшәй... Совхоздың динамо йөрәге тибә. Ныҡ тибә уның йөрәге...

Ҡапыл электр фонарҙары барыһы бер юлы һүнделәр. Ҡапыл электр станцияһы яғынан двигателдең мөһабәт туҡылдау тауышы туҡтаны. Совхоз өҫтөн ҡараңғылыҡ баҫты. Тәрән тынлыҡ баҫты совхоз өҫтөн...

Йәй көндәре ҡай ваҡытта көслө ямғырҙар алдынан шулай була: башта күктең бер яғынан ҡуйырып ҡара болот сыға. Шунда уҡ көслө ел ҡуба. Ҡара болот ҙурайғандан ҙурая. Ел дә көсәйгәндән көсәйә. Ләкин ҡара болот күкте ҡаплап алғас, ел дә тына. Һауа тыныслана. Был тыныслыҡ ауыр һәм бөркөү була. Ҡапыл ғына ошо тыныслыҡты боҙоп, күҙҙәрҙе сағылдырып йәшен сатнай, ер емереп күк күкрәй. Ямғыр яуырға тотона.

Тап бына шундай саҡтағы кеүек ине был тынлыҡ. Сөнки, был ана шул бәләкәй генә электр станцияһы һалынып эшләй башлағандан бирле, электр һүнеү булғылаһа ла, ҡапыл булмай торғайны. Ут һүнә лә, шунда уҡ тағы ла тоҡана. Йәки һүнгән ваҡытта, электрик лампочкаһы эсендә ут башта ҡаралып тора...

Оҙаҡ та үтмәне, электр станцияһы ишегенән бер кеше сыҡты һәм, тирә-яҡҡа ҡаранып, тура материальный складтың сторож будкаһына — совхоз усадьбаһының бер яҡ ситенә йүгерҙе. Уның артынан уҡ станция ишегенән ҡуйы ҡара төтөн бөркөләп сыҡты.

Электр станцияһының эргәһендә генә торған пожар каланчаһы башында дежурить иткән пожарный йоҡомһорап ултырған еренән, әсе төтөн еҫе боронона килеп инеү менән, ҙур толоптоң яғаларын асып ташлап, урынынан торҙо һәм галлерияға сығып тирә-яҡҡа ҡараны. Шунда уҡ уның башына «станция туҡтаған дабаһа» тигән уй килде. Шул уҡ ваҡытта төтөн уны ҡаплап уҡ алды һәм төтөн araһынан ҙур ялҡындар уты күренеп ҡалды. Пожарный йәшен тиҙлеге менән колокол бауына тотондо.

Бөтә совхоз халҡы аяҡҡа баҫты. Бөтә казармаларҙан кешеләр төркөм-төркөм ялҡындар эсендә балҡыған электр станцияһына ташландылар. Оҙаҡ та үтмәй станцияла көслө шартлау ишетелде. Станцияның бер яҡ стенаһы емерелде. Пожарныйҙар ҡыҙыу темп менән һүндереү эшенә тотонғайнылар инде.

Өҫтөнә ҡыҫҡа тун ғына эләктереп, башына бүркен кейергә лә онотҡан яланбаш Моратов ҡаты тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе:

— Мастерскойҙы ҡарағыҙ! Станоктарҙы сығарырға кәрәк...

Трактор мастерскойы ла электр станцияһына йәнәшә һалынып, станция менән мастерской араһында бер асыҡлыҡ ҡалдырылған. Ут шунда уҡ мастерскойға ла күсергә, унда кәрәсин һәм бензин менән һуғарылып бөткән иҙән һәм түшәмдәргә тоҡанып машина частары һәм төрлө станоктарҙы зарарларға мөмкин.

Бер төркөм тракторсылар директор артынан мастерскойға инделәр һәм күмәкләп ундағы машиналарҙы, инструменттарҙы тышҡа сығара башланылар. Директор, үҙенең эргәһендә генә йөрөгән Нәғимовҡа ҡарап:

— Әйҙә, иптәш, тиҙерәк бына был карбит фонарҙарын сығар,— тине һәм үҙе лә ҙур бензин багын күтәреп тышҡа сыҡты.

Мастерскойҙың тышына сығып, стена буйлап барғанда, директор ҡар аҫтындағы ҡаты бер нәмәгә абынып йығылды. Уның аяҡ аҫтында тимер шалтырау тауышы ишетелде. Ҡапыл ғына эйелеп ҡарағанда, пожар яҡтыһында Моратов ҙур ғына тартма эсендә запас частарҙың — поршень ҡулсалары, клапандар ялтырап ятҡанын күрҙе. Күҙ асып йомғансы бюро ултырышында Сергеевтың «запас частар юҡ» тип зарланыуы уның хәтеренә килде. «Шалапайҙар» тип уйланы директор.

Эшселәрҙең һәм пожарныйҙарҙың тырышлығы арҡаһында, пожар мастерскойға күсмәне. Ут һүндерелде. Пожар ҙурайып киткәндә, яңы мастерскойҙың да быялаланған стеналарына һәм унан алыҫ түгел автогаражға ла ут ҡабырға мөмкин ине.

Директор ут һүндергәндә тирләгән маңлайын ҡыҫҡа тунының еңенә һөртә-һөртә шул турала уйланы һәм, эшселәрҙең берҙәм тырышып эшләүҙәрен күреп, эсенән шатланып ҡуйҙы.

«Был армия менән беҙ эште атҡара алырбыҙ. Ләкин был ваҡиғаның сәбәбен табырға кәрәк бит. Ҡайҙа һуң Сергеев менән Самойлов...»

Шулай уйланы Моратов, йыйылған кешеләр араһынан электр станцияһы мөдире менән үҙенең урынбаҫары Сергеевты эҙләргә тотондо. Ләкин улар пожарҙа күренмәнеләр. Директор шунда ҡыҙыу эшләп йөрөгән Саматов эргәһенә барҙы.

— Самойловты күрмәнеңме?

— Мин үҙем дә эҙләп ҡарағайным. Әллә ҡайҙа... Әллә бөтөнләй килмәгәндәр. Инженер-механизатор Эйдельман да юҡ... Әйҙә минең, кабинетҡа барайыҡ әле...

Шул һүҙҙәр менән Саматов халыҡ араһында йөрөгән Ғәлләмовты саҡырып:

— Иптәш Ғәлләмов, һиңә боевой задание: Самойлов менән инженерҙы табып килтер. Квартираларына бар...— тине.

Моратов менән Саматов партия ойошмаһы бүлмәһенә киттеләр. Пожарҙың сәбәптәрен тикшереү башланды.

Шул уҡ төндө транспортта эшләүсе тракторсы Ванька Косач, бер нисә иптәше менән совхоздың ситендәге землянкаларҙың береһендә йыйылып ныҡ ҡына эскәндән һуң, казармаһына ҡайтырға сыҡты. Башҡалар шунда бөтөнләй иҫереп, кем ҡайҙа тура килһә — шунда аунап ҡалдылар. Ванька — совхоздың атаҡлы эскесеһе Ванька Косач — башҡалар тиклем үк иҫермәне. Алпан-толпан атлап ул землянканан сыҡты ла:

— Их, крой Ванька, бога нет!—тип ҡысҡырып ебәрҙе һәм яңы мастерскойҙың быялаланған стенаһына тотоноп үҙе торған казарма яғына атланы. Электр станцияһының двигателе ҡапыл ғына эшләмәй башлағас, ул:

— Их, егеттәр майлағандар. Шайтандар туҡтаттылар,— тип мығырҙаны.

Ул йырларға ла маташып ҡарағайны, ләкин тын һауала үҙенең беренсе тауышы уҡ уға уңайһыҙ тойолдо. Тауыштың яңғырап китеүенә ул йылмайҙы

— Эх, һин, нисек яңғырап китә тауыш!.. Ха... ха...

Ул яңы мастерскойҙың алдына килеп сыҡты һәм бер генә күҙе менән (һыңар күҙле булғанға, уны, фамилияһы Никифоров булһа ла, тракторсылар

«Косач» тип йөрөтөләр) электр станцияһының тәҙрәһе аша ҙур ут ялҡынын күрҙе. Шул уҡ секундта станция ишегенән сығып йүгергән кешене күргәс, ул аптырап китте.

Ванька тиҙ генә станцияның тәҙрәһенән барып ҡараны. Станция эсендә бер кем дә юҡ ине. Станцияның бөтә иҙәнен ут ҡаплаған. Шунда уҡ мастерской яғынан станцияға дежурный машинист Михайлов килеп сыҡты. Уның артынан столовойҙа эшләүсе официантка Ғәйшә күренде. Ванька Косач уларҙың икеһенең бергә әсе ҡысҡырып ебәреүҙәрен ишетеп ҡалды. Шунда уҡ юғары каланчала колокол ҡағыла башланы. Былар барыһы ла Ваньканың күҙ алдынан йәшен тиҙлеге менән үтеп киттеләр. Ванька тиҙ генә айныны. Шунда уҡ, әле генә станция ишегенән сығып йүгергән кеше уның хәтеренә килде. Шул кеше йүгергән яҡҡа ташланды. Ванька, «бында ни ҙә булһа бер нәмә бар», тип уйланы.

Ул боролоп йүгергәндә, теге кешенең күләгәһе, аҙ ғына күренеп, совхоздың материальный складындағы сторож будкаһына инеп юғалды.

Ванька бөтә көсөн йыйып йүгерҙе. Сторож будкаһы совхоз усадьбаһының иң ситендә. Уның сәнскеле тимер сыбыҡ менән әйләндереп алынған урынында бүрәнәләр, таҡталар өйөлгән. Бер лапаҫ аҫтында тимер-томор материалдар, тимер сыбыҡтар өйөлгән.

Будка — шул материалдарҙы һаҡлаусы сторож будкаһы.

Ванька Косач тиҙ генә йүгереп килде лә будканың ишек төбөнә туҡтап ишек арҡыры эстәге кешеләрҙең һөйләшкәндәрен тыңларға тотондо. Ҡалын ғына бер ир кеше тауышы ашығып һөйләй һәм тынын йыш-йыш ала:

— Булды... Самойловтар инженерҙа эсәләр... Михайлов менән Ғәйшә мастерскойға үҙ эштәре менән инеп киткәйнеләр... Молодец Ғәйшә... Бер шырпы етте. Ҡағыҙ яндырып иҙәнгә ташлағайным — шабаш... Ана колокол ҡағалар. Бер кем дә күрмәне буғай...

Был тауыш— завхоз Потапов тауышы ине. Ванька Косач асыуынан тештәрен шығырҙатты. Был минутта уны иптәштәре күрһәләр, танымаҫтар ҙа ине. Ул йоҙроҡтарын йомарланы. Хәҙер ул бөтөнләй айнып еткәйне инде.

Электр станцияһы яғынан шартлап янған пожар гөрөлдәүе, пожарный каланчала өҙләкһеҙ колокол тауышы тын төндө яңғырата. Ике йылдан бирле инде совхоздың төп эшсеһе булып килгән Ванька Косач, эштән буш ваҡыттарын күбеһен эсеп үткәргәнлектән, һәм, эскәс, донъя аҡтарып бузить итеп йөрөгәнгә «бузатёр», «эскесе» исемен алһа ла был минутта ул ундай Ванька түгел ине. Совхоздың төҙөлә башлаған көнөнән алып ундағы бөтә ауырлыҡты башынан кисергән, совхоздың балаһы булып киткән Ванька Косач өсөн был пожар үҙенә килгән һәләкәт кеүек тойолдо. Үткән йылдарҙы электр станцияһын һалғанда Ванькаҙың көсө түгелмәгәнме ни? Колокол тауышы Ванькаҙың йөрәгенә һуҡҡан кеүек булды. Хәҙер бына бөтә совхозды ут алыр, бөтә совхоз ут эсендә ҡалыр ҙа, хатта ҙур «катерпиллер» тракторҙары ла, бөгөн генә әле Ванька ултырып йөрөгән 13-сө номерлы «катерпиллер» тракторы ла янып көлгә әйләнер төҫлө булды. Ә бит Ванька ярата ул тракторҙы. Өйрәнгән ул хәҙер «катерпиллер»ға. Ул үҙенең бөтә тормошон ана шул мөһабәт машинаға бәйләгән. Эшләгән ваҡытта ул удар эшләй. Башлаған эште ташламай: эш ваҡытында айныҡ, ул ваҡытта аҡыллы. Башҡа тракторсылар әйтеүенсә «душа парень» була. Шул яҡшы, удар эше өсөн совхоз етәкселәре уны яраталар ҙа. Тик бына эсеүе генә харап итә.

Ләкин хәҙер Ванька айныған. Эш тураһында, «катер»ҙар тураһында, совхоздың яҙмышы тураһында уйлап ул, ҡапыл ғына, сторож будкаһының эсенә атылды. Ишек төбөнә инеп баҫҡан килеш ул асыулы ялтыраған күҙҙәре менән берәмләп будка эсендәге кешеләрҙе һөҙөп сыҡты. Будкала ике генә кеше ине: береһе завхоз Потапов һәм икенсеһе сторож Ғайнанов.

Потапов һиҙмәй ҙә ҡалды — Косач уның яңағына һуҡты. Трактористың көслө һуғыуына Потапов яҡ- яҡҡа һелкенеп ҡуйҙы, ләкин тиҙ генә йығылманы. Ванька икенсе яҡлап һуҡҡас ҡына, Потапов аумаҡайлап бәләкәй генә эскәмйәгә ултырҙы...

...Сторождың йыуан һәм ҡаты бармаҡтары Ванькаҙың боғаҙын быуҙылар. Ул арала Потапов та иҫенә килде. Улар икәүләп Ванька Косачты

быуырға, иҙәнгә һалып күкрәген иҙергә тотондолар. Ваньканың күҙ алдары ҡараңғыланды. Будка эсе зыр-зыр әйләнә башланы. Башы ауырайҙы. Тыны ауырлашты. Ванька үҙенең өҫтөнә ҙур таштар емерелгән кеүек хис итте Ул ғырылдап һуштан яҙҙы.

Ваньканы бөтөнләй үлтереү өсөн күкрәгенә бысаҡ менән сәнстеләр. Унан һуң, будканан сығарып, ярты километрҙар алыҫлыҡтағы соҡорға илтеп ташланылар. Өҫтөнә аҙыраҡ ҡар ҙа һиптеләр.

Был ваҡиғаға аяҙ төндөң зәңгәр күгендә йымылдашҡан йондоҙҙарҙан башҡа шаһиттар булманы...

Тулумбиковтың көндәлеге.

«10 ғинуар.

Бөгөн балаларҙы уҡытып булманы. Иртәгә лә булмаҫ. Көнө-гөнө клуб артынан йөрөйбөҙ. Рабочком төҙөүселәрҙең бер барагына күсте.

Бөгөн кәрәсин ташыныҡ. Трактористар курсында уҡыусыларҙың ял көнө ине. Субботник эшләп ебәрҙек. Хәҙер мейестәрҙе лә сығара башланылар. Тимәк, бер нисә көндән клублы ла булабыҙ тигән һүҙ... Юҡһа эштәр бик насар ине. Бер башында балалар уҡытыу һәм төрлө түңәрәктәр өсөн бүлмә бүләбеҙ... Әллә пожар бар инде — колокол тауышы килә. Сығып ҡарарға кәрәк...

11 ғинуар.

10 ғинуарҙа совхоздың электр станцияһы янып китте. Сәбәбе һаман билдәле түгел әле. Тикшереү эше ГПУ ҡулында. Электр станцияһы мөдире менән пожар сыҡҡан көндө дежурить иткән машинист Михайловты районға алып киттеләр. Шул төндө Сергеев менән Самойлов инженер-механизаторҙың квартираһында эсеп ултырғандар. Минеңсә, бында бер нәмә булырға тейеш. Пожар сығыр алдынан ғына, столовойҙа официантка булып эшләүсе Ғәйшә машинист янына ингән. Михайлов, дурак, дежурствоһын ташлап теге Ғәйшә тигән бәндә менән мастерскойға сығып киткән. Тракторист Тугушов бөгөн столовойҙа көлөп тора: Михайлов менән Ғәйшәнең мөхәббәттәре шул тиклем ҡыҙыу булған, хатта пожарға

әйләнгән,— ти. Яңы двигатель ҡуйғансы, пожалуй, 4—5 көн үтер әле. Бөтә совхозды ҡараңғылыҡ баҫты. Күңелһеҙ бит.

Нәғимов тигән яңы бер эшсе килгән совхозға. Бөгөн китапханала күп кенә һөйләштек. Бик уҡый икән үҙе. Әллә ни тиклем яҙыусыларҙы белә. Беренсе тапҡыр мин уны рабочкомда күргәйнем.

Рабочком председателе Шубин менән һөйләшеп ултыралар ине. Документтарын күрһәтеп маташа ине шунда.

— Һин ниңә улай бер совхоздан икенсе совхозға күсенеп йөрөйһөң. Беҙҙә бит ундай кешене литун тиҙәр, һин беләһеңдер бит уны?— ти Шубин.

Нәғимовтың яуабы ҡыҙыҡ булды:

— Мин литун түгел. Литун ул, ҡайҙа яҡшыраҡ, йылыраҡ урын бар, шуны эҙләй. Литун кеше ауыр эшкә түҙә алмай. Ә мин... Һөйләп торһаҡ бик оҙаҡ инде. Кешеләрҙең бит төрлөһө бар. Ҡай берәүҙәр тура әйткәнде яратмайҙар, килешмәгән яғын күрһәткәнде яратмайҙар. Шунан «бузатёр» тигән исемде лә тағалар. Түрәрәк кешегә бәйләнһәң — «коллективты боҙа» тип эштән дә сығарып ебәрәләр...

— Аңламайым,— ти Шубин.— Критика өсөн эшсене эштән сығармайҙар... Ну ярай, ҡарап ҡарайыҡ.

Бик ҡыҙыҡ кеше күренә ул Нәғимов. Яҡындан танышырға кәрәк әле...

12 ғинуар.

Бөгөн комсомолецтар собраниеһында комсомол члендарының биш йыллыҡтың аҙағына тиклем совхозда ҡалыу мәсьәләһе тикшерелде.

Тракторист Апуш Хәйруллиндан башҡа ҡаршы сығыусы булманы. Апуштың ҡатыны Саниә Апушҡа ҡаршы сығып һөйләй:

— Һин, Апуш, юҡты һөйләй башланың әле. Сознательный комсомол, иң элек биш йыллыҡтың аҙағына тиклем яҙылып, ҡалғандарға үрнәк булырға тейеш...

Комсомолецтар көләләр.

— Саниә, ҡара, шәйләберәк һөйлә. Апуш үҙеңде өйрәтер — ireң бит ул.

— Саниә,  махы бирмә әйҙә.

— Әйҙә, 8-се март халҡы...— тиҙәр.

Ә Апуш үҙ һүҙен бирмәҫкә тырыша.

— Эшсенең положениеһы насар булғас, бер списокка түгел ҡырҡына яҙылһаң да — тотоп булмай. Безобразие бит положение... Теләһәгеҙ ни эшләгеҙ, егеттәр, тормош насарланғандан насарлана. Бына бында, комсомолдар, кейем һорап, ашауҙы яҡшыртыуҙы һорап постановление сығарырға ине. Вот яҡшы булыр ине...

Береһен дә ҡалдырмай. Әллә ниҙәр һөйләп бөтөрҙө. Ысындан да, Апуш йүнле генә егет күренә ине, әллә нишләп бузить итә башланы. Васька Кудрәй, комсомол коллективының секретары, беште лә һалды үҙен...

Бөгөн ҡаланан хат килде. Латипов яҙа. Педтехникумды беҙ уның менән бергә бөтөргәйнек. Ул ҡала мәктәптәренең береһендә ҡалды. Заводта ла беҙ уның менән кесе йәштән бергә эшләнек. Железоволочильный цехта беҙ уның менән күп тимер сыбыҡтары ашаныҡ. Барабан тирәһенә уралған тимер сыбыҡтың эҫелеге әле лә булһа күн бейәләй аша ҡулды йылытып торған кеүек. Их, завод, һағындыра ҡай саҡта. Шаулап торған цех, ундағы иптәштәр, йылдар буйына бергә эшләп, бергә шау-шыу килеп йәшәгән иптәштәр, һағындыра завод эргәһендәге наратлы тауҙар, комсомолдар йыйылышып шунда шаулап, уйнап йөрөгән саҡтар...

Их, ғүмер үтә, шулай ҙа хәҙер инде нарат урмандары ла юҡ. Дала, ҡайҙа ғына ҡараһаң да — йәйрәп киң дала ята. Бик күңелһеҙ була ҡай саҡта.

Ҡалалағы иптәштең яҙыуына ҡарағанда Әсмә тормошҡа сыҡҡан. Әсмә! Йөрөгән булдыҡ беҙ һинең менән, ғүмерлеккә тигән булдыҡ, йәй көндәрҙе баҡсаларҙа йөрөгәндә, яландарға сыҡҡанда, беҙ киләсәк тормош тураһында һөйләшә торғайныҡ. Ысындан да яратыша торғайныҡ бит. Ә хәҙер ул тотҡан да бер райисполком сотруднигына тормошҡа сыҡҡан. Ире шунда эскесе бер шарлатан, ти. Педтехникумды бөтөргәс, ул да ҡалала ҡалмаҡсы ине. Мин «әйҙә совхозға барайыҡ, икебеҙгә лә эш табырбыҙ әле» тип әйткәс, тыңламаған булды. «Казармаларҙа, бысраҡ тормошта тороу

туйҙырған инде, йәштән дә шул ауыр тормошта тороп ялҡытҡан» тип әйткән булды.

Ә мин ятам әле. Түҙергә кәрәк. Ауыр булһа ла — ҡыҙыҡ бит. Ағағыҙ хәҙер тракторҙы ла беләә. Тракторҙы өйрәнеү үҙе ни тора. Ә тракторист дуҫтар, тракторсы ҡыҙ Марина Орлова, уның, пожалуй, Әсмәгә генә торорлоғо бар... Шулай ҙа йәшлек үтә, битте лә хәҙер бына һаҡал-мыйыҡ ҡаплай башлаған. Маңлайҙа йыйырсыҡтар ҙа артҡан кеүек тойола. Ә тормошто беҙ яңы ғына ҡорабыҙ. Беҙ ҡартайһаҡ та — тормош йәшәрә. Шуға күрә лә ана шул йәш тормош ҡосағында үҙеңде ҡарт итеп һиҙмәйһең, йөрәк беҙҙең һаман йәш көйгә тора, ҡартая белмәй йөрәк...

Апуштың ҡатыны Саниә менән столовойҙа официантка булып эшләүсе Ғәйшә һәр ваҡыт дуҫ булып йәшәнеләр. Уларҙың дуҫлығы совхоз ойошторолған йылдарҙа уҡ төрлө ҡара эштәрҙә бергә эшләгән, тормоштоң әсеһен-сөсөһөн бергәләп татый башлағандан бирле килә. Улар ауылдан да бергә килгәндәр. Бергә эшкә ингәндәр. Икеһе лә етем булып үҫкәндәр. Ҡыҫҡаһы: уларҙың дуҫлығы тормоштоң уртаҡлығы, йәшәүҙәренең бер төҫлөлөгө менән бәйләнгән. Ә ундай дуҫлыҡтың төйөнө ҡаты була. Ундай дуҫтар тиҙ генә онотолмайҙар.

Тик һуңғы ваҡытта ғына уларҙың тормош юлдары айырыла башланы. Саниә үткән йәйҙән тракторҙа эшләй башланы. Комсомолда актив эшләй. Ә Ғәйшә нишләптер тракторҙа эшләргә теләмәне. Әллә өйрәнә алмам тип ҡурҡҡандыр, әллә тракторҙа эшләүҙең ауырлығын күтәрә алмам тип уйлағандыр — ул квалификацияһыҙ ҡалды.

Ләкин Саниә менән уның дуҫлыҡтары әле һаман да һаҡланып килә. Ғәйшә Саниәнән бер нәмәһен дә йәшермәй.

Әле лә шулай булды. Саниә менән улар Ғәйшәләр торған казармала осраштылар. Ғәйшәнең иптәштәре — ҡайһы бере столовойҙа эшләй, ҡайһы берҙәре тегендә- бында сығып киткәндәр.

Ғәйшә пожар булған төндө Михайлов менән булған ваҡиғаны һөйләне.

— Туғанҡайым, шикләнеп йөрөйөм. Бер кешегә лә әйтмәнем. Һиңә генә һөйләйем. Һин зинһар бер кешегә лә әйтмә.

Ана шул көндө мине завхоз осратты. Столовой алдында туҡтатты ла: «Һиңә йомош бар, Айша» ти. Аптырап киттем. Әллә миңә күҙе төшкәнме был ҡарт шайтандың, мин әйтәм.

— Һин бөгөн кис Михайлов менән ҡунырға тейешһең,— ти. Мин ғәжәпләндем дә ҡуйҙым. Нәмә әйтергә лә белмәнем.

— Һин асыуланма, ти, Михайлов, ти, насар егет түгел. Мин һиңә, кәрәк булһа, күп итеп аҡса бирәм. Тик төндә ул электр станцияһында дежурить иткәндә уны станциянан алып сыҡ, бик аҙға ғына... Ул әйтә, мин, ти, дежур ваҡытымда урынымдан ҡуҙғалмам... Мин әйтәм берәй ҡыҙ килеп ҡаш һикертһә — ҡуҙғалыу түгел, әллә ҡайҙа китерһең...

Бына шулай, ти. Мин уны-быны уйлап торманым. Миңә аҡса кәрәкмәй, мин әйтәм. Мин бер нәмә лә аңламайым. Үҙем барып Михайловтан нәмә барын һорашырмын әле, тинем. Шулай итеп, туғанҡайым, ярты төндәр ваҡытында станцияға барһам, как раз Михайлов дежурить итә. Индем, һөйләштек. Тегене тартҡылаштырам. Ул да минең менән шаярырға тотондо. Беләһең бит Михайловтың матурлығын да, көләслеген дә: бер ҡыҫып ҡосаҡлағайны, үҙемде-үҙем оноттом.

Шаярған булып аралыҡтан мастерскойға инеп киттек... Потаповтың әйткәндәрен ныҡлап аңлатырға ла өлгөрә алманым... Беҙ сығыуға инде станция эсендә ут таралғайны... Бер көн милиция саҡырып:

— Ниңә унда инеп йөрөйһөгөҙ, Михайлов һине үҙе саҡырҙымы? — тип һорашты. Нисек итеп кеше өҫтөнә ялған бәлә яғаһың. — Үҙем килдем, мин әйтәм, яратып йөрөй инем — тоттом да барҙым, тинем. Бер ҙә генә шунда Потаповтың һүҙҙәрен хәтерләмәнем... Әле лә шуға шикләнеп йөрөйөм, туғанҡайым...

— Ниңә әйтмәй йөрөйһөң шуны әллә ҡасан? — тине Саниә. — Шундай нәмәне әйтмәй йөрөйҙәрме ни? Әйҙә хәҙер үк Шубинға әйтәбеҙ...

Ғәйшә ҡапыл үҙгәреп китте. Уның тауышы инәлесле, илаулы тауыш ине:

— Туғанҡайым Саниә, нисек булыр икән һуң? Үҙемде ябып ҡуйһалар... Себергә ебәрһәләр, Саниә...

— Иҫәр, уның өсөн һиңә ни булһын, ти. Әллә ҡасан әйтергә ине. Бер ҙә юҡты уйлама, һин әйтмәһәң — үҙем барып әйтәм.

— Саниә, әгәр ҙә бер кешегә сығарһаң, дуҫлыҡтан айырылырһың. Мин һиңә ышанып һөйләнем, ә һин...

— Аңламайһың, Ғәйшә, һиңә түгел, ә Потаповҡа насар булыр. Бәлки ул ут һалғандыр?..

— Белмәйем инде, Саниә... Ну теләһә ни булһын, кешегә әйтмә, ялынып һорайым. Унан кеше әллә ни һөйләр. Бергә меңде ҡушыр. Аҡсаға һатылып йөрөгән Ғәйшә, фәлән-төгән. Кеше бит ул хаҡты ла, нахаҡты ла һөйләй...

Уларҙың һүҙе ошонда бөттө. Саниә иң яҡын дуҫы булған Ғәйшәнең үтенесен тыңламаны. Шунда уҡ был турала Шубинға һәм Саматовҡа әйтте.

— Так... — тине Шубин.

— Ҡыҙыҡ нәмә әйттең әле һин,— тине Саматов...

Моратов инженер-механизатор Эйдельманды үҙенең кабинетына махсус доклад менән саҡырып алды. Директор инженерға ғәҙәттәгенән дә уҫалыраҡ, асыулыраҡ күренде. Инженер кабинетҡа инеү менән:

— Һаумыһығыҙ, — тине һәм директорҙың ултырырға саҡырыуын, урып күрһәтеүен көтөп ҡалды. Ләкин директор нәмәлер яҙынып ултырған еренән башын аҙ ғына күтәреп иҫәнләште лә тағы яҙырға тотондо. Эйдельман, баҫҡан урынынан ҡуҙғалмай, үҙе берәй һүҙ әйтеп тынлыҡты боҙорға уйлап торғанда ғына, Моратов ҡапыл ғына башын күтәреп:

— Әйҙә, ултырығыҙ, — тине, — минең һеҙҙең менән һөйләшкән бар, ләкин ремонт эштәре, беҙҙең машиналар паркының хәле менән нығыраҡ танышҡым килә. План тураһында беләм, әлбиттә, ләкин миңә... бөтә ваҡлыҡтар менән танышырға кәрәк. Иң элек әйтегеҙ әле, пожалуйста, ошо

иҫке мастерской менән генә ҡалғанда, беҙ ремонтты ваҡытында үткәрә алабыҙмы һәм шул хәлдә планды үтәү өсөн нәмәләр кәрәк?

Был һүҙҙәрҙән һуң Моратов папиросын алып тоҡандырҙы һәм, бер ҡулына эйәген ҡуйып, инженерҙы тыңларға әҙерләнгән кеүек, уның күҙҙәренә туп-тура ҡараны. Инженер һүҙҙе аҡрын ғына, һалмаҡ ҡына башланы һәм, беренсе һүҙҙе әйтеү менән үк, галстугын төҙәтеп ҡуйҙы.

— План буйынса беҙ был мастерскойҙа ла машиналарҙы өлгөртә алабыҙ. Сөнки автомашиналар шунда уҡ гаражда көйгә төҙәтеләләр, ләкин, минеңсә, һәм фактический ҙа шулай, запас частарҙың етмәүе, токарный станоктың һаман да булһа беҙгә ебәрелмәүе пландың үтәлешен ҡурҡыныс аҫтында ҡалдыралар...

Директор ҡуйы итеп папирос төтөнөн өрҙө лә:

— Мин ғәфү үтенәм, һеҙҙе бүләм,— тине.— Запас частар, мәҫәлән, ниндәй частар бигерәк тә етмәй?

— Мәҫәлән, беҙҙең иң мохтаж нәмә хәҙер поршень ҡуласалары, клапандар, муфта дискылары, радиатор, терһәкле валдар... Күптәр улар. Запас частарға беҙ күптән инде заказ биргәйнек. Токарный станок тураһында ла мин производство яғынан һеҙҙең урынбаҫарығыҙ булған иптәш Сергеевҡа әйткәйнем. Был эштә ул яуаплы тип уйлайым.

— Мин һеҙҙе тағы бүләм, һеҙгә билдәле, беҙ күптән түгел күп кенә запас частар таптыҡ, яңы поршень ҡуласалары, клапандар, муфта дискылары таптыҡ. Бер нисә радиатор ҙа таптыҡ, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ниңә ул запас частар ҡар аҫтында ҡалғандар? Улар өсөн кем яуаплы?

— Мин ул частар тураһында бер нәмә лә белмәйем. Миңә ул хаҡта әйтеүсе булманы.

Моратов ҡулындағы папиросын, тартылып бөтмәҫтән үк, алдындағы төпсөк һауытына ташланы һәм ҡырҡа ғына тауыш менән:

— Минеңсә, һеҙ эшкә һалҡын ҡарайһығыҙ, инженер. Совхоздың яҙмышын ҡайғыртмайһығыҙ кеүек күренә.

Ремонт эше, күреп тораһығыҙ, тартыла. Тулы яуаплылыҡ юҡ. Нисек итеп инде бергәләшеп шул токарный станокты ошо көнгә тиклем ала алманығыҙ?

— Ғәфү итегеҙ, станок менән генә булмай, уның токарҙары — эшселәре лә кәрәк. Ә улар юҡ. Сергеевҡа был турала мин ныҡлап әйткәнмен, мәсьәлә күптән ҡуйылған. Ләкин бары ла тик кенә эшләнмәй...

— Да. Тик эшләнергә тейеш. Мин уйлайым, һеҙ большевиктарса темптар тураһында ишеткәнегеҙ барҙыр.

— Әлбиттә бар,— тине инженер.— Мин һеҙҙең был һөйләшеүегеҙгә бик шатмын. Тураһын ғына әйткәндә, хәҙер миндә бер ни тиклем апатия бар. Апатия тигәс тә, совхоз төҙөлөшөнә ышанмау йәки, ғөмүмән, фекер ҡаршылығынан түгел — былай ғына. Мин үҙем совет юғары мәктәбендә уҡыған кеше. Сығышым да пролетариатҡа дошман синыф түгел. Минең атай әле һаман да уҡытыусы. Бында үҙем теләп килдем. Бик тырышып эшләргә, тормош, төҙөлөш менән аралашырға иҫәп бар ине. Ә бында бер аҙ ситләтеү бар. Мәҫәлән, иҫке директор Афанасьев заманында күп нәмәләр тураһында минең фекер менән иҫәпләшмәй ҙә торғайнылар...

Һалҡын ҡараш шунан тыуырға мөмкин, әлбиттә. Мин үҙемде ғәйепһеҙ тип әйтә алмайым. Шулай ҙа ышаныслыраҡ ҡараш булһа...

— Аңлайым,— тине директор.— Миңә килгәндә, мин һәр ваҡыт һеҙҙең менән тығыҙ бәйләнештә булырмын. Ғөмүмән, намыҫлы, бирелеп эшләү булырға тейеш. Әйҙәгеҙ бергәләп удар эшкә тотонорға. Булмаһа, һеҙ үҙегеҙ теге ҡалалағы станоктарҙы алып ҡайтығыҙ әле. Тик ҡағыҙ яҙышып ҡына эшләп булмаҫ. Ә эшселәр мәсьәләһен беҙ завод менән һөйләшеп хәл итерҙәй булып торабыҙ. Шулай эшләйек. Квартираға инеп ултырығыҙ. Оҙаҡ итеп һөйләшербеҙ.

Директор кабинетынан сыҡҡанда, инженер йылмайып һаулашты.

Уның артынан директор: «Интеллигент психологияһы шул. Үҙенә күрә подход һорай, ничево. Тартылһа, он булыр» тип уйлап ҡалды.

Туҡталған эшен дауам итергә тип, тағы алдында ятҡан ҡағыҙҙарға тотонғайны, ишектә Нәғимов күренде.

— Әйҙә, иптәш, — тине директор. Нәғимов һис һүҙһеҙ директор ҡаршыһындағы ултырғысҡа килеп ултырҙы ла:

— Иптәш директор, һеҙгә әйтергә кәрәк таптым,— тине.

— Әйҙә рәхим ит, нәмә бар?

— Бында завхоз булып Потапов тигән бер бәндә эшләй. Мин яҙ көнө «Н» совхозында эшләгәндә, беҙ уны, кулак булыуы һәм эшселәргә йыртҡыстарса ҡарашы өсөн, совхоздан ҡыуғайныҡ. Әйтергә кәрәк, ул полевой староста булып эшләй ине. Минең үҙемде лә бер ҡамсы менән тарттырғайны. Ул Башҡортостандағы «...» төбәгенең атаҡлы кулагы булған. Раскулачить ителгән. Ялған документ менән совхозға барып оялаған булған. Мин шуны белгән көйө йәшереп ятҡыраһым килмәне. Ҡалғаны һеҙҙең эш. Бына шул. Хәҙергә һау булығыҙ әле...

Шул һүҙҙәр менән ул һөйләшкәндә һалып ҡуйған шлемын башына ҡапланы ла, директорҙың яуабын көтмәйенсә үк, сығып китте. Нәғимов сығыу менән, Моратов телефон трубкаһына тотондо.

— Почта, почтамы был? Милицияны бирегеҙ әле. Милиция. Кем һөйләй? Иптәш начальникмы? Бына нәмә... Был директор һөйләй. Эйе Моратов...

Ул арала кабинетҡа директорҙың урынбаҫары килеп инде һәм Моратов телефонда һөйләшеп бөткәс тә.

— Эш насар, — тине. — Яңы мастерскойҙа эшләүсе плотниктарҙың бөгөн тағы өсәүһе ҡасҡан. Унда бары өс кенә кеше ҡалды хәҙер...

Директор өҫтәл артынан тороп коридорға сыҡты һәм коридор аша ғына партия ойошмаһы бүлмәһен асып ҡараны. Саматов унда юҡ ине. Урынбаҫары сығып киткәс, директор бер аҙ ваҡыт бүлмә буйлап йөрөнө лә йортҡа ҡараған тәҙрә янына барҙы. Тәҙрә аша мастерскойға ҡарай теҙелеп торған «катерпиллер», «интер» тракторҙарының сафтары күренде. Тракторҙар, йөҙләп трактор, көҙҙән килеп теҙелгәндәр ҙә мастерскойға

инергә сиратта торалар. Улар ремонт көтәләр. Тракторҙар яртылаш ҡар аҫтында ултыралар. Тәгәрмәстәре ҡарға күмелгән.

Хәҙерге бәләкәй мастерской 10 көнгә бер трактор сығарып тик тора. Мастерскоймы ни ул? Ә яңы мастерской эшләнеп бөтөргә күп әле. Уның түшәмдәрен, түбәһен эшләп бөтөрәһе бар. Етмәһә, унан эшселәр ҡасып бөткәндәр...

Тәҙрә алдына баҫҡан да директор шул турала уйлай. Уның ҡырған һаҡалында, елгә ҡарайған йөҙөндә бер үҙгәреш тә һиҙелмәй. Тик ике ҡаш араһы ғына йыйырыла. Директорҙың уйҙары күңелле түгел. Совхоз эшендәге ҡаршылыҡтар, береһе артынан береһе, директорҙың күҙ алдына килеп кенә торалар. Ремонт эше ҡурҡыныс аҫтында. Орлоҡ әле булһа таҙартыла башламаған. Эшселәрҙең тормош шарттары ауыр.

Совхозда яуапһыҙлыҡ. Бирелгән заданиеларҙы тиҙ һәм асыҡ иттереп үтәмәйҙәр.

Ҡайҙа ҡараһаң — унда хужаһыҙлыҡ. Машиналар бары ла йыйып алынмаған. Тирә-яҡ ауылдарҙа совхоз тураһында насар һүҙ йөрөй.

Быға тиклем әле Моратов күберәк совхоздың хәле менән танышып, бөтә ваҡлыҡтарға тиклем үҙ ҡулы аҫтына алып еткергәне юҡ ине. Һуңғы көндәрҙә булып үткән хәлдәр директорҙы ашығырға, һис кисекмәйенсә эштә һынылыш яһауҙы талап итәләр ине...

Шул ваҡытта директорҙың, кабинетына комсомол коллективының секретары Васька Кудрәй килеп инде.

Иң элек Васька һүҙ башланы:

— Иптәш директор, беҙҙең бер комсомолка плотник эшсе бар. Усманова Галина. Ул мастерскойҙы эшләүҙә, хәҙергә бәләкәй булһа ла, удар бригада төҙөүҙе өҫтөнә алды. Мастерскойҙа өс кенә плотник ҡалған. Казармалар эшләүсе дүрт плотникты алырға тура килә. Ә мунса эшләүселәргә теймәҫкә кәрәк ине. Мунса ла бик кәрәк.

— Әйҙә, Васька, молодец йәштәр! Әгәр ҙә ысындан да удар эш күрһәтһәләр — минең яҡтан вәғәҙә — уларға премия,— тине директор.— Мин бөгөн үк уларҙы күсереү тураһында начальникка әйтермен...

Директор телефон трубкаһына тотондо...

— Ярай, тырышып ҡарармын. Ләкин беҙҙең ҡатын-ҡыҙ һүҙен тыңлармы икән һуң? Мин үҙем эшләрмен дә ул...

Был һүҙҙәрҙе комсомол коллективының бүлмәһендә плотник ҡыҙ Ғәлиә Усманова һөйләне. Васька Кудрәй, оҙон сәстәрен бармаҡтары менән аралаштырып, уның һүҙен бүлде. Оҙон бармаҡлы ҙур ҡулдарын Ғәлиәнең яурынына һалды. Уның күҙҙәре Ғәлиәгә теклэп ҡарайҙар, йөҙө йылмая.

— Их, Галина дуҫ, молодец. Яратам үҙеңде. Ҡыҙ итеп түгел. Бына коллективтың иң яҡшы комсомолкаһы итеп яратам! Аңлайһыңмы? Ну ярай. Ә булдырыу яғына килгәндә мин йөҙ процент ышанам. Бына хәҙер һин, һинең атайың, унда бер аҡһаҡ плотник бар, тағы Пашка — ә Пашка һинең ярҙамсың булыр. Ул да бит беҙҙең ячейканың ышаныслы комсомолы. Мин уның менән дә һөйләшермен. Булдымы? Бир ҡулыңды.

Шул көндө кис менән Ғәлиә үҙенең атаһы Усман ҡарт, аҡһаҡ Ғалимьян, комсомолец Пашка менән оҙаҡ һөйләшеп ултырҙы. Усман ҡарт ҡыҙының һүҙенә ҡаршы килмәне.

— Ҡартайғанмын бит, ҡыҙым, һеҙҙең арттан ҡыуып бара алырмынмы икән һуң? Ярай инде. Һеҙҙән айырылмам...

Тик Ғалимьян ғына, шикләнеп:

— Һин мине үҙеңдең арттан эйәртәһең эйәртеүен дә — мин икенсе аяғымды ла һындырмаммы икән? Унан һуң бит беҙҙең плотник халҡы асыуланып ҡуймаһын. Иптәштәрҙән айырылыу булмаҫмы? Артелде ташлап китергә тура килә бит.

Ғинуар айының уҫал һалҡын көндәренән береһе ине. Офоҡтоң иң түбәнендә генә ҡыҙғылтыраҡ түңәрәк булып ҡояш ҡарай. Ләкин ҡояш үҙе лә хәҙер һалҡындыр кеүек. Сөнки уның ғәҙәттәге аҡ нурҙар сәскәне лә күренмәй. Тик ҡояш яҡтыһында ҡар киҫәктәре генә күҙҙәрҙе

сағылдырырлыҡ итеп йымылдайҙар. Совхоз йортонда ҡай ваҡыт көслө шартлау тауышы ишетелеп ҡала. Был — һалҡынлыҡтан ағастар шартлайҙар...

Совхоздың яңы мастерскойында икенсе көн инде удар бригада ҡыҙыу эш өҫтөндә. Бригадала 7 кеше: Ғәлиәләр артеленән дүрт плотник һәм мастерскойҙа башта уҡ эшләүселәрҙән өс кеше. Бригаданан өс кеше мастерскойҙың эсен рәткә килтерәләр, ҙур ишектәрҙе ҡуялар, дүрт кеше — тышҡы эштәрҙә.

Хәҙер мастерскойҙың түшәме лә һалынып бөткән. Тик түбәне генә ябып бөтөрәһе бар. Ғәлиә менән аҡһаҡ Ғалимьян түбәндә ҡалай аҫтына ҡыйыҡ ағастары ҡуялар. Икенсе баштан Усман ҡарт менән тағы бер кеше ҡалай менән түбәне ябып киләләр.

Ғәлиә башта кәрәкле күләмдәге ағасты йышҡы менән тигеҙләй ҙә, шуға ярарлыҡ оя әҙерләп, урынлаштырып бара. Икенсе яҡлап шул уҡ эште Ғалимьян алып бара.

Ҡыштың һалҡыны туҡтауһыҙ хәрәкәттә булған ҡулдарҙы тота алмаһа ла, кешеләрҙең биттәрен ҡура. Танау остарын семтә. Ҡыҫҡа тундар аша бөтә тәнгә һалҡынлыҡ үтә. Ғәлиәнең танауы өшөгән.

Ул туңған танауын сепрәккә ураған да, сепрәк өҫтөнән күҙҙәре генә күренәләр.

Ғалимьян да тиҙ-тиҙ хәрәкәттәр яһарға тырыша. Йыш ҡына ҡулдары менән битен, танауын ыуыштыра.

Бөгөн бригада төшкө ашҡа ла оҙаҡ туҡтап торманы. Ике көн эсендә мастерской әҙер булырға тейеш. Хатта, тәмәке тартырға ла туҡтау юҡ.

Бик ҡыҙыу ғына эшләгәндә Ғалимьян, бер балканы урынлаштырып ятҡанда, балтаһы менән һул ҡулының баш бармағына һуҡты. Ул, балтаһын ҡуйып, һул ҡулының бейәләйен һалды һәм баш бармағын өрөргә тотондо. Шул арала уҡ уның һуғылған бармағына ҡан тулышты һәм бармаҡ ҡара ҡыҙғылт төҫ менән күгәреп сыҡты.

— Нәмә булды, Ғалимьян ағай? — тине Ғәлиә һәм үҙе торған урынынан ғына Ғалимьяндың бармағын күрҙе.

— Ничего, Ғалимьян ағай, килтер тиҙ генә бәйләп алайыҡ та, бер нәмә лә булмаҫ.

Ғалимьян Ғәлиәгә яуап бирмәне. Тик торғанлыҡтан, һалҡынлыҡ уны нығыраҡ тирәләп алды. Ғалимьянға бында хәҙер уның бөтә тәне туңа башлаған кеүек тойолдо. Хәҙер ошо мастерской башынан төшмәһә, йығылып үлергә генә ҡалған кеүек булды. Ғалимьян, балтаһы менән йышҡыһын эләктереп, түбәнгә төшә башланы. Ғәлиә эргәһенән уҙғанда ул:

— Суҡынып китһен мастерскойы, үлер хәл юҡ әле...— тип мығырҙаны.

Ғәлиә ҡапыл уға боролдо.

— Ҡайҙа бараһың?— тине ул һәм Ғалимьяндың алдына килеп баҫты. Ғалимьян асыу менән Ғәлиәне төртөп ебәрҙе. Ғәлиә мастерскойҙың түшәменә арты менән йығылды.

Ул аҡрын ғына ултырҙы ла, аяғына баҫырға уйлағас, башы әйләнеп, тағы теҙләнде. Тамағына таш килеп ултырған кеүек булды. Күҙҙәренә йәш тулды. Ғәлиәнең шунда үкһеп-үкһеп илағыһы, тауыш-тынһыҙ ғына илағыһы килде.

Ғәлиә аталары эшләгән яҡҡа, тимер тауышы ишетелгән яҡҡа, ҡараны. Усман ҡарттың бөгөлгән арҡаһы ғына күренә. Ул ҡулын йыш-йыш өрөп ҡалайға һәм ҡаҙаҡ башына һуға. Һуҡҡан саҡта уның арҡаһы бер турая, бер бөгөлә.

Ғәлиә бер генә минутҡа үҙен дә, атаһын да ҡыҙғанып алды. Атаһы эргәһенә барып, уны ҡосаҡлап илау теләге тыуҙы.

Ләкин был уйҙар, күҙ асып йомған арала ғына, йәшен тиҙлеге менән үтеп киттеләр. Ул комсомол секретары менән һөйләшкәнен, мастерскойҙың ике көн эсендә әҙер буласағы тураһында үҙҙәренең һүҙ биреүҙәреп хәтерләне. Күҙҙән атылып сығырға торған йәштәр тышҡа сыҡманылар. Тик уң күҙенән генә бер тамсы йәш сығып танауын бәйләгән сепрәккә тамды ла туңды. Ғәлиә шунда уҡ үҙенең эшенә тотондо.

Түбәндән комсомолец Пашканың тауышы яңғыраны:

— Галина, мин һинең эргәңә киләм. Ниңә саҡырмайһың? — тине ул һәм балтаһын биленә ҡыҫтырған килеш өҫкә менә башланы.

— Галимжанка ниңә ҡасты?

— Галина, милая, туңмайһыңмы әле?..

Пашкаға ҡарағанда, Ғәлиәнең күҙендә йәш күренмәй ине инде...

Пашка менән Ғәлиә тағы ла ҡыҙыу эшкә тотондолар. Ғәлиә менән Пашканың ҡулында йышҡы һәм балталар, бәләкәй бысҡылар, уйынсыҡ еңеллеге менән йөрөп, ағас киҫәктәрен, өрлөктәрҙе, һайғауҙарҙы киҫтеләр, шымарттылар. Тирә-яҡҡа юнышҡылар һикерҙе.

Усман ҡарт менән уның иптәше лә өҙлөкһөҙ эшләүҙәрендә дауам иттеләр, һалҡын һауаны ҡалай тауышы яңғыратты.

Күп тә үтмәне мастерской эргәһендә тағы аҡһаҡ Ғалимьяндың ҡыҫҡа һәм бер яҡҡа янтайып килә торған кәүҙәһе күренде. Ғәлиә юғарынан уның килгәнен күҙ осо менән генә күреп ҡалды. Ул, аҡһаҡтың кире килгәнен күргәс, йәшерен генә йылмайып ҡуйҙы.

«Ярай әле Пашкаға һөйләмәгәнмен» — тип уйланы Ғәлиә. Уның күңелендә Ғалимьянға ҡарата был минутта һис бер төрлө асыу юҡ ине инде. Ғалимьяндың Ғәлиәне асыу менән төртөп йығыуы ла уның күңелендә эҙ ҡалдырманы.

Ҡышҡы кистең һалҡын тынлығында мастерской эсендә һәм уның өҫтөндә бригаданың балта тауышы, ҡалай шаулауы тағы ла көслөрәк яңғыранылар...

Электр станцияһы янған төндө Потапов менән материал склады сторожы Ванька765ы туҡмап һәм бысаҡ менән сәнсеп совхоздан ситтәрәк ярты саҡрым самаһы бер соҡорға илтеп ташлағандар ине. Потапов унда:

– Был Васька, иҫерек баш, ҡайҙан һиҙеп ҡалған... Ни етмәгән инде уға, – тип һөйләнде.

— Шулай ҙа ҡурҡыныс, - тине сторож Ғәйнанов,— минең кеше үлтергән юҡ. Терелеп ҡайтмаҫмы икән?.. Мин шикләнә төшәм...

— Йөрәгеңә бысаҡ ҡаҙаһындар ҙа, терелерһеңме икән?.. Һин ҡурҡма! Һинең менән беҙгә нәмәнән ҡурҡырға? Үс алырға ғына кәрәк. Мин үҙем большевиктарға зарарҙан башҡа нәмә эшләмәҫкә күптән үк инде ант иткәнмен, һинең дә шулай йорт-ерҙәрең йәл түгелме ни?

— Йәл булмаған ҡайҙа инде ул...

— Шулай булғас...

Ләкин Потапов Ваньканың яҙмышы тураһында бер аҙ яңылышты.

Ванька ул төндө генә үлә алманы.

Уны тракторист Сафин табып алып ҡайтты. Сафин ул төндө тракторы менән станциянан ҡайтып килә ине. Бынан бер-ике көн генә элек булып үткән буран юлдарҙы күмгән. Сафин трактор яҡтыһында юлды күрә алмай. Тик алда совхоз өҫтөндә пожар яҡтыһы тирә-яҡты яҡтыртҡан.

«Совхоз яна» — тип уйланы Сафин һәм, юл менәнме, юлһыҙмы барыуын тикшереп тормай, тракторҙы туп-тура утҡа ҡарай тотто. Газды күберәк бирҙе.

Сафиндың тракторы соҡор эргәһенән үткәндә, уның фонарҙары тәрән түгел соҡорҙо һәм унда ятҡан ҡара бер нәмәне яҡтырттылар. «Әллә бүре инде» тип уйланы Сафин. Ләкин теге ҡара нәмә ҡуҙғалманы. Шунда тракторист трактордан төшөп ҡара нәмә эргәһенә барҙы, һәм уның кеше кәүҙәһе икәнен аңланы. Ул тиҙ генә тракторына ултырып был турала совхозға ҡайтып әйтергә тип уйлағайны ла — кәүҙәнең кемдеке икәнен, ниндәй кеше икәнен белеү теләге уны ебәрмәне. Ул шырпы тоҡандырып кәүҙәнең йөҙөн ҡараны. Был — Косач ине. Сафин ҡапыл ҡысҡырып ебәрҙе һәм үҙенең тауышынан үҙе ҡурҡты... Бер аҙ аптырап торғандан һуң, ул Ваньканың кәүҙәһен тракторының артына тағылған ҙур саналарҙың береһенә, кәрәсин цистернаһы эргәһенә һуҙып һалды ла совхозға китте...

Ваньканы совхоздан алыҫ түгел район үҙәгендәге больницаға килтерҙеләр. Бер тәүлектән һуң ул унда иҫенә килде. Күҙҙәрен асып тирә-яҡҡа ҡаранды. Ҙур ғына бүлмә. Стеналар аҡҡа буялғандар.

Бүлмәнең ике яҡ стенаһы буйлап теҙелгән тимер карауаттарҙа кешеләр яталар. Бүлмә эсендә өҫтөнә аҡ кейгән бер ҡатын йөрөй. Ул, карауаттар эргәһенә килеп, унда ятыусыларҙың мендәрҙәрен, одеялдарын төҙәтештереп ҡуя. Бүлмә эсендә йыш ҡына ауыр ыңғырашыу тауыштары ишетелә.

Ванька үҙенең ҡайҙа икәнен оҙаҡ аңлай алмай ятты. Тик бер тапҡыр торорға тип хәрәкәт яһағанда, күкрәгендә әрнеүле ауыртыу һиҙгәс, ул үҙенең башынан үткән ваҡиғаларҙы берәм-берәм хәтерләй башланы. Ләкин баш ныҡ уйлай алмай. Баш тубал кеүек. Бер күренеш икенсеһе менән бутала. Шулай ҙа ул Потапов һәм сторож Ғәйнановты хәтерләне...

Рабочком председателе Шубин адресы менән район больницаһынан шундай яҙыу алынды:

««Урал» совхозы рабочком председателе иптәш Шубинға. Һеҙҙең совхоз эшсеһе Никифоровтың үтенесе буйынса, һеҙгә шуны хәбәр итергә үҙебеҙҙе бурыслы һанайбыҙ. Ул, бер иҫенә килгәндә, һеҙгә әйтәһе һүҙе барлығы һәм һеҙҙе күрергә теләүен әйтте. Иҫенә килгәс, иң беренсе һүҙе шул булды. Хәҙергә әле милиция протокол төҙөй алғаны юҡ... Беҙ быны һеҙгә хәбәр итергә үҙебеҙҙе бурыслы һананыҡ...»

«Иҫерек көйгә һуғышҡандыр ҙа шунда... Нәмә әйтәһе булһын. Косачтың нәмә... Бик ҡыҙыҡ. Шулай ҙа эште ташлап унда йөрөп буламы инде. » тип уйланы Шубин. Һәм шунда уҡ ул эш араһында ул турала онотҡан да ине инде...

Бер көндө Ванька Косач ятҡан больницаға Потапов килеп инде. Больница эшселәренә үҙен:

— Мин Никифоровтың ҡәрҙәше,— тип таныштырҙы. Косач, Потапов ингәндә, иҫендә түгел ине. Бер аҙҙан һуң Ванька аҡрын ғына күҙҙәрен асты. Потаповты күргәс, уның күҙҙәре ҙурыраҡ асылдылар.

— Хәлеңде белергә килдем,— тине Потапов.— Ғәфү үтенергә килдем... Яңылышлыҡ менән булды... Мин һине хәҙер ҡыҙғанам, йөрәгем

түҙмәне, һин дә мине ҡыҙған, Иван. Ғүмергә лә онотмам. Кәрәк булһа, аҡса ла бирермен. Ләкин үҙеңде һаҡлай күр. Бер туғандар булып йәшәрбеҙ...

Потапов һөйләгәндә, Ванька һулышын йыш-йыш ала башланы. Уның ҡанһыҙланған ап-аҡ йөҙө тағы ла ағара төштө. Ул, бөтә көсөн йыйып, башын күтәрҙе, уң ҡулы менән Потаповҡа һуғырға теләгән хәрәкәт яһаған кеүек булды. Ләкин ҡулы күтәрелмәне. Ғырылдап башын мендәргә һалды, һуҙып-һуҙып тын алғанда, уның кәүҙәһе турая башланы.

Был күренеште күреп алған дежурный шәфҡәт туташы врач кабинетына ҡарай йүгерҙе...

Ванька Косач — «Урал» совхозының тракторисы Иван Никифоров үҙ күҙе менән күргән енәйәтте бер кемгә лә әйтә алмай үлде.

Потапов Ванькаға бирергә тип әҙерләгән бер нисә червонец аҡсаны ҡаты йомарлап тиҙ генә сығып китте.

Иге-сиге күренмәгән киң «Яйыҡ» далаларында ҡыштың шыҡһыҙ елдәре шаулайҙар. Әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа ауышалар уҫал елдәр һәм йәйрәп ятҡан дала өҫтөндә өҙлөкһөҙ әсе буран уйнай.

Далаларҙы киҫеп әллә ҡайҙарға, алыҫтарға, үткән юлдарҙан бик һирәк юлсылар уҙалар, һирәк кенә сана табандарының шаулап шығырҙағаны, уҙғынсыларҙың һуҙып-һуҙып аттарына ҡысҡырыуҙары буран аралаш ишетелеп ҡала ла, далала тағы ла буран ыңғырашыуы хөкөм һөрөүҙә дауам итә.

Тирә-яҡта күп километрҙар буйынса ауылдар осрамай, күңелһеҙ була буран аҫтында ҡалған далаларҙа.

Шул шыҡһыҙ бурандар ыңғырашыуы аша бер көйгә генә гөрөлдәгән көслө туҡылдау тауышы ишетелә башлай. Был тауыш иҫкәрмәҫтән ишетелгәндә алыҫтан пулемет тауышына ла оҡшап ҡала. Ләкин был пулемет тауышы түгел Ул — көслө “катерпиллер” тракторының гөрөлдәүе. Далалағы көслө буран араһында «катерпиллер» гөрөлдәүе бер юғала, бер көсәйә...

Трактористҡа көн дә бер, төн дә бер уға.

Бигерәк тә транспортта булһа инде, уның күп ваҡыты юлда үтә.

Тракторист Апуш та транспортта йөрөй.

Әле ул тимер юл станцияһына барған.

Күп урында юлды көрт баҫып киткән. Тракторҙың фонарҙары юлды саҡ-саҡ ҡына яҡтыртып баралар.

«Их, һалҡын да, шайтан алғыры . Толоп та бирмәйҙәр исмаһам» — тип уйлай Апуш.

Ул «Урал» совхозынан алыҫ түгел бер ауылдан килгән. Хәҙер инде бына икенсе йыл совхозда тракторист булып эшләй. Уны бында ауылдан комсомол ячейкаһы ебәргән. Ауылдан килгәс тә, өс ай уҡыттылар ҙа бына тигән тракторист яһап сығарҙылар.

Беренсе тапҡыр тракторға ултырған Апуш, ошо ҡырҡмаһа-ҡырҡ төрлө киҫәктәрҙән, иҫәпһеҙ-һанһыҙ кеүек күренгән системалар, тәгәрмәстәр, валёктарҙан һәм башҡа киҫәктәрҙән торған ҙур «шайтан арбаһы»ның сигенә сыға алмаҫ кеүек ине. Һәм төндәр буйы шул машинаны еңеү, картиналарҙа күргән трактористар булыу тураһында уйлап сыға торғайны Ул ваҡытта әле башҡа төрлө уйҙар, тормоштағы көндәлек төрлө ваҡ мәсьәләләр Апуштың күңеленә ныҡлап килмәй торғайнылар. Сөнки уға тиклем Апуштың үҙенә тормоштоң ваклыҡтары менән ныҡлап бәрелешергә, донъяла йәшәү тураһында ныҡлап ҡайғыртырға тура килмәй ине.

Йәшлеге ауылда, хәлле генә крәҫтиән семьяһында үтте.

Апуш матур итеп йырларға, шаярырға, төрлө нәмәләр тураһында матур итеп һөйләргә белә ине. Ауыл мәктәбендә уҡығанда мәктәп йортонда спектаклдәр ҡуйып йөрөгән йәштәр, комсомолдар араһына инеп китте. Кулак балаһы булмағас, һәр бер эштә актив ҡатнашып йөрөгәс, ячейка уны комсомолға алды.

Ул ваҡыттарҙан һуң инде күп һыуҙар аҡты, күп елдәр иҫте. Хәҙер бына ул тракторист.

Һуңғы ике йәй эсендә ул үҙ яуаплылығы аҫтына бирелгән «катер» менән бына шул далала кәҫ күтәрҙе, тырматты, сәсте һәм үткән көҙ трактор артынан комбайн эйәртеп бойҙай урып, йыйып йөрөнө.

Ошо һуңғы ике йыл эсендә генә ул ике тапҡыр өйләнергә лә өлгөрҙө. Ниҙәр генә үтмәй егет башынан? Өйләнеү кеүек мәсьәләне Апуш үҙенең генә шәхси эше тип ҡарай. Унан һуң улар быңдай ғына ваҡиғалар булып күренәләр ине. Ошо көнгә тиклем ул алдына килеп баҫҡан ниндәй генә мәсьәлә булмаһын— тиҙ һәм еңел хәл итеп килде.

Тик һуңғы ваҡытта Апуш үҙгәрә башланы Был үҙгәреште ул үҙе лә нисек тип һәм ниҙән килеп сыҡҡанын асыҡ әйтә алмаҫ ине. Әллә йәшлек үтеп барғанғамы? Шулай була бит ул: йәшлек көндәр улар күберәк төрлө хыял, үҙгәреүсән уйҙар менән үтһәләр, ғүмер үткән һайын кеше тормошҡа тәрәнерәк инә бара. Реаль, көндәлек тормош мәсьәләләре кешене борсой башлайҙар.

Шундай уйҙар әйләнә Апуштың башында. Бурандарҙа үтелгән юлдар уйлы булалар.

Тракторҙың моторы һаман да үҙ көйөнә гөрләүендә дауам итә.

Тирә-яҡта буран ыжылдай. Көн итек эсендә Апуштың аяҡтары өшөйҙәр, төрлө майға ҡатып, ҡайышланып бөткән кажан йылыны тота алмай.

«Станциянан сыҡҡанға күп кенә ваҡыт үтте. Аҙашып китмәһә инде кеше... һаман да совхоз уттары күренмәй...» тип уйланы Апуш.

«Ҡайтып етһәң, казармала яландағы кеүек булмай инде булыуын. Саниә лә көтә торғандыр әле... Тағы ла шул һалҡын столовой, шул уҡ серегән кәбеҫтә һурпаһы булыр инде... Йыуынырға тип әйтһәң — һыу табылмаҫ... Аҡса ла бирмәйҙәр бит...»

Совхоздағы көндәлек тормошта була торған етешһеҙлектәр Апуштың уйҙарын тағы ла күңелһеҙләндерҙеләр.

Береһе өҫтөнә икенсеһе өҫтәлеп тора бит ул. Ауылда ҡалған ҡатыны тураһында уның күп уйлағаны юҡ ине әле. Тик һуңғы ваҡытта ауылдан бер-бер артлы яуып торған хаттар Апушты борсой башланылар.

Саниәгә ул ошо үткән көҙ иген йыйған саҡта өйләнде. Уға өйләнер алдынан аталарына хат яҙҙы: «Мәйсәрә үҙе теләһә китһен, көсләп

тормайым. Сөнки, бәлки, ҡайтып булмаç бөтөнләйгә» — тип яҙғайны ул унда. Шуның менән эш бөткән иçәпләне. Ауылда ҡатыны барлығы тураһында Саниәгә бер һүҙ ҙә әйтмәне. Улар шулай тора бирҙеләр.

Беренсе тапҡыр өйләнгәндә ул үҙенән бигерәк аталарын ғәйепләй. Үткән яҙ көнө шулай, яҙғы сәсеү бөткәс, бер генә аҙнаға ауылға ҡайтҡайны — өйҙәгеләр тоттолар ҙа бәйләнделәр:

— Йәшең еткән, хәҙер инде һөнәрең дә бар. Башлы-күҙле булырға кәрәк, улым. Юғары остоң Хәсән ҡарт Мәйсәрәһендә күңелең бар тип ишеттек, беҙ ҡаршы түгел, йәй көнө беҙҙә эшләшер ҙә, унан үҙең менән булһа ла алып китерһең, беҙҙә булһа ла тороп торор. Хәсән ҡарт яҡшы тормошло кеше ул...

Ҡапыл ғына өйләнде лә ҡуйҙы ул шулай. Комсомолец иптәштәре: «Юҡҡа шул Хәсәнгә бәйләнгәнһең, советҡа ҡаршы кешеләр бит улар. Хәҙер бына раскулачить итә торған ғына кеше...» тип һөйләнгәндәр ине — Апуш иғтибарға алманы.

— Мин Хәсән ҡарт менән тормайым, Мәйсәрә менән торасаҡмын бит,— тип яуап бирҙе. Мәйсәрәне атайҙарында ҡалдырып китте. Тик быйыл йәй, совхоз эшселәренә бик тығыҙға килгәнгә, ауылға ҡайта алманы. Саниә менән танышып алғас, Мәйсәрәнән һыуынып та китте. Әллә һәр ваҡыт бергә эшләп трактористарҙың эшендә, тормошонда бөтә рәхәт, бөтә ҡыйынлыҡтарҙы бергә үткәргәнгәме, әллә Саниә Мәйсәрәгә ҡарағанда матурыраҡ күренгәнгәме, Апуш өсөн Мәйсәрә аҡрынлап юғала барҙы, йәй көнө әллә нисә километр ерҙән үҙенә ҡунаҡҡа тип килгән Мәйсәрәне кешегә-нигә күрһәтмәй, тиҙ арала ҡайтарып ебәреүсән булды.

Апуш, шулай башынан үткәндәрҙе уйлап бара торғас, юлдан ситкә сыҡҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Фонарҙар яҡтыһында ул ҡар аçтынан баштарын сығарып торған ваҡ ҡыуаҡлыҡты күрҙе.

«Тимәк үҙәк участканан һулғараҡ киткәнмен» тип уйланы Апуш һәм рулде уңғараҡ бороп юлға сыҡмаҡсы булғайны — алда уң яҡтараҡ буран аша

уттар йымылдағаны күренде. Был — совхоз уттары ине. Апуш тракторҙы тура уттарға ҡарай борҙо.

Буран һаман ҡотора, буран ыжылдай. Буран тауышы ҡай саҡта һуҙып-һуҙып бүре олоуына, ҡайһы ваҡытта нәҙек кенә тауыш менән илаған балалар тауышына оҡшап ҡала.

Дала буйлап буран геүелдәй.

Буран тауышы күңелһеҙ.

Апуштың уйҙары ла буран тауышы кеүек күңелһеҙ уйҙар. Ләкин алда йымылдаған уттар аҡрынлап был күңелһеҙ уйҙарҙы таратҡан, уларҙы артҡа, ҡараңғылыҡҡа ҡалдыра барған кеүек булалар. Совхоздағы үҙҙәренең казармаһын, шул казарма бүлмәләренең береһендәге бүлмә мөйөшөндәге карауатты һәм... Саниәне уйланы Апуш.

Бына теҙелеп киткән аҡ өйҙәр. Ана тегендә оҙонса итеп һалынған һәм хәҙер инде эшләнеп бөткән мастерской, янғандан һуң, тағы төҙәтелеп, яңы двигатель ҡуйылған электр станцияһы, пожарный каланча.

Һәм шул уҡ казармалар, өйҙәр буйлап теҙелеп киткән электр фонарҙары бурандар аша киң далала тирә-яҡҡа аҡһыл-зәңгәр нурҙар һибәләр.

Казармаларҙың да тәҙрәләренән теҙелеп уттар күренәләр.

Бурандар эсенән килгән кешегә был уттар шундай, шундай күңелле күренәләр...

Апуш тракторҙы туҡтатып радиаторҙың һыуын ағыҙҙы ла үҙе торған казармаға китте. Уның аяҡтары өшөп ойоған, кажаны туңған, саҡ-саҡ ҡына атлап бара.

Ләкин инде бына был фонарҙар яҡтыһына, ары- бире йөрөп торған совхоз кешеләре араһына килеп ингәс, баяғы күңелһеҙ уйҙар таралғандай булдылар. Юлда осрап ҡоро ғына бер-ике һүҙ әйткән участка мөдиренең һүҙҙәре лә әллә ниңә яғымлы кеүек тойолдо.

Столовой ябылмағайны әле.

— Сисенеп, аҙ-маҙ ғына булһа ла йыуынып алайым да, унан ашарға барырмын,— тип уйланы Апуш һәм, казарманы, ундағы иптәштәрен, үҙен һағынып көтәсәк Саниә тураһында уйлап, казарманың ишеген асты.

«Хәҙер Саниә мастерскойҙан ҡайтҡандыр, бәлки ашап йоҡларға ла ятҡандыр. Шул бер һүҙ булыр инде уның: «Ана минең бесәйем ҡайтҡан» тип әйтер инде ул шаярып...»

Ләкин... Саниә юҡ ине.

Апуш бер үҙҙәренең бушап ҡалған карауаттарына, бер шунда тәмәке тартып нимәлер тураһында шаулашып, һөйләшеп ултырған иптәштәренә һәм уларҙың, Апуш ингәс тә, тыныуҙарына ҡарап торҙо ла Саниәнең ҡайҙа китеүе тураһында һорап та торманы — шул көйгә үк бөтә нәмә аңлашылып тора ине.

— «Саниә киткән, бөтөнләйгә был урындан күскән...»

Карауатта Апуштың иҫке-моҫҡо кейемдәре, ҡатып бөткән мендәре менән одеялы ҡалған. Ә Саниә үҙе лә, нәмәләре лә юҡ.

Иптәштәре л ни әйтергә белмәй аптырап торалар — значит, шабаш...

Апуш аптыраған килеш, тауыш-тынһыҙ, буш, күңелһеҙ ҡалған карауатына барып ултырҙы. Иптәштәренән береһе уның эргәһенә килеп нәмә тураһындалыр һөйләргә тотондо.

Ләкин Апуш уны ишетмәне. Башы рәтләп уйлай алмай ине. Тик бер генә уй — тәртипһеҙ, эс бошорғос, йөрәк әрнеткес бер генә уй уның башын әйләндерә, йөрәген һыҙлата: «Ниңә киткән Саниә, нәмә булған? Нисек инде хәҙер мин бер үҙем?..»

Совхоз дирекцияһының ҡушыуы буйынса, трактористарҙың бер өлөшө, иртәгә иртүк тороп, икенсе участкаға орлоҡ таҙартырға китергә тейеш ине.

Кис менән казармаларҙа һөйләнгән һүҙҙәр яны мастерскойҙың өлгөрөүе, шул уҡ ваҡытта мунсаның да эшләнеп бөтөүе һәм башҡа шундай совхоздың уңыштары тураһында, иртәгә күптәрҙең икенсе участкаға китергә тейешлектәре тураһында булды.

Ремонтта эшләүсе Тугушов менән транспортта йөрөүсе Сафин бөгөн күрше ауылға мунсаға тип барғандар ҙа эсеп ҡайтҡандар.

Унда ғына эсеү етмәгән, совхозға ҡайтып ингәс, улар материал склады сторожы будкаһына инделәр.

— Әйҙүк, егеттәр,— тине Ғәйнанов. Ул уларҙың ни өсөн ингәндәрен алдан уҡ белеп тора. Сөнки Ғәйнановҡа барған кешеләр бары араҡы алыу өсөн генә баралар. Ғәйнанов итәк аҫтынан араҡы һата, спекуляция менән шөғөлләнә. Ғәйнанов совхоздағы бөтә кешене белә. Кемгә бирергә, кемдән йәшерергә ул инде өйрәнеп алған.

Ни етте кешегә ҡапыл ғына асылып ташламай ул. Ә инде Сафин менән Тугушовты ул яҡшы белә. Уларға ышана.

Хәҙер ҙә улар, һүҙҙе уратып тормайынса, туп-тура үҙҙәренең төп маҡсаттарына терәлделәр.

— Мунсаға барғайныҡ. 10 саҡрым араны өс сәғәттә ураныҡ. Центрспирт лавкаһы ябыҡ булды. Ни бары ярты литр ғына таптыҡ. Бер башлағас, үҙең беләһең, тамаҡты кәрәгенсә сылатҡы килә...— тине Тугушов.

Сафин уға өҫтәп ҡуйҙы:

— Иртәгә беҙҙе орлоҡ таҙартырға ебәрәләр. Мине транспорттан алалар...

— Ә мине мастерскойҙан алалар,— тине Тугушов.

Шунда уҡ Ғәйнанов карауат аҫтынан ярты литр араҡы сығарҙы. Аҡсаны түләнеләр ҙә, Сафин ярты литрҙың аҫтына һуғып асты һәм шунда уҡ эсә лә башланы.

Ауылда ла эсеп килгән Тугушов менән Сафин Ғәйнановтың йылы будкаһында, тағы ла берәр стакан эскәс, бөтөнләй иҫерҙеләр. Ғәйнанов, ҡуйы ҡаштары аҫтынан күҙен ҡыҫып ҡына ҡарап, ҡайғылы тауыш менән һөйләп китте:

— Һөйләмәгеҙ инде, егеттәр, совхозда беҙҙең эшсе халыҡҡа ҡәҙер юҡ. Служащийҙар ана ниндәй торалар. Эше ни ҙә, хеҙмәте ни. Өҫтәл артында ултырып аҡса көрәйҙәр...

— Правильно!..

— Һинеке дөрөҫ, ағай!

Ғәйнанов һүҙендә дауам итте:

— Ярай әле, беҙҙең трактористар һәйбәттәр, йыуаштар беҙҙең эшселәр. Юҡһа, нисек түҙеп тормаҡ кәрәк? Кешегә лә һанамайҙар бит. Мин бынан бер- ике, өс йыл элек шахтала эшләнем. Вот егеттәр ине. Начальствоны бик ҡоро тота торғайныҡ. Спецодежда бирмәһә, аҡсаны ваҡытында түләмәһә, ашау насар булһа — шабаш! Эшкә сыҡмайбыҙ ҙа вәссәләм. Берҙәм була торғайны халыҡ... Теләһәгеҙ нәмә әйтегеҙ, йомшаҡ беҙҙең эшселәр...

Ғәйнановтың һалмаҡ ҡына, аҡрын тауыш менән һөйләгән һүҙе аҡкан йылға кеүек аға. Трактористарҙы иркәләгән кеүек уның һүҙҙәре. Тугушов менән Сафин уның һүҙҙәрен ирреп тыңлайҙар. Ғәйнанов һөйләгәндә улар үҙҙәрен-үҙҙәре ҡыҙғаналар.

Сафин түҙмәне, быға тиклем булған тыныслығын боҙоп, ҡапыл өҫтәлгә һуҡты:

— Нәмә булған беҙгә, ни эшләп йомшаҡ булырға ти? Беҙ трактористармы? Беҙ эшселәрме? Иң ҡаты эш беҙҙең өҫтәме? Мин икенсе участкаға бармайым да и все! Бармайым, һин теләһәң нәмә эшлә, Тугуш, мин бармайым.

Тугушов тиҙ генә ҡыҙып китмәне. Иҫерек, арыған тауыш менән ул:

— Ашарға бирмәһәләр — ни эшләрһең?..— тине.

— Боғаҙҙарынан быуып алырмын. Шубинды кем тип беләһең? Ҡурҡаймы ни мин улай? Һис тә... Тағы ла Ғәйнановтың һүҙҙәре аҡты.

— Егеттәр, улай орҙо-бәрҙе эшләргә ярамай. Бер- ике кеше генә ҡаршы килеп бер нәмә лә сыҡмай ул. Барығыҙ ҙа берҙәм булһағыҙ инде — ашарға ла бирер, кейемен дә бирер. Бер ҡайҙа бара алмаҫ. Тик берҙәм

булырға кәрәк, һәйбәтләп кенә бергәләп һөйләшегеҙ... Конечно, ашау-эсеүҙең рәте булмаһын, йылы кейем бирмәһендәр, нисек итеп шул тиклем ергә орлоҡ таҙартырға бараһың? Уйын түгел бит ул орлоҡ таҙартыу... Етмәһә, тракторист башың менән ҡара эш эшләп йөрө...

Киткәндә тағы ла ярты литр алып сыҡтылар. Ғәйнанов уларҙы оҙатып ҡалғанда:

— Үҙ-ара һөйләшкән һүҙҙәр беҙҙең арала ғына ҡалһын. Мин үҙ кеше, эшсе итеп әйтәм...— тине.

Тугушов менән Сафин, сторож будкаһынан сыҡҡас та, бөтә совхозды яңғыратып ҡысҡырып йырларға, һүгенергә тотондолар. Казарманың ишеге асылып, стенаға шаулап бәрелде. Коридор уларҙың иҫерек, һүгенеү тауыштары менән тулды.

Улар, бүлмәгә ингәс, тағы ла нығыраҡ шауларға тотондолар. Тугушов үҙенең карауатында Ғәлләмов менән һөйләшеп ултырған Нәғимовҡа бәйләнә башланы.

— Ну, ни хәл һин, литун, орлоҡ таҙартырға һине ебәрәләрме, юҡмы?

Нәғимов был һүҙҙең бәйләнеү юлы менән әйтелгәнен аңламайынса:

— Юҡ, мине яҙмағандар. Мастерскойҙа ҡалам...— тине. Тугушов шарҡылдап көлдө.

— Ә... аңлашылды, ебәрмәҫтәр шул. Һинең кеүек ялағайҙар ауыр эштән ҡотола бит ул. Һиңә ҡағылалармы ни... Һин бит директорҙың табанын ялайһың.

— Әйҙә, Тугуш, эсәбеҙ. Кем беҙҙең менән эсә, егеттәр!.. Их, барыбер баш китә...

Тугушов Сафиндың ҡабырғаһына төрттө:

— Әй, һин аҡрыныраҡ, милицияға барып ҡабырғамы?

— Ни чирта! Миң ҡурҡмайым. Пусть начальник үҙе килһен...

— Егеттәр, эскәнһегеҙ — эскәнһегеҙ, ятырға ла йоҡларға кәрәк ине... Күрше бүлмәләр ишетеүе бар,— тине Ғәлләмов. Тугушов уға бәйләнә башланы:

— Әй, ударник, һин беҙҙе өйрәтмә әле... Медаль алырмын тип беләһеңме әллә?

Бәләкәй өҫтәл эргәһендә китап уҡып ултырған писарь Гришка башын китап өҫтөнән күтәрҙе лә ҡоро ғына тауыш менән:

— Етер булмаһа, иптәштәр, был бит йүләрлек...— тине. Ләкин иҫеректәр уға ла насар һүҙҙәр ырғыттылар. Ишектән Апуш килеп инде. Тугушов, уны күргәс тә, ҡысҡырып ебәрҙе:

— Әйҙә, Апуш дуҫ, әйҙә беҙҙең менән. Ҡайғыңды йыу әле булмаһа...

Апуш, ғәҙәттә, совхоздағы төрлө эске ултырыштарына ҡатнашмаһа ла, һуңғы ваҡытта, ысынлап та үҙгәреп китте. Үҙен иркенерәк, бер кемдән дә ҡурҡмаған кеүек итеберәк тота башланы. Тугушовтың саҡырыуына ул ҡаршы килмәне. Улар һалып биргән араҡыны тотоштан эсеп ебәрҙе лә йөҙөн йыйырып:

— Барыбер  пропадать!..— тине.

Сафин орлоҡ таҙартырға барыу тураһында һүҙ асты:

— Кем дә кем, иртәгә икенсе участкаға бара — минең менән дуҫ түгел... Мин бармайым. Кем минең менән ярышҡа сыға?

— Ну их к чертям,— тине Апуш. — Мине яҙмағандар. Яҙһалар мин дә бармаған булыр инем... Тугушов уның арҡаһынан һөйҙө лә:

— Дөрөҫ, дуҫ, мин дә бармайым. Беҙ Сафин менән бармайбыҙ. Быйма юҡ тип әйтәбеҙ ҙә — шабаш...

Һүҙгә Нәғимов ҡушылды:

— Бармаһаң — ашарға алмайһың, шуның менән бөттө. Минеңсә, эшкә сыҡмай үҙеңә лә, кешегә лә файҙа итеп булмай. Аңһыҙлыҡ була ул, минеңсә, иптәштәр...

— Нәмә, әллә беҙҙе агитировать итергә ялланылармы һине. Шаярма. Ҡарт әсәңде ҡайтып өйрәт, яраймы.

Талаш ҡыҙғандан ҡыҙҙы. Күрше бүлмәнән дә ишетеп инә башланылар. Тугушов менән Сафин, һуғышырға ҡыҙыша башлап, Нәғимовтың өҫтөнә ташланғанда, ишектән Рубенко килеп инде. Ишектә

унын ҙур кәүҙәһен күргәс, Тугушов Нәғимовҡа һуғырға тип күтәргән ҡулын кире төшөрҙө. Ләкин Сафин һаман да тынысланмай Нәғимов өҫтөнә бара ине:

— Мин һинең ҡабырғаларыңдың береһен дә ҡалдырмам!..

Рубенко йыйылғандарҙың уртаһына инеп баҫты ла:

— Нәмә бүләһегеҙ, иптәштәр, был ниндәй тауыш?— тине.

Сафин бер ҙә ҡурҡмаған кеүек уға ташланды.

— Ә һиңә, хохол, нәмә кәрәк? Һинең ни эшең бар беҙҙә? Һин орлоҡ таҙартырға бармайһыңдыр бит?

— Әгәр ҙә ҡушалар икән, ниңә бармай? Унан да арыраҡ барырға була. Эш нәмәлә?

— Ә шулаймы? Беҙ һинең ялағайлығыңды күптән беләбеҙ, һин ахыры директор булырға уйлайһыңдыр... Имеш, партиест...

— Партиест шул, эш нәмәлә? Ә һеҙ бузить итмәгеҙ, аңлайһығыҙмы?

— Ҡурҡытмаҡсы булаһыңмы? Һеҙҙән ҡурҡа торғандар әле тыумағандар, ти...

— Ә һеҙ орлоҡ таҙартыуға ҡаршы агитация таратмағыҙ, кулак һүҙен һөйләп йөрөйһөгөҙ!

— Кем кулак? Минме? Беҙме?

— Үҙегеҙҙе белмәйем, һүҙегеҙ кулак һүҙе!

Сафин ҡапыл ғына Рубенкоға ташланды. Ләкин Рубенко уны бер ҡулы менән генә еңелсә төртөп ебәрҙе. Сафин Тугушовҡа барып бәрелде, улар инде Тугушов менән икәүләп Рубенкоға ҡаршы атланылар. Рубенко, эштең ҡыҙып барғанын күреп, Нәғимовҡа ҡараны һәм:

— Ҡайҙа, Нәғимов, ҡайыш бир, таҫтамалдарҙы ла алып кил,— тине.

Был һүҙҙе ишеткәс, тегеләр тағы ла нығыраҡ шауларға тотондолар. Тиҙ генә Рубенкоға алмашлап һуғып та алдылар. Араға Ғәлләмов менән слесарь Гришка килеп инде. Иҫеректәр ҡысҡыра башланылар.

— Беҙҙе үлтерергә итәһегеҙме ни?

— Тереләй бирелмәбеҙ...

Ләкин Рубенко менән Нәғимов, уларҙың ҡулдарын артҡа бәйләп, карауаттарына ташланылар...

Сафин менән Тугушов бер аҙ ҡысҡырып, һүгенеп яттылар ҙа, хырылдап йоҡоға киттеләр, йоҡлағас та, уларҙың ҡулдарын сисеп ташланылар. Бүлмә тынды.

Сафиндың ҡатыны тиҙ генә ире янына ятманы. Карауат ситенә ултырып ул тауыш-тынһыҙ ғына илап алды һәм үҙҙәренең эргәһендәге өҫтәлдә быҫҡып ҡына янып, ҡором сығарып ултырған лампаға ҡарап уйға ҡалды.

Одеял аҫтынан бер генә күҙе менән ҡарап ятҡан Нәғимов та оҙаҡ ҡына ваҡыт йоҡлай алмай ятты. Иҫерек ире эргәһендә илап, тауыш-тынһыҙ ғына ҡайғырып ултырған Нәғимә уға ҡыҙғаныс, сиктән тыш ҡыҙғаныс тойолдо.

Нәғимов, оҙаҡ ҡына уйланып ятҡас, тәрән көрһөнөп, арҡаһы менән ятты һәм түшәмгә ҡараны.

Казарма күптән түгел генә эшләнеп бөтөп, эшселәр тора башлағанға әле аҙ ғына ваҡыт булыуына ҡарамаҫтан, торбаһыҙ бәләкәй «коптилка»ларҙан сыҡҡан төтөнгә түшәм ҡарайып бөткән. Мөйөштәрҙә, түшәм аҫтарында инде үрмәкес тә оялап өлгөргән. Бүлмә төтөн менән тулған: «балта аҫып ҡуйырлыҡ», йоҡлап ятҡан эшселәрҙең мендәрҙәре, кейемдәре ҡап-ҡара, кешеләр үҙҙәре лә ҡаралар, һәм ошо бысраҡ, күңелһеҙ бүлмәлә бәләкәй «коптилка» эргәһендә илап ултырған ябыҡ ҡына, йәш ҡатын...

Күңелһеҙ, шундай эс бошорғос күңелһеҙ!..

Нәғимов кистән Ғәлләмов менән һөйләшеп үткән һүҙҙәрҙе хәтерләне.

— Яңы мастерскойға сығып эшләй башлау менән, бригада төҙөп, шул уҡ бригада менән казармала бергә торорға, таҙа тоторға кәрәк,— тип һөйләштеләр улар.

Улар бригадаһына Рубенко менән тағы ла бер башҡорт тракторисы инмәксе булдылар... «Ғәлиә лә булһын ине шунда... Тракторист түгел шул

ул...» тип уйланы Нәғимов. Унының уйҙары Ғәлиәнән, плотниктарҙан Апушҡа, унының ҡатыны Саниәгә күсте. «Саниәне лә үҙебеҙҙең бригадаға алырға ине. Һөйләшеп ҡарарға кәрәк.. » Нәғимов шундай уйҙар менән йоҡоға китте.

Иртән иртүк, әле таң беленмәҫ борон, икенсе участкаға орлоҡ таҙартырға барыусыларҙың бригадиры барырға яҙылған эшселәрҙе уята башланы.

— Әй, тороғоҙ, иптәштәр, китергә  ваҡыт...

Унының тауышына бөтә бүлмә уянды. Сафин да мығырҙанып урынынан ҡуҙғалды. Күҙҙәрен тырнап, карауаттан аяҡтарын һалындырҙы.

— Әле таң атмаған бит, иртә түгелме ни?— тип һораны һәм бригадирҙың яуабын көтмәйенсә үк Нәғимәне уятып:

— Минең сылғауҙар  ҡайҙа  икән?..— тип  һораны. Сафин менән Тугушов йоҡонан уянғас, иптәштәренең уларҙың кисәге ҡысҡырыштары тураһында  шаярып әйткән һүҙҙәренә һис бер иғтибар итмәй, кейенделәр ҙә бүлмәнән сыҡтылар. Нәғимә Сафинға ҡарап:

— Йылы күлдәгеңде лә кеймәнең, һалҡын булыр әле,— тине, Сафинды оҙата сыҡты.

Нәғимов  та  уянғайны.

Орлоҡ таҙартырға бармау тураһында кистән ҙур скандал күтәргән Сафин менән Тугушовтың хәҙер һис һүҙһеҙ эшкә сығып китеүҙәре, шаярған иптәштәренә ҡаршы асыулы яуап бирмәүҙәре Нәғимовтың күңелендә уларға асыулы уйҙарҙы тамам юҡҡа сығарҙы.

— «Их, иптәштәр ..» тип уйланы Нәғимов һәм одеялды башынан уҡ ябынды...

— Өҙөклөктө бөтөрөүҙә иң көслө ҡорал, иптәштәр,— ударсылыҡ, ярыш. Минеңсә, Рубенко иптәш эшселәр араһында үҙен яҡшы таныткан партиест. Ул мастерскойҙа беренсе удар бригаданы ойошторop ебәрергә тейеш.

Билдәле, минең приказдар менән генә эште бөтөрөп булмай. Массовый эште күтәрергә кәрәк. Айырым эштәрҙә булған энтузиазмды ойошторорға, бергә уҡмаштырып, бер юлдан ебәрергә кәрәк...

Партия ойошмаһы бюроһының актив менән берлектә үткәрелгән йыйылышында шулай тине директор Моратов.

Йыйылыш сиктән тыш етди һәм ҡатнашыусыларҙың уйҙарын ныҡлап бер пунктҡа ҡаратып бара торған йыйылыш ине. Ул пункт — өҙөклөк. Йыйылышта ҡатнашыусыларҙың һәр береһенең уйы бары ана шул пунктҡа текәлде. Уй ғына түгел, күҙҙәр ҙә күрәләр ул өҙөклөктө. Ана партия ойошмаһы бүлмәһенең тәҙрәһе аша күренеп торған тракторҙар. Улар директор кабинетынан дә күренәләр Улар, йөҙәрләгән тракторҙар, ремонт көтәләр...

Яҙғы сәсеү планын үтәп сығыу өсөн, ана шул тракторҙар яҙ башланыуға төҙәтелеп бөтөлөргә тейештәр... Хәҙер ярты ҡыш етеп килә, ә ремонт эшенең алға киткәне юҡ...

Ирназаров һүҙ алды. Ул директорҙың удар бригадалар тураһындағы фекере дөрөҫ икәнлеген ҡабатланы ла Тулумбиковҡа ғына ҡарап һөйләргә тотондо.

— Һин, иптәш культурник, стена газетаһын яҡшыртырға кәрәк ине. Бына мин уҙған йәй теге Себер совхозында күреп ҡайттым. Көн дә сығаралар газетаны. Кем яҡшы эшләй, кем насар эшләй — сағыштырып баралар, һүрәттәренә тиклем төшөрөп баралар. Бер слесарь уҡып тора ине, шул зарлана:

— Бына минең һүрәтте төшөрөп ҡуйғандар, ти, бер көн прогул яһағайным, бына тигән була, шайтанды, ти, оятҡа ҡалдым дабаһа... ти. Бына нәмәгә әйтәм мин быны Бик ҡыҙыҡ була ул. Халыҡ бит үҙенең газетала хурлап яҙылғанын күргеһе килмәй. Файҙалы эш ул...

Әле бына беҙ Рубенкоға ла әйттек. Тик ҡағыҙҙа ғына ҡалмаһын, егеттәр. Эшләргә кәрәк.

Сергеев мәсьәләһе лә шул йыйылышта ҡаралды.

Директор ҡыҙыбыраҡ һөйләне. Ғәҙәттә ул был тиклем ҡыҙмай торғайны.

Директорҙың ҡаш аралары нығыраҡ йыйырылдылар. Әллә шуға күрә йыйылыш тағы ла етдиләште.

— Иптәштәр, Сергеев өсөн был ҙур енәйәт. Совхоздың электр станцияһы янғанда, тынысланып, эсеп ултырыуҙы мин һис башыма һыйҙыра алмайым. Эскелек, эшкә һалҡын ҡарау — бынан да артыҡ әшәкелек булырға мөмкин түгел. Шайтанымамы ни һеҙ директор урынбаҫары булып тораһығыҙ, Сергеев? Мин ҡәтғи талап итәм: был эштәргә сик ҡуйырға кәрәк!..

Сергеевтың тауышы төшөнкө ине:

— Мин хаталарымды танийым. Ну, ауыр бит, иптәштәр. Бик ауыр саҡтар була. Эштән сығып арыйһың, рәхәтләнеп ял итеп булмай. Эштең ауырлығы кемгә йәшерен? Ирекһеҙҙән, аҙыраҡ үҙгәреш булмаҫмы икән тип, әсәһең...

Саматовтың да күҙҙәрендә асыу күренә. Тик ул ғәҙәттәге һалҡын ҡанлылығын, тыныслығын һаҡларға тырыша, һүҙҙәрен һирәк һәм асыҡ итеп һөйләй:

— Мәсьәлә асыҡ, иптәштәр.

Сергеев тарҡала башлаған... Ауырлыҡтар алдында паникаға бирелә. Был хәлдә ул большевик исемен алып йөрөргә мөмкин түгел.

Бөтә совхоз кисерә ул ауырлыҡтарҙы. Кем күрмәй ул ауырлыҡтарҙы? Беләбеҙ. Бик яҡшы аңлайбыҙ. Большевиктың иң характерлы урыны ла шунда: ауырлыҡтарҙы ныҡлап, асыҡ итеп иҫәпкә алырға ла улар алдында паникаға бирелмәйенсә, сығыу юлдарын табырға, сығырға кәрәк Беҙ ул ауырлыҡтарҙы еңәсәкбеҙ. Ә һин бына ышанмай башлағанһың. Минеңсә, шулай, һиңә икенең береһе, йәки ныҡлап эшкә тотонаһың, бөтә коллектив менән бергә шул ауырлыҡтарҙы еңеү өсөн бөтә көсөңдө һалаһың. Йәки партия сафтарын ҡалдыраһың. Ике генә юл. Ә хәҙер, иптәштәр, минеңсә, хәҙергә Сергеевҡа, ҡаты шелтә биреп, алдан әйтеп ҡуйырға кәрәк: тағы ла

бәләкәй генә булһа ла бер паникаға бирелеү күрһәтһә — һис кисекмәйенсә уны беҙ партиянан сығарасаҡбыҙ.

Сергеев совет мәктәбендә уҡыған кеше. Мин уны аҡылға килер тип уйлайым. Шулай итеп, мәсьәләне асыҡтан-асыҡ ҡуйырға кәрәк...

Йыйылыш бер тауыштан был тәҡдимде яҡлап ҡул күтәрҙе.

Йыйылыштан сығыусыларҙың һәр береһе үҙенең өҫтөндә ҙур яуаплылыҡ, ҙур эш торғанлыҡ, ул ҙур эште үтәргә кәрәклек тураһында уйлап сыҡты.

Был йыйылыш совхозда быға тиклем булып килгән йыйылыштарҙан башҡасараҡ булды.

Берҙән, һәр ваҡыттағы кеүек столовойҙа түгел, ә клубта йыйылды был йыйылыш. Оҙонса ғына өйҙөң түшәмендә бер нисә урында электрик лампалары теҙелеп яналар. Бер башта сәхнә (бәләкәйерәк булһа ла сәхнә). Ике урында мейес.

Уҡытыусы Тулумбиков күп кенә сапты был клуб өсөн. Иң элек ошо өйҙә урынлашҡан бер нисә учреждение (шул иҫәптән рабочком да) башҡа урынға күстеләр. Тулумбиков үҙ инициативаһы менән плотниктар, мейес сығарыусылар тапты. Тәҙрәләрҙе ҡатланы. Коммунист уҡытыусы Тулумбиков был клубты эшләтеүҙә бөтә көсөн һалып эшләне. Иң аҙаҡтан ул клуб эсен плакаттар, лозунгылар менән биҙәне.

Ә хәҙер был өй клуб төҫөнә ингән. Эшселәр йыйылышҡа килгәндәр.

Тулумбиков та шунда. Ул клуб өлгөрөү шатлығын эсенә йәшерә алмай йылмайып йөрөй, һәр бер эшсенең йөҙөнә һынап ҡараған кеүек ҡарай.

«Клуб тураһында ниндәй фекерҙәһең, иптәш?» — тип һораған кеүек ҡарайҙар уның күҙҙәре.

Икенсенән — бөгөн яңы мастерскойҙа беренсе көн эш башланды. Яңы мастерскойҙа ике токарный станок, верстактар, мотор урынлаштырылды. Совхоз йортонда теҙелеп торған тракторҙарҙың берҙән үк өсөһө, өс «катерпиллер», мастерскойға индерелде.

Яңы мастерскойҙың бер яғы быяла киҫәктәренән торған стена. Ҡаршы стенала ҙур быяла тәҙрәләр. Мастерской яҡты, бейек, иркен. Двигатель һәм мотор гөрөлтөһө, бер-береһенә бәрелгән тимер тауыштары, трактористарҙың һәм слесарҙарҙың хеҙмәт өҫтөндә һирәк һөйләшеү тауыштары, барыһы ла бергә ҡушылып, көслө гөрөлдәүгә әйләнәләр. Был — ысындан да завод гөрөлдәүенә оҡшай.

Быны совхоздағы һәр бер эшсе белә, һәр бер эшсе һиҙә, һәр бер эшсе өсөн был ҙур еңеү. Ана шул яңы мастерскойҙың беренсе эшләй башлаған көндө йыйылған был йыйылыш та ябай йыйылыш түгел.

Шуның өсөн бөгөнгө йыйылышта ҙур еңеү юлдары, көрәш һәм көрәшеүселәр тураһында һөйләнеләсәк. Быны ла һәр бер эшсе белеп, йәки һиҙеп тора.

Шулай булды ла.

Совхоз алдында торған бурыстар тураһында доклад менән сыҡҡан рабочком председателе Шубин ана шул турала һөйләне.

— Иптәштәр, бөгөн беҙҙең мастерской эшкә башланы. Был ҙур байрам, иптәштәр, беҙҙен совхоз өсөн. Иң элек, иптәштәр, бөтә совхоз эшселәре коллективы һәм дирекция исеменән мастерскойҙы эшләп бөтөрөүҙә батырлыҡ күрһәткән плотниктарҙың удар бригадаһын бүләкләргә рөхсәт итегеҙ!..

Шубиндың был һүҙҙәренән һуң, йыйылышта алғыраҡ сафта ултырған плотниктарға ҡаранылар. Был коллектив ҡараштa иптәшлек йылмайыуы, дуҫлыҡ хисе һиҙелә ине.

— Бригаданы ойоштороусы иптәш Усманова!

Ғәлиә аяғына баҫты, йыйылышҡа ҡарап йылмайҙы. Ул туңған танауынан аҡ сепрәкте алып ташлаған. Ләкин шеше әле бөтмәгән. Әллә шунан оялып ул танауын ҡулы менән япты. Эшселәрҙең береһе:

— Оялма, Галина, ул оят түгел, молодец! — тине.

Удар бригаданы төрлө нәмәләр, промтауарҙар менән бүләкләнеләр. Усман ҡарт, үҙенең исеме сыҡҡас, аҡрын ғына урынынан тороп, йыйылышҡа ҡараны ла, йылмайып:

— Рәхмәт инде улай булғас,— тине.

Аҡһаҡ Ғалимьян, йыйылыштарҙа һөйләмәй ҡалмай торған плотник Ғалимьян, бөгөн һөйләмәне.

Тик президиумға ҡарап ҡына «рәхмәт» тип бер генә һүҙ әйтте лә тағы ултырҙы. Әллә ғүмерендә беренсе тапҡыр тырышып эшләгән өсөн бүләк алғанға күңеле йомшарҙымы, әллә Ғәлиә менән булған ваҡиғаны иҫенә төшөрөпмө, оялды — тик күтәрелеп тә ҡараманы. Йыйылыштағылар өсөн был ғәжәп тойолдо.

— Нәмә булған беҙҙең партизанға...

— Ни эшләптер күңелһеҙ күренә бит...— тиештеләр.

Улар артынан башҡалар бүләкләнделәр. Шубин докладын дауам итте:

— Мастерскойҙы удар бригада эшләп бөтөрҙө, иптәштәр. Плотниктарҙың удар эшен хәҙер беҙҙең трактористар, токарҙар, слесарҙар, тимерселәр дауам итерҙәр тип уйлайым.

Беҙҙең алда хәҙер иң ҙур бурыс тора. Ул да булһа — тракторҙарҙы һәм башҡа машиналарҙы нисек тә ҡыҙыуыраҡ темптар менән ремонттан сығарып бөтөрөү. Был — иң ҙур бурыс, иптәштәр. 30 мең гектар яҙғы сәсеү планын үҙ ваҡытында уңышлы үтәү өсөн, ремонт эштәренең ваҡытында үтәлеүе шарт. Үткән йыйылыштарҙың береһендә беҙ, промфинпланды ҡаршылау планы биреп, 30 мең гектар итеп ҡабул иттек. Уҙған йылға ҡарағанда 9 000 гектарға артыҡ. Алдағы бурыстар ҙур, иптәштәр, һәр бер эшсе бының өсөн көрәшергә, литундарға, рвачтарға ҡаты отпор бирергә тейеш. Ана шул бурыстарҙы үтәп сығыу, еңеү өсөн бөтә эшселәр биш йыллыҡтың аҙағына тиклем совхозда ҡалып эшләргә, шуға үҙенең теләген белдерергә тейеш...

Шубин һүҙен бөтөрҙө.

Һөйләүҙәрҙә тимерсе Иванов һүҙ алды. Ул һүҙен шулай башланы:

— Әлбиттә, иптәштәр, мастерской булды булыуын. Ләкин эш уның менән генә бөтмәй әле, мин ҡыҙыл партизан булараҡ, ошо совхозға бөтә көсөмдө һалып эшләйем. Ана Шубин үҙе лә әйтһен эшләгәнде...

Йыйылыштағылар араһынан кемдер:

— Беләбеҙ, әйҙә эш тураһында һөйлә,— тип ҡысҡырҙы.

— Теймәгеҙ, ҡамасауламағыҙ әле, һөйләргә ирек биреГеҙ кешегә ..

— Кәрәктәрен бирә инде ул,— тип әйтештеләр икенселәре.

Оҙонса ябыҡ йөҙлө, оҙон ерән мыйыҡлы тимерсе Иванов ҡарайып, кәкерәйеп бөткән бармаҡтарын бөкләп совхоздағы етешһеҙлектәрҙе һанарға тотондо.

— Бына, иптәштәр, Шубин бар тракторҙарға, машиналарға ремонт яһарға кәрәк, тине. Ошо ремонт эштәрен яҡшы, ударный итеп бөтә машиналарҙы яҙғы сәсеүгә әҙерләп ҡуйһаҡ ҡына, киләһе кампания уңышлы үтер, тине. Был дөрөҫ, әлбиттә, һөйләүе еңел дә ул. Тағы ла имеш биш йыллыҡтың аҙағына тиклем совхозда ҡалырға кәрәк, имеш литундар менән көрәшергә кәрәк. Был да дөрөҫ.

Ну алып ҡарағыҙ инде, эшсене бер ҙә ҡарамағас, нисек ремонт эшләйһең, нисек тағы ла ике йыл был хәлгә түҙмәк кәрәк. Былай булғанда, һис тора алырлыҡ түгел. Берҙе түгел, ҡырҡ подпись алһағыҙ ҙа, былай булғанда, мин совхозда ҡала алмайым. Ашау тип әйтһәң — ашау насар, утын юҡ, һыу юҡ Эт кеүек, эттән дә насарыраҡ йәшәйбеҙ бит. Дөрөҫ бит, егеттәр?!

Йыйылышта шау-шыу, уның яҡлы һәм уға ҡаршы булыусылар араһында тартыш китте.

— Дөрөҫ!..

— Давай элек яҡшы ашатығыҙ, тауар килтерегеҙ — унан күрербеҙ!..

— Дөрөҫ түгел!..

— Кулак һүҙен һөйләй!..

— Долой!..

— Дөрөҫ әйтмәйһең!..

Иванов артынан Апуш һүҙ алды. Ҡайһы берәүҙәр, ул ҡуҙғала башлағас, мыҫҡыллап көлөргә тотондолар:

— Егет ҡайғыһын таратырға уйлай ахыры!..

— Аҡҡошо осҡан бит — күл яңғыҙ ҡалған!.. Апуш ватып-ҡырып башта русса башланы ла, аҙ тына һөйләгәс тә, үҙенсә алып китте.

— Хотя мин комсомол. Хотя беҙҙең комсомолецтар хәл иттеләр ҡалырға, шулай ҙа мин бында ла әйтәм: бер нәмәгә лә ярамай. Ашау насар, кейем бирелмәй. Бына мин транспортта хәҙер. Ҡайҙа толоп, ҡайҙа быйма? Береһе лә юҡ. Ана йәй буйы мин ударник булып эшләнем дә — беҙгә барыбер премия бирмәнеләр. Беҙҙең тракторисҡа бында ҡәҙер юҡ. Начальствоға ялағайланып йөрөгән кешеләр алалар. Улар ҡалһындар биш йыллыҡҡа...

Йыйылыштың башында ғына әле бүләкләнгән аҡһаҡ Ғалимьян түҙмәне, һикереп торҙо ла:

— Әй һин, бузатёр, беҙ начальствоға ялағайланғанмы? Минме? Һаҡланып һөйлә, ҡыҙҙырма ҡанды! — тип ҡысҡырҙы.

Апуш ҡапыл тынды, һүҙен дауам итмәне. Ҡулын һелтәп урынына ултырҙы.

Йыйылышта тауыш көсәйгәндән көсәйҙе.

Ябай ғына бишмәт һәм ауыл бүрке кейгән, ҡара мыйыҡлы, түңәрәк йөҙлө, асыҡ күҙле Ишмурзин, һүҙ һорап тормайынса уҡ, әсе тауыш менән ҡапыл ҡысҡырып ебәрҙе:

— Алдай ул, оятһыҙ, ударник тигән була. Ҡағыҙҙа ғына кем дә ударник була ул. Саниә ана ударник булып эшләп йөрөнө. Тәүҙә һин аҙҙырҙың бит уны ла... Ярай ташлап ҡасҡан әле үҙеңде... Уттай эш өҫтөндә бит яҙ көнө тракторҙарҙы ташлап ауылға йыйынға барҙығыҙ. Саниә һинең һүҙеңә ҡарап ҡына китте лә, ана выговор алдығыҙ шул саҡта. Етмәһә, һөйләп торған булаһың... Оят булмаһа, булмай икән кешелә, ағай...

Ишмурзиндың сығышы йыйылышты күңелләндереп ебәрҙе. Тағы тауыш китте. Ишмурзин һаман да ҡысҡырыуында дауам итә ине.

— Йүнле булһаң, ике бисә менән тормаҫ инең— ҡомһоҙ һин .

Ләкин йыйылыш шаулауында дауам итте. Председатель йыш-йыш колокол шылтыратырға тотондо.

Һүҙ Рубенкоға күсте.

Рубенко — трактористар араһында иң уңған егеттәрҙең береһе. Инструкторҙар һәм уның менән бергә эшләгән трактористар Рубенко эше, машинаһы тураһында һоҡланып һөйләйҙәр.

— Ну үгеҙ кеүек эшләй ҙә инде...

— Нисек өлгөрә бит әле… машинаһы бит уның ялт иткән таҙа була...

Ҡайһы берәүҙәр көнләшеүҙәнме, нәмәнәндер, уның тураһында асыу менән бер-ике һүҙ әйтеп ҡуялар:

— Беләбеҙ беҙ уны, начальствоға ярарға тырыша. Ударник имеш...

Ләкин нисек кенә булмаһын, трактористарҙың күпселеге уны ярата. Уның һүҙе үтемле була.

Әле лә Рубенконы халыҡ йотолоп тыңланы.

— Тормош ауыр, әлбиттә, һүҙ ҙә юҡ. Столовойҙы ошо көнгә тиклем рәткә һалып бөтөргән юҡ. Һыу етешмәй, дөрөҫ. Быларҙы бөтөрөргә кәрәк. Ә һуң нисек бөтөрөргә? Бузить итеп, Аптулка кеүек ҡыланып бөтөрөп булмаҫ. Үҙебеҙгә тотонорға кәрәк. Мунса ана эшләнеп бөтә. Шәп буласаҡ ул. Иванов, партизан булһа ла, беҙгә ҡаршы һөйләй. Улай булмай ул. Ауырлыҡтар, етешһеҙлектәр тураһында лығырҙап ваҡыт үткәргәнсе — эшләргә кәрәк. Биш йыллыҡтың аҙағына тиклем ҡалыу тураһында мин «за» ҡул күтәрәм. Ҡалабыҙ ҙа совхоздың эштәрен юлға һалабыҙ. Беҙ дүрт кеше, электростанцияны яндырған ҡоротҡостарға яуап итеп, производствола ла, казармала ла бергә эшләү, һәйбәт итеп, таҙа итеп бергә дуҫтарса торорға бригада төҙөнөк. Бөтә эшселәрҙе ярышҡа саҡырабыҙ... Иванов, оят һиңә шулай әйтергә!.. Минең һүҙ бөттө...

Тағы күптәр һөйләне.

Бөтә эшселәрҙең биш йыллыҡтың аҙағына тиклем совхозда ҡалыуҙары тураһындағы ҡарар бер тауыштан үтте. Хатта тимерсе Иванов менән Апуш та мәсьәләне тауышҡа ҡуйғанда ҡаршы ҡул күтәрмәнеләр.

Тик Апуш үҙ фекеренән ҡайтманы.

Клубтың бер мөйөшөндә комсомол ячейкаһының бюро ағзалары Апушты тирәләп алғандар. Секретарь Кудрәй уны әрләй:

— Нәмә һин, комсомолда бит хәл иткәйнек инде.

Апуш бер ҡулы менән биленә таянған да тәмәке тарта.

— Унда комсомол, бында союз. Унда ла әйттем мин. Какой чорт һеҙ минең ауыҙҙы бикләргә маташаһығыҙ... Кудрәй ҡыҙғандан ҡыҙа бара.

— Их, ахмаҡ һин, егет. Йыйылышта үткәргәнбеҙ икән — шабаш, һин буйһонорға тейешһең, балда.

Апуш ласт иттереп тәмәке төпсөгөн төкөрөп ташланы ла ишеккә боролдо.

— Әй, һеҙҙе, комсомол тип мин эттән дә хуже йәшәйемме, һеҙ самокритиканы ҡыҫырға уйлайһығыҙ. Шалишь брат, һәр кемдең үҙ интересы ла бар.

Шулай тине Апуш һәм клуб ишеген шап иттереп ябып сығып китте.

Васька Кудрәй «сара күрмәй булмай» тип мығырҙанды.

Төн һалҡын, аяҙ ине.

Асыҡ зәңгәр күк буйлап йөрөгән тулған ай ҡар япмаһы ябынған киң далаларға зәңгәр нурҙар һибә. Ә совхоз уттары, айҙан ҡалышмаҫҡа тырышҡан кеүек, тирә-яҡҡа ҡыҙыл, зәңгәр нурҙар сәсеп яналар.

Йөҙәрләгән эшселәр, шаулашып, йыйылыштан таралалар. Әллә ҡайһы яҡтан «катерпиллер» гөрөлдәүе ишетелә.

Апуш бер яңғыҙы аҡрын ғына казармаға ҡарай атлай .

«Иртәгә өсөнсө участкаға барырғалыр инде... Ауылға тейеп сығырға кәрәк, булмаһа. Ун биш саҡрымға урау була булыуын да — сәнселеп китһен. Шул ауылдан килгән хат ҡына харап итте. Миңә килгән хатты

Саниәгә биргәндәр. Сволочь, халыҡ. Әллә бөтөнләйгә ҡайтырға инде ауылға...»— Шулай уйлай Апуш.

Ул казармаға шундай уйҙар менән ҡайтты.

Ишек төбөндәге өҫтәлдә аҙ ғына яҡты биреп янып торған «ярғанат» фонары яҡтыһында ул әлеге Саниә ҡулына төшкән хатты яңынан уҡып сыҡты. Унда былай яҙылғайны:

«Ҡәҙерле улыбыҙ Абдуллаға атайыңдан, әсәйеңдән, йәнә лә ҡатыныӊ Мәйсәрәнән күп сәләм, йәнә лә шуны әйтәбеҙ, улым, Мәйсәрә килен бик ҡайғыра, бик илай, бабаңдар ҙа килеп тиргәшәләр. Унда барып тағы өйләнгәнһең, тип ишетәбеҙ, ысынмы, бушмы? Ысын булһа, риза, бәхил түгелбеҙ. Ҡараныҡ, үҫтерҙек, ас-яланғас итмәнек... ғәфү итмәйәсәкбеҙ...»

Хатты уҡып сыҡҡас, Апуш оҙаҡ уйҙа ҡалды.

Саниә бөгөн иртән, столовойҙа осраған ерҙә генә бирҙе уға был хатты. Күп һөйләшеп торманылар.

— Сволочь, һин... Ниңә башта уҡ әйтмәнең? Йүнле кешегә һанап торҙом бит мин һине. Яратҡан булдым шул... Комсомолец булып йөрөгән булаһың тағы...

Тфү!

Саниә, Апуштың яуап биргәнен көтмәйенсә үк, столовойҙан сығып китте.

Апуштың Саниәне ҡыуып еткеһе, нисек булһа ла үҙен яҡлап нәмә булһа ла әйткеһе килде. Ләкин нәмә әйтәсәген ул үҙе лә белмәй ине. Баҫҡан урынында ҡатты ла ҡалды. Шулай итеп Саниә уны ташланы...

Апуш хатты ҡулынан ҡуймай, сисенмәгән көйгә, күп кенә ваҡыт постелдә уйланып ятты. Ләкин ул ҡорт күсе кеүек баш тирәләй әйләнгән тәртипһеҙ, буталсыҡ уйҙарҙың осона сыға алманы.

Үҙенең киләсәге, иртәнге көнө тураһында ниндәй ҙә һөҙөмтәгә килә алмай шул ятҡан көйгә тынысһыҙ йоҡоға талды.

Иртә менән уны өсөнсө участкаға йәйҙән ҡалған арбаларҙы алып ҡайтырға ебәрҙеләр...

Далала буран ҡотора.

Ҡыш елдәре бер урынға йыйылған көрттәрҙе икенсе урынға күсерәләр, һипкеләйҙәр, үҙҙәре ниндәйерәк тауыштар сығарып олойҙар. «Яйыҡ» далаларында ҡоторған буран эсендә трактор аҙашып йөрөй...

Ул бер аҙ ваҡыт тура ғына килә лә, ҡапыл йә уңға, йә һулға боролоп китә.

Мотор һаман да эшләй...

Корпустың алдында ҙур фонарь яна. Двигателдең тигеҙ генә көслө тауыш менән гөрөлдәүе бурандар тауышына ҡушыла.

Ҙур «катерпиллер» тракторы дала буйлап аҙашып йөрөй. Әле был яҡҡа, әле теге яҡҡа борола — сөнки уның тракторисы юҡ...

Их, «катерпиллер», рулеңдә кем йөрөнө һинең? Кем ине һинең тракторисың? Ни эшләгән ул бөгөн? Әгәр бына хәҙер берәр тракторист килеп сыҡһа, ҡыҙғаныр ине ул аҙашып йөрөгән «катер»ҙы, ниндәй көслө тибә уның йөрәге! Нисек көслө итеп гөрөлдәй! Бер кем дә күрмәйме һуң буранда аҙашып йөрөгән тракторҙы?

Төн буйы йөрөгәндән һуң ғына «катерпиллер» Яйыҡ йылғаһы буйындағы туғайҙарҙа тәрән генә бер соҡорға барып төштө лә шунан сыға алманы. Моторҙың туҡылдауы аҡрынлап һирәгәйҙе лә «бух», «бух» итеп төкөрөндө — унан тынды.

Ауылынан иҫереп сығып, юлда тракторҙан төшөп ҡалған Апушты бары тик далалағы ҡышҡы елдәр генә күрҙеләр...

Апуштың тыуған ауылындағы комсомолдарҙың бер нисәһе йыйылып совхоз комсомолына шундай хат яҙҙылар:

««Урал» совхозы комсомол ячейкаһына.

Тракторист, беҙҙең ауылдың Аптулла Хәйруллин... ғинуарҙа төндә, тракторы менән ауылға ҡайтып, эсеп йөрөнө. Төн буйына бабаһы өйөндә, бабаһы кулак Хәйруллинда, эсеп ултырғанда лаяҡыл иҫерек, үҙе комсомол билетын сығарып маһая: Мин бөтә ауылығыҙҙы раскулачить итермен, ти. Тракторы урамда ҡунды, иртә менән дә тракторын көскә генә ебәрҙе, иртә

менән дә аяғына саҡ-саҡ баҫып торҙо, юлға ла запас араҡы алған — кеҫәһендә күрҙек. «Бына был эшсе комсомолец нисек йөрөй» тип ҡалдылар ауыл кешеләре...»

«Октябрь» колхозы ВЛКСМ ячейкаһы комсомолецтары.

Икенсе көндө яланда буран тынғайны инде.

Ҡуянға сыҡҡан ике крәҫтиән Яйыҡ буйында көрткә күмелеп ятҡан бер трактор күреүҙәре тураһында килеп әйттеләр.

Радиаторҙағы һыу туңып киңәйгәнлектән, тракторҙың радиаторы һәм моторы шартлағайны. Ғәрипләнгән «катерпиллер»ҙы икенсе тракторға тағып алып ҡайттылар.

Ә тракторист Апушты күреүсе лә, ишетеүсе лә булманы...

Тулумбиков, собраниенан һуң, Нәғимов Ғәлләмовты үҙе торған казармаға саҡырҙы.

— Стена газетаһы сығарыу тураһында һөйләшербеҙ. Һеҙ бит өсөнсө сменала эшләйһегеҙ? — тине ул.

Тулумбиков Нәғимовтар казармаһы менән рәттән дүртенсе казармалағы бәләкәйерәк бүлмәлә слесарь менән тора ине. Нәғимов, «Урал» совхозына килгәндән бирле, күп кенә казармаларҙа, өйҙәрҙә булһа ла, бындағы кеүек йыйнаҡлыҡ, таҙалыҡты күргәне юҡ ине. Бүлмә, башҡа казармалағы кеүек үк, ябай бер бүлмә ине. Ләкин бында башҡа казармаларҙағы кеүек түшәм ҡарайып, үрмәкес оялап бөтмәгән, тәҙрә быялаларында саң юҡ, иҙәндең яңы таҡталары таҙартылған, матур, һарғайып тора. Бүлмәләге өс тимер карауат өҫтөндә мендәр, одеялдар яҡшы итеп йәйелеп ҡуйылған. Ике өҫтәлдең береһе тәҙрә эргәһендә, икенсеһе ишек төбөндәрәк. Тәҙрә эргәһендәге өҫтәл өҫтөндә китаптар, яҙыу приборҙары теҙелгән. Ә ишек төбөндә генә ялтырап таҙартылған примус, таҙа фарфор сәйнүк, стакандар тора.

Ҡыҫҡаһы, бүлмәлә тулы тәртип һәм таҙалыҡ хөкөм һөрә.

Нәғимов, бүлмәгә ингәс тә, ғәжәпләнгән кеүек бер аҙ ваҡыт тирә-яғына ҡаранып торҙо.

— Әйҙәгеҙ, егеттәр,— тине Тулумбиков. — Өҫөбөҙгә өс ултырғыс, ултырышығыҙ...

Тулумбиков, Нәғимовтың уйҙарын һиҙенгән кеүек, үҙҙәренең тормошо тураһында аңлатып ҡуйҙы:

— Минең менән торған ике слесарь иптәш менән беҙ бик рәхәт йәшәйбеҙ. Улар яҡшы уҡ ҡына грамотный кешеләр. Хәҙер әле улар эштәләр. Хәйер, һеҙ уларҙы үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ бит. Береһе рус Тимофеев, икенсеһе Украина кешеһе Давиденко...

— Беҙгә лә бына шулай торорға кәрәк,— тине Нәғимов Ғәлләмовҡа ҡарап.

— Да, былай күңелле була инде ул, әй. Ну торабыҙ ҙа һуң беҙ хәҙер. Безобразие. Беҙҙең тормоштоң насарлығы күп ваҡыт бит үҙебеҙҙән килә...

Һүҙ бүлмә, тормош, эш мәсьәләләренән стена газетаһына күсте.

— Стена газетаһы тураһында мин Саматов менән ныҡлап һөйләштем, — тине Тулумбиков,— ул миңә редколлегияны тупларға ҡушҡайны, һеҙҙең кандидатураларҙы күрһәткәс, һис һүҙһеҙ, риза булдым, һиңә, Нәғимов, шуны әйтергә кәрәк, Саматов һинең турала бик яҡшы фекерҙә, «рәтле егет күренә, арты насар булмаһа, партияға йәлеп итергә кәрәк» ти... Мин быны просто һиңә иҫкә алыу өсөн әйтәм...

— Мин бик шат уға, ләкин артымда коммунист кешегә ярамаҫлыҡ ҙур насарлыҡтар булмаһа ла, бер аҙ бар шул...

Шул һүҙҙәрҙән һуң. Нәғимов кеҫәһенән тәмәке янсығын сығарып Ғәлләмов менән улар тәмәке төрә башланылар. Тулумбиков тәҙрәләге форточканы барып асты.

— Әллә бында тартырға ярамаймы? — тине Ғәлләмәв.

— Зарар юҡ, Давиденко менән беҙ тартмайбыҙ. Ә Тимофеев, ғәҙәттә, коридорға сығып тарта, һеҙ бит ҡунаҡ кешеләр, зарар юҡ. Әйҙә һөйлә әле, Нәғимов, мин шундай күргән, белгәндәр тураһында һөйләшергә яратам ..

— Теге «Октябрь» совхозындағы хәлдәрҙе һөйләп ебәр әле булмаһа, — тине Ғәлләмов,— бер көн башлағайның. Тугушовтар инеп бүлделәр...

— Саматовтың минең турала шундай һүҙен ишеткәс, пожалуй, һөйләмәй ҙә ярамай. Тулумбиков бюро ағзаһы. Автобиографияға барыһын да яҙып булмай.

Мин үҙем Иҙел буйындағы “Н” ҡалаһындағы паровоз-ремонт заводында токарь булып эшләүсе эшсенең улы. Атай һаман әле шунда эшләй, ну йәштән үк мин үҙем дә унда эшләнем. Токарлыҡ эшенә яҡшы ғына өйрәнеп килә инем инде. Беренсе баҫҡыс мәктәпте бөткәс, ФЗУ-ға индем. Унда ла яҡшы уҡып алға барам. Мин бик уҡырға ярата торғайным. Әллә ни эшләп шунда төрлө китаптар уҡырға һалышып киттем бит. Беҙҙә татарса ла уҡыта торғайнылар. Күберәк шул татар теле уҡытыусыһы мине китап уҡырға өйрәтте лә инде. Ләкин һуңға таба гел генә русса уҡый башланым. Рустың хикәйәләре, романдары бик матур булалар. «Цемент» тигән китапты баш күтәрмәйенсә бирелеп уҡый торғайным.

Ну быныһы былай ғына.

Шунан һуң бик яҡшы уҡып йөрөгән ерҙән, әллә кемдәр менән аралашып, шунда эсергә өйрәндем, бит, егеттәр. Ну уның сәбәптәрен һөйләп тормайым. Бәлки, башҡа кешеләр сәбәпсе булғандарҙыр. Үҙ ғәйебеңде кешегә ауҙарып торорға ярамай. Ул тиклем кәрәкмәй ҙә. Шулай итеп эсергә өйрәнелде. Лаяҡыл килеп бер нисә тапҡыр иҫереп ҡайтҡас, атай ҙа асыуланды. Аҙаҡтан ФЗУ-нан да сығарҙылар. Комсомолда ла ҡаты шелтә бирҙеләр. Атай үҙе эсмәй ине. Мине бик ҡаты һүкте.

Йәштән үк тәртипле генә йәшәп килгәс, эшсе-коммунист балаһы ла булғас — был ударҙың бик ҡаты булыуын, бигерәк тә атай өсөн ҡыйын булыуын үҙем аңлап тора инем. Тураһын ғына әйткәндә — оялдым. Шул саҡта ғына «Октябрь» совхозына эшсе йыялар ине. Шуны ғына ишетеп ҡалдым да һыҙҙым шунда.

Ну, егеттәр, ул совхозда күргәнемде һөйләһәм, оҙаҡҡа китер. Шулай ҙа ул совхоздан үҙемдең нисек китеүемде һөйләйем...

„ЯМАН-ТАШ"  ТАУЫ БУЙЫНДА

Башҡа яңы барғандар менән бергә мин дә ҡыҫҡа ғына сроклы трактористар курсында уҡып сыҡтым да — алты кешене, шунда мине лә, совхоздың «Яман- таш» тауы буйындағы участкаһына ебәрҙеләр. Ул совхоздың ерҙәре бындағы кеүек ялан түгел. Тауҙар, урмандар, ваҡ-ваҡ йылғалар бар. Беҙҙең участканың үҙәге — хутор, «Яман-таш» тауы тигән бер тау буйында ине. Әллә ҡайҙан уҡ, алыҫтан күренеп торған тау. Тау итәгендә нарат урманы ана шул йылға буйында ғына ине. Ә ерҙәр ана шул тауҙы тирәләп алғандар.

Шулай итеп беҙ бында яҙғы сәсеүҙе яҡшы ғына үткәрҙек. Ныҡ эшләргә тура килде. Беҙҙең бригаданы маҡтап шундағы район газетаһына ла яҙҙылар. Унда беҙҙең быңдағы кеүек «катерпиллер», «клейтрак» тракторҙары юҡ ине. Күберәк «фордзон» да «джондир». Бик аҙ ғына «интернационал».

Ну ыҙалана торғайныҡ «фордишка»лар менән. Бик насар машина. Бөтөнләй бөтһөн ине ул...

Шулай. Тағы бер тартып алырға рөхсәт ит инде, әй, Тулумбиков. Шунда Валентина тигән трактористка рус ҡыҙы бар ине. Ул баштан уҡ беҙҙең бригадала эшләне, баштан уҡ беҙ уның менән дуҫ булып киттек. Сменаға бергә барабыҙ, тракторҙарҙы аллы-артлы ебәреп, бергә эшләйбеҙ. Беребеҙҙең трактор ҡомлораҡ йәки һаҙламығыраҡ урында буксовать итә башлаһа, бергәләп сығарабыҙ. Бергәләп ятып та йоҡлайбыҙ. Әллә нисек йөрөнөк инде беҙ ул ҡыҙ менән...

Беҙҙең бригадир Тарасов тигән бер рус ине. Валечкаға (мин уны шулай атай инем) уның күҙе төшөп йөрөй икән. Ә Валечка сер бирмәгән инде. Ну яратмаған, күрәһең. Тарасов, үҙен бик юғары һанап, танауын күтәреп йөрөй торғайны. Нәмәгәлер инде — әллә беҙгә ҡарағанда тракторҙы яҡшыраҡ белгәнгәме — белмәйем. Беҙҙең менән булғанда, харап уҫал ҡыланған була, бер ваҡытты яҡшылап иптәштәрсә һөйләшкәнен ишетмәҫһең. Ә инде начальство алдында ни эшләргә лә белмәй. Ауыҙын ҡыйшайтып йылмая.

Участка мөдирен, башҡа етәкселәрҙе исемдәре, аталарының исемдәре менән генә йөрөтә.

Шундай насар эштәре өсөн беҙ быны бер стена газетаһына төшөрҙөк. Шунан һуң миңә дошманлашты ла китте бит был. Валентинаны ла минән көнләп йөрөй икән. Мине икенсе бригадаға ебәртергә тырышып ҡараны — булманы.

Шунан һуң бер көндө кис шундай ваҡиға булды. Беҙ яңы ғына икенсе сменанан ҡайтҡанбыҙ. Столовойҙа ашап сыҡтыҡ та ай яҡтыһында футбол уйнап йөрөйбөҙ. Бер аҙҙан һуң кухарка Дуня миңә килде лә:

— Нәғимов, бригадир Валентинаны ҡарағайлыҡҡа ҡарай алып китте. Валечка ҡарышып ҡараһа ла, Тарасов «бик мөһим йомошом бар» тип алып китте. Берәр нәмә булмаһын...— ти. Шуны ғына ишеткәйнем торҙом да йүгерҙем. Ул арала складтарға ғына еткәйнем — Валентина тауышы килә. Тауыш килгән яҡҡа, склад артына, боролоп ҡараһам — Тарасов Валечканы ҡосаҡлаған, ә Валечка ысҡынырға теләй ҙә булдыра алмай, «хәҙер ҡысҡырам, кеше саҡырам» ти. Ялт итеп һикереп, Тарасовтың елкәһенә менеп ултырҙым да башын ҡыҫа башлайым. Валечка тороп йүгерә, беҙ икәү ҡалабыҙ.

— Бынан һуң Валентинаға яҡын килһәң, миңә үпкәләмә, мин әйтәм. Бер һүҙ әйтмәне. Только беҙ уның менән көндән-көн боҙолоша барабыҙ.

Бер нисә көндән һуң, беҙ өс трактор менән төнгө сменаға сиҙәм һөрөргә барырға йыйындыҡ. Тракторҙы, кистән үк, заправить итеп, әҙерләп ҡуйҙыҡ.

Өсөбөҙҙөң дә машиналар, йорт уртаһында теҙелеп, китергә әҙер генә торалар. Беҙ машиналарҙы бик таҙа тота торғайныҡ. Ҡатын-ҡыҙ йорт, өй эсендә генә түгел, производствола ла тәртипле була икән ул. Валентина тракторының бер генә киҫәге лә сүпләнмәй, бысранмай торғайны. Эштән туҡтау менән, ул машинаһын таҙартырға тотона. Әле был ерҙән, әле теге ерҙән һөртә. Унан күреп башҡалар ҙа машинаны таҙа йөрөтөргә өйрәнделәр.

Шулай итеп төнгө сменаға барырға әҙерләнеп торабыҙ. Ҡояш та байыны. Ҡараңғы төштө. Столовойға ашарға индек. Мин тиҙ генә ашап алдым да, артҡы тәгәрмәстең ике шпоры төшкәйне (ул саҡта беҙҙә «джондир» тракторы ине), тиҙ генә шуны ҡуя торайым тип, столовойҙан сыҡтым.

Тракторҙар торған яҡҡа ҡараһам — унда бер кеше шәүләһе күренә. Күңелгә шик төштө. «Кем йөрөй икән унда» тип уйланым. Машиналарҙың артынан, урман яғынараҡ эйелеп кенә яҡынлашып ҡараһам, кемдер, урталағы минең машина аҫтына сүгәләп, нәмәлер эшләй. Ул арала булманы, машина аҫтында шыбырҙап ергә автол аҡҡаны ишетелде. Теге кеше автолдың ағып бөткәнен көттө лә пробканы яңынан бороп ҡуйҙы. Шунан тороп ул казармаға ҡарай китте. Был бригадир Тарасов ине. Ул, минең машинаның автолын ағыҙып, подшипниктарҙы иретергә лә, мине ғәйепле яһамаҡсы булған. Шунда уҡ барып йәбешәһе, бәйләп ташлайһы килде. Ну әллә нәмә тотто инде шунда. Тиҙ генә кладовщикты табып яңынан автол алып, машинаны заправить итеп ятҡанда, иптәштәр килеп еттеләр. Улар ҙа аптырайҙар.

— Беҙ бит әле генә заправить иттек, ҡайҙа булған автолың? — тиҙәр. Кладовщик талаша. Нәмә тип әйтәһең инде уларға. Дөрөҫөн әйтер инең, свидетель юҡ — барыбер дөрөҫләп булмаҫ...

Бик асыу килде быға. Тоттом да участка мөдиренә әйттем. Ул иғтибар ҙа итмәне.

— Һеҙҙең личный асыуығыҙ ғына ул,— ти. Һиҙеп торам партияға кандидат булған Тарасов (ысындан да кандидат ине) һүҙенә ышанмай, минең һүҙгә ышанмаҫтар инде, тип уйлайым.

Унан һуң эш бик тиҙ бөттө. Асыуҙы нисек алырға белмәгән бер көндө иртәнге сменанан ҡайттыҡ та бер иптәш менән районға барып эсеп килдек. Хуторға ҡайтып етеү менән бригадирҙы осраттым. Башта уңлы-һуллы яңағына менеп төштөм, унан һуң ауыҙын бәреп ҡанаттым. Бригадир туп-тура участка мөдиренең квартираһына инеп китте.

Иртәгеһен үк мине хулиганлыҡта ғәйепләп эштән ҡыуҙылар. Шунан киткәндә, мине Валентина оҙатып ҡалды.

Беҙҙең хуторҙың станция яғы бейек кенә күтәрелә торған һырт ине. Хуторҙан сығып ярты километр киткәнсе, түбәнерәк урында, бая әйткән «Яман-таш» тауының итәгендә, ҡарағайлыҡтың йәнәшәһендә генә бер нисә өйҙән генә ғибарәт булған хутор күренә. Шул уҡ ҡарағайлыҡ буйлап борғоланып аҡҡан бәләкәй йылға ялтырап ята. «Яман-таш» тауы итәктәрендә тирә-яҡта йөҙәр гектарлаған иртә сәселгән бойҙайҙар йәшәреп күренәләр, йәйге матур көн. Ана шул тау, йылға буйҙарында трактор менән һөрөп, тырматып, сәсеп йөрөгәндәр иҫкә төштө лә, саҡ ҡына илап ебәрмәнем, егеттәр. Ауыр булды унан китеүе.

Ана шунда Валентина миңә:

— Мин дә һинең менән китер инем... Ебәрмәҫтәр. Ҡасып китер инем, уңайһыҙ. Бигерәк тә комсомол ячейкаһы алдында яйһыҙ булыр... Һин эсмә, Нәғимов, эсһәң, әрәм булырһың. Минең һүҙҙе иҫкә ал, яраймы?!

Валентинаның һуңғы һүҙе шул булды...

Һәйбәт ине ул ҡыҙ, йомшаҡ күңелле ине. Барыбер онотолор ҙа һуң, шулай ҙа хәҙергә һис хәтерҙән сыҡмай... Матурлығы тураһында әйтмәйем. Сөнки матурлыҡты һәр кем үҙенсә аңлаусан. Ләкин, минеңсә, матур ине.

Нәғимов һүҙен шулай бөтөрҙө. Тулумбиков менән Ғәлләмов һаман әле уға ҡарап торалар ине.

— Нисек инде теге бригадирға бер нәмә лә булмай ҡалды? — тине Тулумбиков.

— Һуңынан ғына, шул совхозда эшләгән бер тракторист иптәште осратып, ишеттем. Тарасов, беҙҙең ҡаланан бер спекулянт балаһы булып, совхозға ҡоҙа- ҡоҙағыйлыҡ менән килеп ингән. Ну шунан, эшсе булғас, юлын табып партияға ла үрмәләгән. Ундай элементтар бик оҫта яраҡлаша беләләр бит улар... Кем икәне беленгәс тә, ҡыуғандар, әлбиттә. Шуны ишеткәс, күңелле булып китте. Үсем алынған кеүек булды..

Совхоздың мастерскойы һәм электр станцияһы эргәһендә сыға торған стена газетаһында шулай яҙылғайны:

«Тракторҙарға ремонт яһауҙа әле өҙөклөк бөтмәгән. Бөгөнгө көндә әле «катерпиллер» тракторҙары ғына төҙәтелеп бөткән. 85 «интернационал»дан бөгөнгө көнгә ни бары 20 генә трактор ремонттан сыҡты.

Алдынғылыҡ Рубенко бригадаһынан Сухаруков бригадаһына күсте. Кисәге көндә был бригада һуңғы биш көнлөк планын 150 процентҡа үтәне. 3 «интернационал 15—30» тракторы, ҡаршылау планы буйынса, 120 сәғәттә ремонттан сығырға тейеш булһа, 100 сәғәт эсендә сыҡты. Сухаруков бригадаһына күсмә ҡыҙыл байраҡ бирелде. Башҡа бригадалар, Сухаруков бригадаһы кеүек, большевиктарса темптар менән көрәшегеҙ! Сухаруков бригадаһының ударниктары — Саниә Хәйруллина, Саламатин, Сәләмов иптәштәрҙе ҡыҙыл таҡтаға яҙабыҙ...»

Рубенко бригадаһы икенсе сменаға барҙы. Икенсе сменаның башҡа эшселәре әле килеп бөтмәгәндәр ине. Рубенконың киң, шаҙра йөҙөндә етдилек, хатта асыуланыу һиҙелә. Ғәҙәттә, иртә менән бөтә кешегә ҡарап, ҙур йылмайып иҫәпләшә торған Рубенконың бөгөн Нәғимов менән күрешкәндә әйтелгән һүҙҙәре лә ҡоро ғына булдылар.

— Ни хәл? — тине ул һәм шуның менән бөттө.

Улар, шунда уҡ инструменттарын алып, эшкә тотондолар. Яңы ғына мастерскойға индерелгән 104 номерлы «интернационал» тракторын һүтә башланылар.

Бер аҙ эшләгәндең һуңында, бер кемгә лә ҡарамай:

— Хурлыҡ, егеттәр, эшләй башлағандан бирле, артта ҡалған юҡ ине... — тине.

Ғәлләмов үҙенең һүҙен Нәғимовҡа ҡарата әйтте:

— Һин, Нәғимов, үҙең стена газетаһы яҙаһың, үҙең үҙ бригадаңды хурлайһың...

— Факт шулай булғас, бер нәмә лә эшләп булмай, егеттәр. Мин бит инде, артҡа ҡалғанды, үҙ бригадам булғаны өсөн, алда бара, тип яҙа алмайым...

Тағы Рубенко һөйләй башланы:

— Уныһы дөрөҫ. Ярар, күп тел менән бутҡа бутағансы, иптәштәр, нисек кенә булһа ла хурлыҡтан сығырға кәрәк, һин, Ғәлләмов, ошо өс көн эсендә үҙгәрҙең... Әллә эсә башланыңмы? Эшең һүлпәнләнә башланы . Ярамай, иптәштәр. Был биш көндә беҙ ике трактор сығарырға тейешбеҙ. Ҡыҙыулатырға кәрәк эште...

Шуның менән бригаданың һөйләшеүе киҫелде. Бригада, баш күтәрмәй, ҡыҙыу эшкә тотондо.

Мастерской эшселәр менән тулды. Тышта әле көн яҡтырмаған ине. Мастерской эсе ҙур электр лампаларының көслө нурҙары эсендә йөҙә. Бер яҡ ситтәрәк торған токарь станоктары ла эшкә ҡушылдылар. Мастерской эсенә биш трактор индерелгән, һәр береһе эргәһендә, ҡымырҫҡа кеүек, ремонт эшселәре ҡайнашалар. Тимергә тимер бәрелгән тауыш, моторҙың выжлап әйләнеүе, токарь станоктарында сыҡырҙап тимер киҫелеүе, силовой станциялағы двигателдең гөрөлдәүе, эшселәрҙең йыш ҡына бер-береһенә ҡарап әйтелгән һирәк һүҙҙәре — мастерской эсен өҙлөкһөҙ яңғырата. Был көслө гөрөлдәү мастерскойҙың бейек түшәменә, унан быяла стеналарға барып бәрелә лә, бик ваҡ ҡына киҫәктәргә бүленеп, таралып яңғыраған кеүек тойола.

Рубенко бригадаһындағы Ғәлләмов поршенгә яңы ҡулса кейҙереп маташа. Ҡулсаның киңлеге ярарлыҡ булһа ла — оҙонораҡ. Поршенгә кейҙерһәң, буш булып ҡала. Шуға күрә ул ҡулсаның баш-башын, напильник менән игәп, ҡыҫҡарта. Үҙе эшләй Ғәлләмов, үҙе уйлай... Саниә тураһында уйлай. Әллә нисек шул Саниә егеттең башына инеп ҡалған да һис сыҡмай. Юҡ, башҡа түгел, йөрәгенә инеп урынлашҡан ул уның...

«Шаярма, егет, һеҙҙең ир халҡының уның башта шулай теле кәнфит булыусан инде. Ә Саниә ул тиҙ генә бирелмәҫ хәҙер, һин бына һәйбәт

яратыуыңды, шаярып ҡына йөрөмәүеңде доказать ит, аҡыллым Ғәлләмов...» Саниәнең кисә генә әйтелгән был һүҙҙәре һаман да әле Ғәлләмовҡа тап Саниә тауышы менән ишетелеп торалар. Шул һүҙҙәрҙе әйткәндә, Саниәнең ярым йылмайған йөҙө, ҡыҫыла төшкән һоро күҙҙәре әле лә бында, Ғәлләмовтың алдында, тора кеүек...

Хәҙер ул күҙҙәр, ул Ғәлләмов өсөн ҡарағанда матур күренгән йөҙ — уның алдында булмаһа ла, мастерскойҙың теге башында. Сухаруков бригадаһында эшләүсе Саниә әле мотор крышкаһын алырға маташа. Ул үҙенең бөтә иғтибарын шул эшкә биргән. Ҡулдары тиҙ-тиҙ хәрәкәт итәләр. Ул аҙ ғына эйелә төшкән.

Ғәлләмов йыш ҡына шул яҡҡа күҙен ташлап ала. Үҙе напильник менән поршень ҡулсаһының баш-башын игәй.

Ғәлләмов оҙаҡ ҡына игәне. Саниә тураһындағы уйҙар оҙаҡҡа ғына һуҙылды. Ҡапыл уның хәтеренә төштө: ҡулса бит артығыраҡ игәлеп ташланырға мөмкин. Ҡулса бит поршендең киртләсенә тип-тигеҙ инеп кенә ултырырға тейеш...

Ул тикшереп ҡараны. Ысындан да бер миллиметр самаһы артыҡ игәлгән. Ҡулсаның баш-башы етмәй. Ғәлләмовтың асыуы килде. Ярамаған ҡулсаны бер тартмаға ташланы ла икенсе ҡулсаға тотондо...

Ғәлләмовтың эшенә йыш ҡына күҙ төшөрөп торған бригадир Рубенко уның эргәһенә килде лә, ҡаты ғына тауыш менән:

— Асыуланма, Ғәлләмов, боҙолдоң һин. Ниндәй безобразие, бракка сығараһың. Запас частарҙың ҡәҙерлелеген беләһең бит! Ҡара! Бригаданы артта ҡалдырыуға сәбәпсе булһаң... Үҙең беләһең, һуңғы тапҡыр әйтәм...

Ғәлләмов яуап бирмәне. Аңлай ул, әлбиттә. Нисек аңламаһын? Барыһын да аңлай. Тик бында... Ул Саниә эшләгән яҡҡа күҙ ташлай. Ә Саниә һаман шул етеҙ хәрәкәттәр яһап эшләй бирә. Смена башланғандан бирле ул әле бер генә тапҡыр булһа ла Ғәлләмов яғына боролоп ҡараманы. Ғәлләмов бер генә минут эсендә Саниәгә ҡарата асыулы уй уйлап алды. «Шуның тураһында уйлап, үҙемде онотҡанмын. Өҫтәүенә бер сменала тура

килгәнбеҙ. Шул булмаһа...» Ләкин был уй оҙаҡҡа барманы. Саниәнең ни ғәйебе бар. Ул бит эйәреп йөрөмәй, тағылмай, Ғәлләмов үҙе генә, ни эшләптер, йомшап китте...

Ғәлләмов, был турала уйламаҫҡа тырышып, бөтә иғтибары менән эшкә бирелде.

Саниә лә шул турала уйлаштыра ине. Үҙҙәренең бригадаһы алға сығыуы тураһында, үҙҙәренең Рубенко бригадаһын уҙып китеүҙәре тураһында уйлай ҙа — Ғәлләмовҡа күсә. Кисә клубта осратып, Нәғимов уға шулай тине:

— Ҡарап-ҡарап торам да, Саниә, беҙҙең Ғәлләмовтың бит рәте китә башланы. Эш бер ҙә ударный түгел, һуңғы ваҡытта... Нәмәлер бар...

Саниә уны аңланы, әлбиттә. Имеш, Ғәлләмов Саниәне яратып йөрөй ҙә, уның тураһында ғына уйлап, эше артта ҡала, имеш...

— Белмәйем, Нәғимов иптәш, минең ни ҡатнашым бар унда? Ғәлләмов бит аңлы комсомолец, нәмә эшләгәнен, ҡайҙа эшләгәнен яҡшы белә торғандыр...— шулай тине ул унда Нәғимовҡа.

— Уныһы шулай ҙа, йәш кеше бит. Беҙҙең халыҡтың башын һеҙ ҡай саҡта бик әйләндереп ташлайһығыҙ... Һин ғәйепләмә. Былай ғына әйтәм.

Шул турала уйлай Саниә. Үҙе тиҙ-тиҙ генә хәрәкәттәр яһап наждак ҡағыҙы менән клапандарҙы тигеҙләй. Тракторҙың артҡы өлөшөндә дифференциал өҫтөндә соҡонған бригадир Сухаруков ҡайһы саҡта ҡысҡырып ебәрә:

— Теләһә ни булһын, егеттәр, бирешмәҫкә!

Рубенко бригадаһы бөгөн һигеҙ сәғәт үтеү менән генә эште ташламаны.

— Терһәкле валды токарҙарға бирҙек, һин, Ғәлләмов, поршендәрҙе рәтләп бөтөр бөгөн. Нәғимов, һин карбюраторыңды рәтлә. Мин магнитоны хәҙер бөтөрәм. Ошо эштәр эшләнеп бөтмәйенсә, китмәйбеҙ, егеттәр .. Ашау ҡасмаҫ, ашығырға кәрәк.

Рубенконың был һүҙҙәре үҙенең бригадаһындағыларға ғына әйтелде лә һәм уларға ғына ишетелде.

Һәр эшсенең башында шул: нисек тә артта ҡалмаҫҡа, алдын сығырға.

Мастерскойҙа ғәҙәттәге шау-шыулы гөрөлдәү дауам итә. Мастерской һауаһында кәрәсин, бензин, төрлө май еҫтәре аңҡый. Эшселәр комбинезон кейеп эшләйҙәр. Комбинезондар, кәрәсин, майға ҡатып, еүешләнеп бөткәндәр. Трактористарҙың бит-ҡулдары ла, шул комбинезондар төҫлө үк, буялған, ҡарайған. Әйтерһең, уларҙың бөтә тәндәренән автол, кәрәсин ағылып сығып тора. Әйтерһең, ҡыҙыу эш өҫтөндә улар ябай тир менән түгел, ә автол менән тирләйҙәр. Әйтерһең, тир урынына тәндәренән май сыға.

Йәй буйы өҙлөкһөҙ эштә булған тракторҙар, мастерскойға ингәс, төҙәлергә ингән ауырыу кеше кеүек, бөтә ағзаларын иркенгә ҡуялар. Уларға операция яһала. Йәй буйына газ ҡоромона буялған моторҙың эске частары тракторист ҡулында таҙартыла, ағартыла. Әле генә газ төтөнөнә ҡарайған поршень башы эшсе ҡулында ағара, ялтырап ҡала. Өҙлөкһөҙ эшләүҙән түңәрәкләнгән, ыҡтыматлығын юғалтҡан терһәкле валдар трактористың наждак ҡағыҙы менән түңәрәкләнәләр, токарь станогында шымарып сығалар...

Их, күптән түгел генә әле яланда мастерскойға инергә сират көтөп ултырған ауырыу, тауыш-тын сығара алмай, үҙ көсө менән ҡуҙғала алмай торған «катер» йәки «интер» ударниктар ҡулында йәнләнә, моторҙың бер көйгә туҡылдауы менән гөрөлдәй, хәҙер ҡуҙғалып китергә әҙер хәлгә килә.

Рубенко менән Сухаруков бригадаһы һаман эш өҫтөндә. Мастерской ишеге башындағы ҙур сәғәт төнгө беренсе яртыны күрһәтә. Бригадалар араһында һөйләшеү тауышы ишетелмәй. Күҙҙәрҙе йоҡо баҫырға теләй. Ләкин ударсылар һаман да бирешергә теләмәйҙәр. Нисек тә, тиҙ генә етеҙ хәрәкәттәр яһап, арығанлыҡ, йоҡо килеүҙе ҡыуып ебәрергә тырышалар, һуңғы көстәрен йыялар...

Сәғәттәрҙе күрһәткәндә, Рубенко бригадаһындағы тракторист ҡыҙ Васина маховикты күтәреп маташҡанда үҙе лә һиҙмәй ҡалды — арыуҙан, тубыҡтары бөгөлөп, иҙәнгә ултырҙы. Маховик унының тубығына төштө. Быны күргән Рубенко уны ҡултыҡлап аяғына баҫтырҙы ла:

— Лиза, бар ҡайт... һиңә етер... — тине. Лиза Васина йылмайҙы, йомшаҡ һәм аҡрын ғына тауыш менән:

— Зарарһыҙ, мин былай ғына...— тине.

— Әйҙә, әйҙә, һыҙ Лиза, барыбыҙ ҙа ҡайтабыҙ хәҙер...

Шулай ҙа Васинаның иптәштәренән айырылып ҡайтаһы килмәне.

Газ үткәрә торған бер торбаны алып таҙартырға тотондо.

Күп тә үтмәй «Шторм» стена газетаһында шулай яҙылды:

## ТЕМПТЫ ТӨШӨРМӘҪКӘ!

Трактор мастерскойында ремонт эштәре ҡыҙыу темптар менән алға бара. Был биш көнлөктә Рубенко бригадаһы менән Сухаруков бригадаһы икеһе бер тигеҙ планды 160 процентҡа үтәнеләр. Улар ял көндәрендә лә эшләргә рөхсәт һорайҙар. Рубенко бригадаһы торлаҡта коммуна ойошторҙо. Улар казармала таҙалыҡ, тәртип өсөн, эскелеккә, хулиганлыҡҡа ҡаршы көрәш алып баралар.

## ТАҒЫ ЛА БЕР ЕҢЕҮ

«Совхоздың мунсаһы өлгөрҙө. Уны өлгөртөү өсөн, иптәш Усманова Галина тарафынан ойошторолған плотниктар бригадаһы, мунса эшләүсе плотниктарҙы мастерскойға алмайынса, үҙҙәре генә өлгөртөргә һүҙ биреп, улар уны үтәгәндәр һәм бүләкләнгәндәр ине. Хәҙер мунса ла өлгөрҙө. Инде мунса өсөн әллә нисә километрға тирә-яҡ ауылдарға йүгерергә кәрәкмәй. Йәшәһен мунса!..»

«15 февраль, киске сәғәт ун.

Бөгөн беҙ ауылдан ҡайттыҡ.

«Октябрь» колхозында өс көн яттыҡ. Был колхоз совхоздан алыҫ түгел, 20 километр самаһында ғына, тракторист Апуштың тыуған ауылы. (Апуш бынан 15 көндәр генә элек, тракторы менән станцияға барышлай, ауылына

ингән дә эсеп ятҡан. Киткәндә лә эсеп киткән. Юлда барғанда эскән булһа кәрәк — тракторҙан төшөп ҡалған. Крәҫтиәндәр тракторҙы ғына күреп килеп әйттеләр. Апуш тураһында һаман да булһа хәбәр юҡ. Бәлки, ҡасҡандыр.)

Бына шул ауылға барҙыҡ.

Ауыл ҙур түгел. 200 хужалыҡтан тора. Шуларҙан 120 хужалыҡ колхозда торалар.

Беҙ барған көндө үк колхоз правлениеһының киңәйтелгән йыйылышы булды. Правление председателе Әхмәтйән ағай доклад яһаны.

— Беҙҙең колхоз хәҙер өсөнсө йыл йәшәй инде. Уҙған йыл совхоздың бик күп ярҙамы тейҙе. Яҙғы сәсеүҙә еребеҙҙең яртыһын совхоз машиналары эшләнеләр. Ләкин быйыл инде беҙҙең эштәр шәптән түгел, иптәштәр. Машиналар туҙған, иҫкергән, бик ҙур ремонт һорайҙар, һабандар әле төҙәтелмәгән, арбаларҙың күбеһе ватыҡ. Хәҙер беҙгә бөтә көс менән яҙғы сәсеүгә әҙерләнергә кәрәк...

Председатель үҙҙәрендә булған бер ваҡиғаны һөйләп алды.

Колхоз төҙөлгәс тә килтерелгән бер «триер»ыбыҙ бар ине. Уҙған йыл бөтә орлоҡто шуның менән таҙарттыҡ. Быйыл да хәҙерҙән үк шул «триер» менән орлоҡ таҙартырға башлайбыҙ тип кенә торғанда, ватып ташланылар. Бер төндө бандиттар кеүек йәшерен генә йыйылғандар ҙа, өс кеше машиналар базаһына инеп, «триер»ҙы ҡайырғылап, емереп, цистерналарҙың тештәрен һындырғылап бөтөргәндәр. Ҡыҫҡаһы «триер»ҙы эштән сығарғандар. Ну беҙ уларҙың эҙенә төштөк. Бында, һеҙ беләһегеҙҙер, беҙҙең ауылдың тракторисы Аптулка һеҙҙә эшләй ине. Шуның бабаһы кулак сволочь башлап йөрөгән. Бөгөн генә әле оҙаттыҡ. Шулай һөйләне колхоз председателе. Шулай итеп бөтә ерҙә көрәш бара. Ҡайҙа ҡараһаң да, кулак беҙҙең эшкә аяҡ салырға тырыша...

Беҙ үҙебеҙ менән совхоздан бер ҙур «катерпиллер», тимерлек, слесарь инструменттары алып барғайныҡ. Тракторҙы алмаҫҡа ла уйлағайныҡ. Ҡайһы бер иптәштәр «хәҙер әле трактор ниңә кәрәк, йәй булһа ине — икенсе

эш...» тигән ҡараштар әйткәйнеләр. Васька Кудрәй (комсомол коллективының секретары): «совхоздан колхозға барғас, трактор ҡалмаһын инде. Ул үҙе бер эшкә ярар әле унда»,— тигәс, ҙур «катерпиллер» менән барҙыҡ.

Шунда уҡ колхоздың бер атын ектереп совхозға бер «триер» алып килергә ебәрҙек.

«Триер» килеп етеү менән, колхозсылар тиҙ-тиҙ генә орлоҡ таҙартырға тотондолар.

Беҙҙең өс тракторист — слесарҙар тимерлекте рәтләп, колхоздың һабан тырмалары, сәскестәренә йәбештеләр.

Беҙҙең менән барған Нәғимов, бер нисә колхозсыны алып, трактор менән колхоздың бесәнен ташырға тотондо. Ҙур трактор санаһына тау кеүек итеп бесән өйәләр ҙә — әллә бер барыуҙа уҡ инде, бер кәбән бесән тейәп ҡайталар...

Беҙ ундағы избач (йәш кенә комсомол егет) менән ике номер стена газетаһы сығарҙыҡ. Стена газетаһын өҙлөкһөҙ дауам итергә булып ҡалдылар.

Беҙ совхозға киткәндә, бөтә колхоз оҙатып ҡалды. Уларҙың беҙгә, совхозға әйткән рәхмәттәре былай ғына, исем өсөн генә түгел, ә ысын күңелдән ине.

— Һеҙҙең мастерскойҙы ҡарарға барабыҙ...— тип ҡалдылар.

Әллә ниндәй, тел менән әйтеп булмай торған бер күңеллелек, рәхәтлек ҡалды шунан киткәндә. Бөтә яланды яңғыратып, ҡысҡырып йырлайбыҙ, аҡырабыҙ, шаулайбыҙ. Үҙебеҙҙең йырҙар менән бына был совхоз яландарын ғына түгел — бөтә донъяһын яңғыратҡы килә...»

— Ағымдағы мәсьәләләрҙә берҙән-бер мәсьәлә, иптәштәр,— тине партколлектив секретары Саматов,— шофер Самохваловтың эше. Был ваҡиға, иптәштәр, һеҙҙең барығыҙға ла билдәле. Өсөнсө көн генә Самохвалов иптәш ҡатынын туҡмаған. Мин бында, ваҡиғаны үҙем һөйләмәйенсә, был туралағы ғаризаны уҡыйым. Ғариза Самохваловтар

торған казармалағы производство-тормош коммунаһы ағзалары тарафынан яҙылған. Ғариза шундай:

„Урал"  совхозының ВКП(б)  коллективы бюроһына.

Совхозда  эшләүсе трактористар:

Рубенко Тарас (партия ағзаһы),

Ғәлләмов  Әғзам (комсомол),

Усманова  Ғәлиә (партия  кандидаты).

Нәғимов (партия   кандидаты),

Саниә Саттарова (комсомолка) ларҙан.

Ғ а р из а

Бюроға беҙ шул турала белдерергә кәрәк таптыҡ. 25 февраль кис сәғәт унда беҙ торған бүлмәгә күрше шофер иптәш Самохваловтар торған бүлмәлә тауыш күтәрелде. Башта беҙ быға ныҡ иғтибар бирмәнек. Ләкин беҙ ҡатын-ҡыҙ тауышы менән «үлтерә, ярҙам итегеҙ» тигән ҡысҡырыуҙы ишеткәс, барыбыҙ ҙа улар бүлмәһенә йүгереп индек. Инһәк — картина шундай: бүлмәләге башҡа тороусылар береһе лә юҡ. Самохвалов иптәш ҡатыны Наталияны сәсенән һөйрәп иҙән буйлап ҡыйнап йөрөтә. Беҙ ингәс тә йоҙроҡ менән бер нисә тапҡыр башына һуҡты. Унан башын иҙәнгә бәрҙе лә эсенә типте. Инеү менән беҙ барыбыҙ ҙа уға ташландыҡ.

— Ярамай, иптәш Самохвалов, был ниндәй безобразие, — тибеҙ. Шунан ул ҡыҙған көйгә иптәш Рубенконы һүгергә тотондо. Бына уның һүҙҙәре:

— «Һеҙ әле ниңә йыйылдығыҙ? Кем саҡырҙы һеҙҙе? Мин үҙ ҡатыным менән теләһәм нишләйем, һеҙ унда йыйылып, өйөгөп ятһағыҙ ҙа, бер кем дә ҡушылмай.

Миндә эшегеҙ булмаһын. Вон бүлмәнән!..» Беҙ  шунда  уҡ Наталияны үҙебеҙҙең бүлмәгә алып сыҡтыҡ та, хәле ауыр булғас, автомобиль алып район больницаһына оҙаттыҡ.

Иптәш Самохвалов партия ағзаһы. Үҙе граждандар һуғышында ла ҡатнашҡан, күптәнге партиец. Шулай булғас, бигерәк тә ундай кешегә

былай ҡыланыу ярамай ғына түгел — енәйәт тип уйлайбыҙ. Ул былай ҡыланыуы менән, берҙән, казарманың тыныслығын боҙһа, икенсенән, совет закондарына ҡаршы ҡатынын хурлай, йәберләй. (Ҡатынын йәберләүе, хурлауы бер хәҙер генә түгел инде). Өсөнсөнән, бигерәк тә мөһиме — партия йөҙөнә ҡара яға.

Беҙҙең партиецтар, комсомолдар эштә лә, тормошта ла өлгө булырға тейештәр.

Коллективтың бер сара күреүен һорайбыҙ...»

(Подпистар)

— Бына шулай,— тине Саматов,—мәсьәләне асыҡландырыу өсөн, шуны әйтергә кәрәк: иптәш Самохваловтың былай ҡатынын йәберләүе тураһында миңә электән дә әйткәйнеләр. Билдәле, сара күрмәй ярамай. Хәҙер Самохваловтың үҙенә һүҙ бирергә кәрәк. Ҡаршы кеше юҡмы, иптәштәр?

Шунда уҡ бюрола ултырған Самохвалов башындағы шофер шлемын һалып теҙенә ҡуйҙы. Оҙон ғына үҫкән сәсен артҡа таба һыйпаны ла башта уңайһыҙланып, һуңға табан йәнләнеберәк һөйләй башланы.

— Хатамды мин үҙем дә һиҙәм, әлбиттә. Наташаны туҡмағаным дөрөҫ. Шуның өсөн үҙемде аҡлай алмайым. Ләкин бит сәбәбе бар. Минең урында һеҙ булһағыҙ ҙа түҙә алмаҫ инегеҙ. Бына нисек: бер көндө кооперативҡа тәмәке алырға ингән ерҙә бер ҡатын тотто ла туҡтатты, «Һин һаҡ бул, Самохвалов,— ти.— Наталия бит теге хохол Тарас менән бик уйнай, —ти.— Улар унда коммуна төҙөгәндәр ҙә башҡалары пар булышып бөткәндәр, ә Тарас бер үҙе. Шуға күрә күршеһендә генә булғас, һинең Наталияға эйәләшмәгәйе, ти. Ул ҡатын улай юҡты һөйләп йөрөрлөк түгел, үҙе ҡарт ҡына.

Бюро ағзаһы слесарь Марина Растовцова ҡоро ғына тауыш менән Самохваловҡа һорау бирҙе:

— Кем һуң ул ҡатын? Ҡайҙа эшләй?

— Ул совхоздағы бер ҡара эшсенең ҡатыны. Күптән түгел әле ауылдан килгәндәр. Землянкалары беҙҙән алыҫ түгел...

— Ә... Яҡшы беләм... Совхозда иң актив ғәйбәтселәрҙең береһе,— тине Марина һәм асыулы йылмайыу менән йылмайҙы. Ә Самохвалов дауам итте:

— Ну вот, ул ғына етмәһә, үҙем дә бер коридорҙа күрҙем. Наташа менән Тарас рәхәтләнеп, көлөшөп, һөйләшеп торалар ине... Ну, асыуың килерме инде, килмәҫме? Ҡул күтәреп һуғыуҙа мин үҙемде ғәйепле һанаһам да ҡатында ла ғәйеп күрәм Айырып ебәрергә лә әйткәйнем, үҙе риза түгел. Теләһәгеҙ нәмә әйтегеҙ инде.

Унан һуң Самохваловҡа һорауҙар яуҙы.

— Сығышығыҙ кем?—тине директор Моратов. Самохвалов урынына Саматов яуап бирҙе.

— Сығышы зарарлы түгел дә түгелеп. Ярлы крәҫтиән семьяһынан сыҡҡан...

Һөйләүҙәрҙә иң башта Марина Растовцова һүҙ алды.

— Иптәштәр, беҙ ҡыштың буйына, ҡыштың буйына ғына түгел, совхоз төҙөлә башлаған көндән алып, совхозда ҙур ауырлыҡтар кисерҙек. Был ауырлыҡтарҙың, сәбәбе, берҙән, объектив сәбәптәр, төҙөй башлағанда һәр эштә була торған ҡыйынлыҡтар булһа, икенсенән, кулактарҙың, ҡоротҡостарҙың беҙгә ҡаршы эштәре булды. Хәҙер беҙ уларҙы еңдек. Ә уларҙың, синфи дошмандың, йоғонтоһо бар әле беҙҙә. Бына Самохвалов. Коммунист иптәш эштә ударник. Ә өйҙә? Ҡатынын туҡмай. Ғәйбәткә ҡолаҡ һалып йөрөй.

Шул ғәйбәттәргә ышанып, иптәштәренә лә бысраҡ ырғыта. Дөрөҫ түгел. Рубенконың ҡатыны бар. Бына мин уның ҡатыны. Оҙаҡламай мин дә улар янына күсәм... Ундай иҫке тормош йоғонтоһонда йөрөүселәр партия сафын бысратып тормаһындар...

Иң аҙаҡтан бөтә һөйләүҙәргә йомғаҡ яһап һөйләгән Саматов:

— Дөрөҫ, иптәштәр,— тине,— ысындан да беҙгә күп ауырлыҡтар еңергә тура килде. Был турала иптәштәр дөрөҫ әйттеләр. Хәҙер беҙ совхозды төҙөүҙә тамам еңдек. Ысынлап та, ҙур еңеүҙәр бар беҙҙә: ун-ун биш көндә беҙҙең машиналар ремонттан сығып бөттөләр. Орлоҡ таҙартылып бөттө. Беҙҙә хәҙер туғыҙ удар бригада бар. Эшселәрҙең хәлдәре яҡшыра. Столовойҙы яҡшырттыҡ. Казармаларҙа таҙа, айыҡ, тәртипле тормош башланды.

Партия ойошмаһы ла нығыны. Партия уҡыуҙары тәртипле баралар. Бөтә район өсөн булған 40 кешелек пропагандистар курсы беҙҙә асылды. Партия һәм комсомолда дисциплина нығыны... Барыһын да һанап торорға кәрәкмәй. Улар билдәле, иптәштәр.

Ләкин беҙҙең алда әле тағы ҙур бурыстар тора. Ул бурыс — кешеләрҙең психологияһын яңынан төҙөү. Кешеләребеҙҙе яңынан төҙөргә кәрәк. Потапов, Ғәйнанов кеүек кулактарҙы беҙ оҙаттыҡ. Беҙҙә хәҙер сит элементтар юҡ. Ләкин беҙҙең үҙебеҙҙең аралағы кешеләрҙең, үҙебеҙҙең кешеләрҙең баштарында сит психология ҡалдыҡтары барлығын кем йәшерер? Был йәшерен түгел.

Самохвалов иптәш ваҡиғаһының төп сере лә ана шунда. Бында ваҡ буржуаз психологияһының ҡалдығы. Хосуси милекселек тенденцияһы. Имеш, ҡатын булғас та, ул ҡатын булған кеше уның нәмәһе, ул иренән башҡа кеше менән һөйләшергә лә тейеш түгел... Хатта ҡатынды туҡмауға саҡлы барып етеү. Был, иптәштәр, ысындан да беҙҙең кешеләрҙең психологияһын яңынан төҙөүҙе талап итә. Ләкин, минеңсә, иптәш Растовцова ҡыҙыуыраҡ һөйләне. Ғөмүмән түгел, ә Самохваловҡа ҡарата тәҡдим бүлегендә ул ҡыҙыуыраҡ әйтте. Бында Моратов, Тулумбиков, Ирназаров иптәштәрҙең фекеренә тулыһы менән ҡушылырға кәрәк. Кемдәрҙең ниндәй тәҡдиме бар? Күпселек Самохвалов иптәшкә ҡаты шелтә биреү яғында. Ҡаршы кеше юҡмы? Маринанан башҡа юҡ...

Парколлективҡа барышлай Нәғимов, дирекция контораһынан алыҫ түгел «катерпиллер» тракторын ебәрергә маташҡан Сафинды күрҙе. Сафин

күптән түгел генә икенсе участкала орлоҡ таҙартыуҙан ҡайтҡан, хәҙер тағы ла транспортта йөрөүендә дауам итә ине.

Нәғимов бер нисә көндән бирле инде уны күргәне юҡ ине. Үҙе, Ғәлләмовтар менән коммунаға күскәндән һуң, әле элекке торған бүлмәләренә ингәне юҡ ине.

Сафин уны йылмайып ҡаршы алды. Маховикты әйләндереп торған ломды маховик тишегенән алып, ул трактор өҫтөнән Нәғимовҡа ҡул һуҙҙы һәм:

— Был арала бер ҙә күренмәйһең, Нәғимов... Коммуна бик килеште ахыры үҙеңә...— тине. Сафиндың былай йылмайып дуҫтарса һөйләшкәнен күргәс, Нәғимов та киң итеп йылмайҙы.

— Бушап булған юҡ бит бер ҙә, Сафин дуҫ. Үҙең беләһең бит — мастерскойҙа ут кеүек янабыҙ...

— Уныһы шулай. Мин дә хәҙер көнө-төнө йөрөйөм. Кәрәсин ташылып бөтмәгән — ошо өс-дүрт көн эсендә ташып бөтөрөргә кәрәк...

Шул һүҙҙәр менән Сафин яңынан ломды, ҡулына алып, маховик тишегенә тыҡты. Бер-ике тапҡыр үҙенә таба тартып ҡапыл-ҡапыл әйләндереү хәрәкәте яһағас, тиҙ генә ломды тишектән алды. Мотор, бысҡылдабыраҡ бер нисә тапҡыр тарҡылданы ла,— тигеҙ эшләй башланы. Маховик үҙ-үҙенән әйләнеп китте.

Сафин газды һәм ут биргесте тигеҙләргә тотондо.

Нәғимов партколлективҡа табан атланы. Ул, ирекһеҙҙән, артындағы тигеҙ эшләгән машинаға боролоп ҡараны. Шунда Сафиндың ҡатыны Нәғимә күренде. Ул, ҡулындағы бәләкәс кенә төйөнсөгөн Сафинға һуҙып, нәмәлер ҡысҡыра. Ләкин трактор тауышы уның һүҙҙәрен ишетергә мөмкинлек бирмәй. Тик Нәғимәнең йылмайыулы йөҙө генә күренә. Сафиндың дә тауышы ишетелмәй. Ул Нәғимәнең яурынына ҡулын һалып нәмәлер һөйләй...

Икенсе участкала Сафин менән бергә эшләгән иптәштәре уның тураһында шулай һөйләйҙәр:

— Бер көндө беҙҙең янға Тулумбиков барҙы. Йыйылыш булды. Сторож Ғәйнановтың кулак булып сығыуы, Потапов менән улар Ванька Косачты үлтереүҙәре тураһында һөйләгәс, беҙ ғәжәпкә ҡалдыҡ. Шунан Сафин һүҙ алды. Собраниеларҙа һүҙ алып һөйләү ғәҙәте булмаған Сафин өҫтәл янына барып һөйләй башлағас, аптырап та ҡалдыҡ, һөйләй башланы теге.

— Иптәштәр,— ти,— белмәнем мин уның кулак икәнен, понимаешь, белмәнем, араҡы алып эсеп йөрөйөм. Кем уйлар уны — сторож булғас, беҙҙе яҡлап һөйләгәс, ысындан да эшсе кеше тип торам...

Беҙҙе бында килмәҫкә ҡотортто ул... Иҫерек баштан иптәштәрҙе лә ҡыйырһытып ташлағанмын... Иртән оят булды булыуын. Иптәш Тулумбиков, һин, совхозға ҡайтҡас, Рубенкоға сәләм әйт. Ғәйепләмәһен. Иҫерек баштан бер-ике тапҡыр һуғып та алғанмын буғай үҙенә... Вот сволочь, кулак булып сыҡҡан, ә?!.

Нәғимов, әле Сафинды күргәс, иптәштәренең шулай һөйләүен хәтерләне.

Саматов Нәғимовтың ҡағыҙҙарын уҡып сыҡты ла, уның күҙҙәренә туп-тура ҡарап:

— Ярай. Ярай, Нәғимов,— тине,— мин һинең турала ишеткәнем бар. Тик әйт әле һин тураһын ғына: совхозға килгәс, эскәнең бармы? Һин был һорауға шикләнеп ҡарама. Мин просто иптәштәрсә һорайым... Һинең бит тормошоңдо боҙған нәмә шул булған...

Нәғимов, күп уйлап тормайынса, ышаныслы тауыш менән:

— Юҡ,— тине. Саматов тағы ла Нәғимовтың ҡағыҙҙарын аҡтарырға тотондо. Нәғимов әле генә үҙенә бирелгән һорау һәм уға үҙенең яуабы тураһында уйларға тотондо.

— «Ысындан да эскән юҡ бит хәҙер. Эске килгәне лә юҡ. Ниңә улай? Йәй көнө теге совхоздан киткәндә, Валентинаның «эсмә, Нәғимов» тигән һүҙҙәре һаман да әле хәтерҙә ныҡ һаҡланалар. Бында иптәштәр шундай яҡшылар, яҡын дуҫтар бар бында... Эшләүе лә ҡыҙыҡ. Тормош гөрләп тора.

Рубенколар, Ғәлиәләр... Тулумбиков... Ана Сафин дә үҙгәргән. Ҡыҙыу, удар эш өҫтөндә шундай иптәштәр араһында үҙгәрәһең икән шул ул. Да... Эскән юҡ. Эскелек тураһында уйланылғаны ла юҡ...»

Шулай уйлап алды Нәғимов. Шундай уйҙар менән ул йылмайып Саматовҡа ҡараны.

— Ысын коммунист булғы килә, иптәш Саматов,— тине ул...

«Өсөнсө март.

Совхоз шаулай. Мастерскойҙа һуңғы тракторҙар ремонтта ултыралар. Совхоз усадьбаһы көндәр буйынса тракторҙар гөрөлдәүе аҫтында яңғырай. Яландарҙа ҡарҙар һиҙелеп ирей. Яланда ҡарҙар ирегәндә, бөҙрәләнеп аҡ пар күтәрелә .

Оҙаҡламай уҡыуҙарҙы ла туҡтатырға ваҡыт, йәй көнө ҡайҙа барырға? Ял йортонамы? Булмаҫ. Әллә ниңә бер ҙә арыу һиҙелмәй. Эш күп булһа ла, ҡайһы ваҡытта төндәр буйынса эшләргә тура килһә лә арытмаған... Бында ҡалырға кәрәк. Бригадалар менән далаларға китергә! Күсмә ҡыҙыл мөйөш, газета ойошторорға.

...Бөгөн Рубенколарҙың коммунаһында оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙыҡ. Улар матур торалар. Хәҙер инде казармала уларҙан башҡа ла ике производство-тормош коммунаһы бар...

Ҡыш буйынса ниҙәр генә булып үтмәне? Электр станцияһы яндырылды. Бисара Ванька Косач һәләк булды. Яҡшы егет ине ул. Беҙ уның менән һөйләшә торғайныҡ. Иҫерек булмағанда ул уйсан һәм йылмайыулы йөҙлө була торғайны. Гармунда матур уйнай торғайны ул!

Их, кешеләр! Ниндәй генә кешеләр юҡ!.. Завхоз Потапов менән ҡарауылсы Ғәйнановҡа суд булды. Электростанцияға ут төртөүселәр шулар булған икән. Машинист Михайловтан шикләнеп йөрөгәйнек. Ул да ғәйепле инде! Смена ваҡытында ҡатын-ҡыҙ артынан сығып китмәһә, идиот! Ғәйшәне күргәс, аҡылын юғалтҡан шул бахырың... Бик матур бәндә шул тегенеһе. Үҙе бер ҙә кешене мәхрүм итә белмәй. Изге күңелле ҡыҙ ул. Сиктән тыш бер ҡатлы. Әллә ни өсөн ҡыҙғанам мин уны. Бер көн әле миңә

кер йыуып килтергәйне. «Үҙемде ҡатынлыҡҡа алыр инең, Толомбай ағай, ти, мин һине бик, бик яратып йәшәр инем. Үҙеңә бына тигән балалар табыр инем» ти. Шул һүҙҙәрҙе әйткәс, үҙе ҡысҡырып иланы ла ебәрҙе. Күрәһең, үҙенең һүҙенән үҙе оялғандыр инде. Етем үҫкән шул меҫкен, бер нәмә лә белмәй. Төрлө әҙәп, оят кеүек хөрәфәттәр уға әсә һөтө менән инмәгән. Кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙәге төрлө нормалар, рамкалар менән ул таныш түгел. Ғәйшәнең туп-тура әйтелгән һүҙе өсөн мин асыуланманым. Ә ни өсөн миңә Ғәйшәгә өйләнмәҫкә? Әлбиттә, наҙан ул. Донъяға ҡарашы бик тар. Ләкин беҙҙең уҡыған, хатта вуздар бөткән күп кенә ҡатын-ҡыҙҙарҙың ошо наҙан Ғәйшәнән ниндәй артыҡлыҡтары бар? Барыбер, һаман да шул, күберәк шәхси рәхәтлек тураһында хыялланыуҙан уҙа алмайҙар. Сафлыҡ, әҙәплелек тураһында һөйләйҙәр, ә үҙҙәре ирҙәре өйҙә юҡта башҡа ирҙәр менән ҡуналар. Искусстволы тишекле бер тинлек тә аңламаһалар ҙа музыка, театр тураһында бик күп һөйләйҙәр. Ләкин был ваҡытта уларҙың йөрәктәре бер нәмә лә һиҙмәй. Улар паралич йөрәклеләр, мода өсөн генә һөйләйҙәр. Үҙҙәре папирос тарталар. Мин ундайҙарҙы күп күргәнем бар. Өҫтәүенә сиктән тыш капризлылар. Татар йәки башҡорт булһалар ҙа балалары менән русса һөйләшкән булалар. Ирҙәр менән тигеҙ хоҡуҡлы булыуҙы бер төр ҡатын-ҡыҙҙар, хата аңлап, ирҙәрҙәге иң насар күренештәрҙә генә үҙҙәренә күсерәләр.

Ғәйшәлә күңел сафлығы бар. Ул әле обывателдәр «культураһы» менән ағыуланмаған. Унда боронғо заман коммунизмы дәүеренән ҡалған балаларса ябайлыҡ бар. Кешеләр Ғәйшәне мыҫҡыл итәләр, хурлайҙар. Хатта үҙе алдында ла көлөүҙән тартынмайҙар. Был көлөүселәр араһында уның менән ҡуныусылар ҙа юҡ түгелдер әле. Имеш Ғәйшә «йомарт ҡыҙ ул», ләкин быға кем ғәйепле? Ниндәй вәхшилек!..

Бына Нәғимов улай түгел. Аҡыллы егет ул. Ике йөҙлө түгел. Туп-тура йәшәй.

Тағы Апуш юғалды. Бер хәбәрһеҙ юғалды Апуш. Үҙенән совхозда насар эҙ ҡалдырҙы. Ул — моторы шартлаған «катерпиллер». Ләкин

«катерпиллер»ҙы хәҙер төҙәттеләр... Директор урынбаҫары Сергеев эскелеккә бирелеү, эшкә һалҡын ҡарауы арҡаһында партияла ҡаты шелтә алды. Инженер-механизатор Эйдельман һуңғы айҙар эсендә эшсе коллектив араһында үҙгәреп китте...

Нәғимов, был совхозға килеп, партияға инде. Ул Ғәлиә Усмановаға өйләнде... Ниҙәр генә булманы ошо аҙ ғына ваҡыт эсендә. Шулай беҙҙең көндәр — үҙгәрешле көндәр, һәр көн беҙгә бер үҙгәреш, бер еңеү килтерә. Бәхетле дәүерҙә йәшәйбеҙ беҙ. Сөнки тормошто тамырынан алып яңынан төҙөйбөҙ, йәшәһен яҙ!

17 март.

Ҡояш көндән-көн юғарылана бара. Иртән, ҡояш күтәрелгәс тә, көн йылынып китә. Ҡар ирей. Уйһыу ерҙәрҙә ирегән ҡарҙан һыу йыйыла ла — ҡар аралаш һыу ялтырап ята. Көндөҙ йылы була, ҡар ирей, ә кискә табан туңдыра башлай. Төндәр менән, хатта, һалҡын да була. Аяҡ аҫты боҙлана...

Үткән төндө клубта кисә булды. Ҡаланан килгән художество бригадаһы яҙға әҙерлек тураһында спектакль, концерт биреп китте. Матур сыҡты кисә. Эшселәр ҡәнәғәтләнеп таралдылар.

Иң аҙаҡтан клубтан беҙ Ғәлләмов һәм Саниәләр менән сыҡтыҡ. Улар икәүләп үҙҙәренең коммуналары яғына киттеләр. Мин ишектәрҙе бикләп сыҡҡанда, улар байтаҡ ер киткәйнеләр инде. Матур ай яҡтыһы. Совхоз өҫтөндә электр станцияһының бер көйгә гөрөлдәүе һауаны ҡалтырата. Ҡайһы ваҡытта ҡайҙалыр ҡыҙҙарҙың күңелде ҡытыҡлай торған нәҙек, яғымлы көлөүҙәре, егеттәрҙең көслө йыр тауыштары ишетелеп ҡала...

Ғәлләмов менән Саниә, казармаға яҡынлашып барғанда, туҡталдылар.

Улар бер-береһенә ҡаршы туҡталдылар ҙа — баштары бергә ҡушылды. Хатта уларҙың ҡосаҡлашҡаны ла күренгән кеүек булды.

Их! Яҙ! Их, йәшлек! Шаула, яҙ, беҙҙең ҡояшлы, айлы яҙҙың йылы көндәре, һалҡын, ләкин зәңгәр төндәре — көлөгөҙ, йылмайығыҙ! Шаулағыҙ, йәштәр!

...Яҙҙың айлы төнө һалҡын, яҡшы уҡ ҡына һалҡын. Ләкин был һалҡын инде ҡышҡы бурандар түгел. Ни тиклем һалҡын булһа ла, яҙғы төндәр өшөтмәйҙәр. Сөнки бына хәҙер инде бер нисә сәғәттән үк ҡояш сығыр ҙа — йылытып ебәрер. Шундай рәхәт, шундай күңелле был яҙ көндәре!..»

Яҙғы иртәләрҙең береһе ине.

Совхоз далаларында ҡар ереп бөтөп бара. Көнсығыш яҡтағы алыҫтан зәңгәрләнеп күренгән Урал һырттарында ғына ҡайһы бер урындарҙа ҡар утрауҙары ала-ҡолалы булып күренәләр.

Яҙғы ҡояштың йылы нурҙары дала өҫтөн һөйәләр. Уйһыуыраҡ ерҙәрҙән парҙар күтәрелә. Йылы һауала һабан турғайының өҙләкһеҙ һайрауы ишетелә. Турғай ғына түгел, бөтә һауа, бөтә ер өҫтө һайраған, шаулаған кеүек тойола. Әйтерһең, ҡояш нурҙары ла ер өҫтөнә шаулап, сыңғылдап һибеләләр...

Совхозда шау-шыу.

Иртән иртүк инде совхоздың ремонттан сығып бөткән тракторҙары эргәһендә трактористар гөж киләләр, һәр бер машина эргәһендә икешәр кеше—кистән үк инде тикшерелеп, әҙерләнеп ҡуйылған тракторҙарҙы тағы ла тикшерәләр. Трактористар тынмайҙар. Уларҙың йөҙҙәренә, хәрәкәттәренә ҡараһаң — ашҡыныуҙарын, түҙемһеҙлек менән ашҡыныуҙарын һиҙәһең.

Иртәнән башлап совхоз өҫтөндә тракторҙар тауышы гөрөлдәй башланы, йөҙәрләгән тракторҙың гөрөлдәүе, бергә ҡушылып, дала өҫтөндәге асыҡ, зәңгәр һауаны көслө күкрәү менән күкрәтә.

Бөгөн совхоз походҡа сыға. Өсөнсө көн ук инде дирекция тарафынан сығарылған ҡыҫҡа ғына приказ ана әле лә дирекция һәм столовой ишектәрендә эленеп тора:

ПРИКАЗ № 126

«Урал» орлоҡ совхозының беренсе, икенсе, дүртенсе участкаларына беркетелгән трактористар, бригадирҙар, инструкторҙарға 10 апрель көндө иртән сәғәт ундан да ҡалмай үҙҙәренә беленгән тракторҙары менән

участкаларға сығырға ҡушам. 5-се (үҙәк) участкаға билдәләнгән трактористар, бригадирҙар, инструкторҙар участкала ҡалалар. Күрһәтелгән срокка бөтә машина көстәренең әҙерлеге өсөн яуаплылыҡ инженер-механизатор Эйдельманға, эшсе көстәренең әҙерлек яуаплылығы директор урынбаҫары иптәш Сергеевҡа йөкмәтелә...

Директор: Моратов.

Секретарь өсөн: Волков.

193... йыл, 8 апрель.

Приказ ғына түгел, клуб алдына эленгән ҙур плакат та шул турала һөйләй:

«30 мең га» өсөн көрәшкә! 20 мең гектарлыҡ яҙғы сәсеү планын срогында үтәү өсөн көрәшкә! 10 апрелдә социализм игене өсөн походҡа сығабыҙ! Һин әҙерме, иптәш, походҡа!»

Совхоз усадьбаһының уртаһында эшләнгән трибуна эргәһенә сәғәт 9-ҙа инде ҙур халыҡ төркөмө йыйылғайны. Шунда уҡ рабочком председателе Шубиндың сигналы буйынса, быға тиклем мастерской буйында теҙелеп, хәҙер китергә әҙер булып, моторҙары гөрләп торған тракторҙарға берҙән газ көсәйтелде. Гөрөлтө көсәйеп китте. Руль артында ултырған трактористар педалдәргә баҫтылар, ручкаларға тотондолар. Алдағы тракторҙар беренсе тиҙлек менән талғын ғына мөһабәт хәрәкәт менән ҡуҙғалып киттеләр. Участкалар һайын бүленгән трактор колонналары трибунаны әйләндереп алдылар, һәр бер колонна үҙенә айырым урын алып, совхоз йортонда биш мөйөшлө йондоҙ яһалды. Моторҙар тындылар.

Трибунаға партколлектив секретары Саматов менеп баҫты.

— Иптәштәр! — тине Саматов.

Митингыға йыйылған йөҙәрләгән совхоз эшселәренең күҙҙәре Саматовҡа ҡаранылар. Трибунаның бер мөйөшөнә ҡыҫтырылып ҡуйылған оҙон ағастағы алтын төҫлө пулат менән яҙылған ҡыҙыл байраҡтың һүҙҙәре ҡояшҡа ялтыранылар. Саматовтың һәм уның артынан һөйләгән Моратов, Шубиндың һүҙҙәре бына бөгөнгө көн кеүек йәнгә яғымлы, йөрәкте

ашҡындыра торған булдылар. Рулдәр артына ҡушлап ултырған трактористар ораторҙарҙың һүҙҙәрен, турғайҙар һайрауын йотлоғоп тыңланылар, арҡаларын ҡояш нурҙары ҡыҙҙырыуға рәхәтләнеп торҙолар.

Сәғәт 10 булғанда трактор колонналары үҙ участкаларына ҡарап юл алдылар. Участкаларға таралыусы трактористар совхозда ҡалғандарға ҡул болғай-болғай киттеләр. Саматов, Моратов һәм Шубин тракторҙар күҙҙән юғалғансы трибунанан ҡарап ҡалдылар.

Дала өҫтө трактор тауышы менән гөрләне.